ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# КискеӨфө

4-10 апрель (алағарай) 2025

№ 13 (1157)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

## БЫЛҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Кәсеп итмәй, табыш килмәй



6

Яман шештән ҡурҡып йәшәмә,

йәшәү рәүешендә сәләмәтлеккә көйлә!



8-9

Ер кәрәк ине,

йәки Япония-Финляндия мажаралары




11

Ағастарҙы ҡырҡҡыларға ваҡыт



15

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

***Арзанға яҙылып ҡалығыҙ! Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ, 2 апрелдән 13-нә тиклемге ун көнлөктә республиканың һәр ҡалаһында-ауылында ПР905 индексLы "Киске Өфө"гә 2025 йылдың икенсе яртыһы өсөн ташламалы хаҡ менән 872 һум 46 тингә яҙыла алаһығыҙ. Ошо ун көнлөктә гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер матур ғына китаптарға лайыҡ буласаҡ икәнен дә онотмағыҙ. Әйҙәгеҙ!***

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### Республикалағы һаулыҡ һаҡлау торошо һеҙҙең тормошта нисек сағыла?

***Зөмәрә ХАЛИҠОВА, Баймаҡ районы Юлыҡ ауыл амбулаторияһы фельдшеры:*** Һаулыҡ һаҡлау өлкәһендә 30 йылдан ашыу медицина стажым бар. Әле, хаҡлы ялда булһам да, район етәкселеге һорауы буйынса Юлыҡ ауылында хеҙмәт бурысымды үтәйем. Был ауылдаштарың, яҡташтарыңдың сәләмәтлеген ҡайғыртыу бурысы беҙҙең ҡанға һеңгән, көн-төн тимәй, дарыулы сумканды эләктереп, ашығыс ярҙамға ташланыу йәшәү рәүешенә, көндәлек ғәмәлебеҙгә әүерелгән. Юлыҡта тиҙҙән яңы типтағы ФАП асыласаҡ, тип вәғәҙә итәләр. Ысынында, күңел биреп, дәртләнеп эшләр өсөн һуңғы йылдарҙа бөтөн уңайлыҡтар булдырыла, был пациенттар өсөн дә бик мөһим.

Әйткәндәй, хеҙмәт юлым бағышланған тыуған ауылым Ишбирҙелә бынан биш йыл элек ана шундай заманса уңайлыҡтары һәм медицина ҡорамалдары булған модулле ФАП төҙөлдө. Был беҙҙең эште күпкә еңеләйтте. Яҡты, йылы, яңы мебель һәм медицина ҡорамалдары, санузелы булған фельдшер пункты төҙөлөүҙе халыҡ та бик ҡыуанып ҡабул итте, сөнки быға тиклем ауырыуҙарҙы иҫке, һыуыҡ амбулаторияла ҡабул итә инек. Эштең сифаты ла яҡшыға табан үҙгәрҙе: район табиптарының ауылға килеүе элек күрелмәгән хәл ине, әле иһә улар беҙгә даими килеп, урында ҡабул итәләр, физик мөмкинлеге сикләнгән һәм өлкән йәштәгеләрҙе өйөндә хеҙмәтләндерәләр. Элек анализдар тапшырырға, дарыу һатып алырға халыҡ район үҙәгенә юллана йәки көнө буйы район поликлиникаһында врачҡа инер өсөн сиратта ултырып көнөн сарыф итә ине. Әле анализдарҙы районға барып йөрөмәйенсә лә урындағы ФАП-та тапшыралар, ә материалды Баймаҡтан машина менән килеп алып китәләр. Электрокардиограмманы ла хәҙер үҙебеҙҙә үтергә була. Шулай уҡ урындағы фельдшер пункттары диспансерлаштырыу эшен дә үҙ өҫтөнә алды. Элек кешеләр бының өсөн район үҙәгенә барырға ҡыйынһынһа, хәҙер улар йөҙ проценты менән профилактик медицина тикшереүе үтә. Был осорҙа районда флюорография машинаһы ла килеп етә һала.

Тағы ла шуныһы еңелләште: элек ауылда берәйһе ҡаты сирләп китһә-фәлән, уны 60-70 саҡрымда ятҡан район үҙәгенә алып барыу оло бер проблема ине, хәҙер ФАП-тарҙы махсус ашығыс ярҙам машинаһы хеҙмәтләндерә.

Күреүегеҙсә, ауылдарҙа медицина хеҙмәтләндереүе күҙ алдында үҙгәрә, заманса кимәлдә артабан камиллаша, үҫеш кисерә, халыҡ өсөн дә, медицина хеҙмәткәрҙәре эшендә лә күп уңайлыҡтар булдырыла. Был йәһәттән беҙгә район дауаханаһы етәкселеге ярҙамы ҙур, улар һәр ваҡыт мәсьәләне ваҡытында хәл итергә тырышып ҡына тора. Ә инде бөтә был эштәрҙе ойоштороп, халыҡ һаулығын һаҡлау буйынса милли проекттарҙы тормошҡа ашырыуҙа әҙмә-әҙлекле эш алып барыусы ил һәм республика етәкселегенә ихлас рәхмәтебеҙҙе белдерәбеҙ.

## УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

# ЙӨҘ ТАПҠЫР ИШЕТКӘНСЕ...

## бер тапҡыр уҡып сыҡ!

**Бөгөн электрон баҫмалар һәм мәғлүмәт сығанаҡтары ямғырҙан һуң ҡалҡып сыҡҡан бәшмәк рәүешле күп һәм төрлө булыуға һылтанып, ҡулына гәзит тотоп та ҡарамаған кешеләрҙең йәшәп ятыуына бик ғәжәпләнәм һәм был ғәрләндерә лә хатта.**

Эйе, күптән аңлашылды инде: гәзит уҡыу бөгөн - ул һирәктәр шөғөлө, сөнки ул кешенең мәҙәнилек кимәленә бәйле һәм был гәзит уҡыусының донъяуи хәлдәр, халыҡ-ара сәйәсәт менән генә түгел, үҙ илендә булып ятҡан яңылыҡтар, тормош-көнкүреш мәсьәләләре менән дә ҡыҙыҡһыныуы, күңел зауыҡлығы, әйләнә-тирәһендәге ваҡиғаларға битараф булмауы, күберәк белергә ынтылыуы һәм быны үҙенең гражданлыҡ бурысы тип иҫәпләүе хаҡында һөйләүсе факт. Һәр кем дә тота килеп ҡулына гәзит алып уҡыуҙан мәхрүм дә әле бөгөн, сөнки ундайҙар үҙҙәрен былай ҙа күп белә тип уйлай, шуға күрә яҙма матбуғат сараларын һанламай, ә айырылмаҫ юлдашы - гаджеттарҙан сейле-бешле, икеле-микеле хәбәрҙәр уҡыуҙы мәртәбә күрә.

(Дауамы 2-се биттә).




12+

✓ **"Киске Өфө"лә баҫылғанды хатта интернет материалдары араһынан да таба алмаҫһығыҙ, сөнки был гәзит күбеһенсә тәү сығанаҡтар менән эш итә, уның геройҙары ла, даими авторҙары ла күп.**



УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

# ЙӨҘ ТАПҠЫР ИШЕТКӘНСЕ...

## бер тапҡыр уҡып сыҡ!

**(Башы 1-се биттә).**



Дөрөҫөн һәм тураһын әйткәндә, уларҙың аңзиһененә виртуаль бик ҡуйылған, улар шул тотҡонлоҡ ҡорбандарына әйләнгән. Икенсенән, гәзит бөгөн, әйтеүемсә, һәр кемгә лә эләкмәй ҙә әле, шуға күрә, иң яҡшыһы - үҙең теләгән, исмаһам, бер баҫманы булһа ла өйөнә алдырып уҡыу. Ауыл китапханалары бөгөн уҡыусылары менән йәнле генә саралар алып бара, шулар араһында гәзит йә журналды өйөнә яҙҙырып алырға хәленән килмәгәндәр китапханаға махсус килеп, гәзит уҡыған кешеләрҙе үҙем беләм, ә бына ҡала ерҙәрендә быңдай хәлдә күҙ алдына килтереүе лә ҡыйын. Бер-ике пенсионер уҡыһа, уҡыйҙыр.

Әйткәндәй, ҡала урамдарында матбуғат киоскыларын табыуы ла ауырлашты хәҙер, улар ябылып бөтөп бара, сөнки кеше унда нигеҙҙә иң беренсе планда теҙелеп торған "Тройной", "Шипр" кеүек одеколондар, "Огуречный" лосьондарын, балалар уйынсыҡтары, ҡайсы-тараҡ кеүек ваҡ-төйәк тауарҙар һатып ала, ә тигеҙ рәт булып, һарғайышып, уҡыусыһын көтөп ятҡан гәзиттәргә күҙгә лә элмәй. Ә бит уйлап ҡараһаң, донъяла дөйөм тиражы йөҙәр млрд дана тәшкил итеүсе йөҙәр меңләгән атамала гәзит һәм журналдар баҫылып сыға тора. Әгәр уларға ихтыяж булмаһа, улар бөтөнләй нәшер ителмәҫ тә ине бит. Тимәк, бар әле һәм күп улар - гәзит дуҫтары: эшлекле даирәләр вәкилдәре, интеллигенция, яңылыҡтар менән хәбәрҙар булырға теләгән ябай замандаштарыбыҙ...

Иң тәүге гәзиттәрҙең әле Боронғо Римдә ҡулдан күсерелеп таратылған төргәктәр рәүешендә сығарыла башлауы кешелектең был донъяла мәғлүмәтһеҙ йәшәй алмауын раҫлап тора түгелме? Был ҡулдан эшләнгән мәғлүмәт саралары халыҡ өсөн дә, ил менән идара итеүсе власть өсөн дә бик кәрәкле булған. Унда Сенат ултырыштарынан отчеттар, ҡала, ил, күрше илдәр яңылыҡтары хаҡында уҡырға мөмкин булған. Үҙенең бына ошо төп функцияһына гәзиттәр бөгөн дә тоғро ҡала, ләкин заманалар үтеү менән гәзиттәрҙең формаһы ла, йөкмәткеһе лә, нәшер ителеү техникаһы ла күҙ әйәрмәҫ тиҙлектә алға китте. Баҫма матбуғатты ҡыҫырыҡлаусы онлайн мәғлүмәт сығанаҡтары менән сағыштырғанда, йөкмәткеһе буйынса һәм һәр мәҡәлә, мәғлүмәт өсөн ҙур яуаплылыҡ тойғоһо менән эш итеүсе гәзит-журналдар барыбер ҙә отошлораҡ хәлдә ҡала килә, тип уйлайым, сөнки баҫма матбуғат өсөн иң мөһиме - хәҡиҡәт, уҡыусы ышанысына ихтирам, бай тематика.

Ошо йәһәттән байтаҡ йылдар инде үҙем яратып уҡыған әсә телемдәге аҙналыҡ гәзит - "Киске Өфө" хаҡында әйтеп киткем килә. Был гәзит мине башҡа баҫмаларҙы һис ҡабатламауы, үҙенең йөҙөнә һәм һүҙенә генә хас материалдар эҙләп таба алыуы менән йәлеп итә. Эйе, "Киске Өфө"лә баҫылғанды хатта интернет материалдары араһынан да таба алмаҫһығыҙ, сөнки был гәзит күбеһенсә тәү сығанаҡтар менән эш итә, уның геройҙары ла, даими авторҙары ла күп һәм улар менән әңгәмәләр уҡыусы зиһенен ҡыҙыҡлы, мөһим мәғлүмәттәр менән байыта, рухын күтәрә. Тап шундай булырға тейеш тә инде заман башҡорто. Ниндәй рубрика хаҡында һүҙ барғанын аңлағанһығыҙҙыр: "Заман башҡорто"нда баҫылған һәр әңгәмәне көтөп алам, сөнки уның геройҙары араһында милләтебеҙҙең йөҙө тип хаҡлы рәүештә әйтергә мөмкин булған зыялылар: ғалимдар, эшҡыуарҙар, йәмәғәт эшмәкәрҙәре, үҙҙәре һайлаған һөнәри өлкәлә уңыш ҡаҙана башлаған йәштәребеҙ һәм башҡа шәхестәр тип һыяҡ, бөгөнгөбөҙ хаҡында фекерҙәре менән уртаҡлаша, гәзит уҡыусыға яңы һүҙ еткерә.

Был гәзитте уҡыған мөхтәрәм замандаштарым яҡшы беләләр: "Киске Өфө"нөң ана шундай рухиәтебеҙҙе байытыусы, уның хазиналарын барлаусы, туған телебеҙҙе йәшәтеүгә, уны артабан үҫтереүгә ҙур өлөш индереүсе рубрикалары бик күп, шуға күрә лә ошо гәзитебеҙ хаҡында йөҙ тапҡыр ишеткәнсә, бер тапҡыр уны ҡулыңа тотоп уҡып сыҡсы, башҡортом! Иманым камил, уның йөҙөндә һин үҙеңә дуҫ, рухташ һәм фекерҙәш табырһың һәм артабан унан айырыла ла алмаҫһың. Шулай булһын!

**Флүрә МЫРҘАҒИЛДИНА,**
**Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре.**

КӨНАУАЗ

**Автомобиль бөгөн беҙҙең тормошобоҙҙа бик кәрәкле лә, шул уҡ ваҡытта үтә хәүефле лә техник сараға әүерелде. Ҡала урамдарын һәм күп ҡатлы йорт алдарын ғына баҫып алманы улар, ҡала-ара иркен трассалар ҙа тар хәҙер автомобилселәргә, сөнки оло юлдарҙағы юл-транспорт ваҡиғалары арҡаһында йыл һайын тиҫтәләгән меңләп кеше ғүмерҙәре өҙөлә, күптәр мәңгелеккә ғәрип булып ҡала.**

# МАШИНАНАН ҠОЛАҠ ҠАҠТЫЛАР...



Мәғлүмәттәр буйынса былтыр Рәсәйҙә бөтәһе 116190 юл-транспорт ҡазаһына осрап, 12 748 кеше һәләк булған, шуларҙың 723-ө - балалар. Шуныһы күҙгә ташлана: транспорт төрҙәре буйынса ҡарағанда, юл һәләкәттәренең иң күбеһе еңел автомобилдәр һәм улар ҡатнашлығында килеп тыуа. Сағыштырыу өсөн түбәндәге мәғлүмәттәрҙе килтереү урынлы булыр ине: юл һәләкәте еңел автомобилдәрҙә - 96 032; йөк автомобилдәрендә - 15517; автобустарҙа - 6741; мотоциклдарҙа - 8727; мопед һ.б. - 4280; тракторҙарҙа - 498.

Ә инде юл-транспорт бәхетһеҙлегенә сәбәпселәрҙе йәше буйынса алып ҡарағанда, быңдай хәл иң күбе 30 - 40 йәшлектәр араһында килеп тыуа, бөтөн ДТП-ның сирек өлөшө - 24 проценты тап улар ғәйебе менән ҡылына! Шуныһы ҡыҙыҡ: 18-21 йәшлектәр менән быңдай осраҡтар күпкә кәмерәк - 5,8 процент тәшкил итһә, 70 йәштән өлкәндәр араһында ни бары 4,1 процент ҡына. Тимәк, үтә йәштәр менән үтә өлкән водителдәр юлда үҙҙәрен тәртипле һәм һаҡ тота һәм, бәлки, ғүмер ҡәҙерен башҡаларға ҡарағанда ныҡыраҡ аңлайҙарҙыр, тигән фекер тыуа, сөнки тәүгеләре әле йәшәй генә башлаған, ә икенселәре өсөн етмештән һуң тормош айырыуса ҡәҙерле була бара. Ә теге ҡыҙыу баштар - 30-40 йәшлектәр үҙҙәрен донъя хакимы итеп тоямы, әллә был донъяға мәңгелеккә килгәнбеҙ, тип уйлайҙармы - һәр хәлдә, улар үҙ-үҙҙәренә үтә ныҡ ышана, тиҙлекте ярата, руль артында төрлөсә "эксперимент"тарға юл ҡуя, шәплеге менән кемдәрҙелер таң ҡалдырырға теләй, күрәһең. Әйткәндәй, ғәйепле водителдәрҙе стаждары буйынса ҡарағанда ла руль артында 30 йылдан ашыу ғүмерен үткәргәндәр - иң күбе: 17,2 процент. Ә реаль ысынбарлыҡ күпкә етдиерәк һәм быңдай еңел холоҡлоларға ҡарата аяуһыҙыраҡ та.

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

? ***Республикалағы һаулыҡ һаҡлау торошо һеҙҙең тормошта нисек сағыла?***

***Хәсән АҘНАҒОЛОВ, хеҙмәт ветераны, пенсионер:*** Өфө ҡалаһының Сипайлово бистәһендә хәҙер 25 йыл йәшәйем. Интернет мәғлүмәтенә ҡарағанда, бында 130 меңләп кеше йәшәй. Әгәр Башҡортостан райондарының һәр береһендә уртаса 40-ар мең кеше йәшәй икән, ти, тимәк, Сипайлово өс уртаса район хәтлеге бар, тигән һүҙ! Ярай, әйҙә, ике район ҙурлығы булһын, ти. Ул сүрәттә лә Сипайловоға ике ҙур поликлиника кәрәк булыр ине. Шуға ла беҙҙең 43-сө дауахана ғына бөтөн Сипайлово халҡын тейешенсә хеҙмәтләндерә алмай, тип әйтмәксемен. Дөрөҫ, ул ике ҡатлы бинала урынлашҡан, былтыр ҙур ремонт үткәрҙеләр, ләкин был ғына дауалау-профилактик эштәрҙең кимәлен, пациенттарҙы хеҙмәтләндереү сифатын яҡшырта алмай шул әле. Тар, оҙон коридорҙарҙа гел генә һыу булып сират була. Алдан яҙылып барһаң да, табиптың ҡабул иткәнен сәғәттәр буйы көтөп ултырырға кәрәк. Ярай, көтөргә лә риза булыр инең, табиптарҙың күбеһе ауырыуҙарға битараф, йыш ҡына тупаҫ мөғәмәләгә лә осрарға тура килә. Шуның өсөн дә мин, ғөмүмән, был поликлиникаға йыш йөрөмәҫкә, ә пенсия аҡсаһынан бер нисә ай йыйнап-төйнәп тигәндәй, түләүлегә барырға тырышам, сөнки унда үҙеңде кеше итеп тойорға, табип менән иркенләп кәңәшләшергә була.

Былтыр йәй шулай ҙа әлеге 43-сө проликлиникаға көн төштө: түләүле терапевт, хроник сирем сәбәпле, мотлаҡ инвалидлыҡ төркөмө юлларға кәрәк, тип сығарҙы. Йәй көнө кеше баҡсала була, дауахана коридорҙары аулаҡтыр, тип

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Дәүләт Думаһы икенсе һәм өсөнсө уҡыуҙа Махсус хәрби операцияла яраланған яугирҙарҙың ата-әсәләренә, хәләл ефеттәренә һәм балаларына йылына 35 календарь көнгә тиклем түләүһеҙ отпуск биреү тураһында закон ҡабул итте. Хәрби һәләк булһа, уның ата-әсәһе, тол ҡатыны һәм балалары 14 көнгә өҫтәмә отпуск алырға мөмкин, был осраҡта хеҙмәт хаҡы һаҡланмай. Хәҙер быңдай саралар өлөшләтә ғәмәлдә, әммә Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙың барыһына ла ҡағылмай. Закон фронтовиктарҙың һәм уларҙың ғаилә ағзаларының социаль яҡлауҙы көсәйтә, шулай уҡ отпускка гарантияларҙы арттыра.

✓Рәсәй Президенты Владимир Путин хәрби хеҙмәткә яҙғы саҡырылыш тураһында указға ҡул ҡуйған. "2025 йылдың 1 апреленән 15 июленә тиклем Рәсәйҙең запаста булмаған һәм хәрби хеҙмәткә алынырға тейешле 18-30 йәшлек граждандарын хәрби хеҙмәткә саҡырырға", - тиелә указда. Быйыл яҙ 160 мең егетте хәрби хеҙмәткә оҙатыу планлаштырыла. 2024 йылда яҙғы саҡырылыш - 150 мең, 2023 йылда - 147 мең, 2022 йылда 134,5 мең кешегә ҡағылды. Үҫеш Путиндың Рәсәй армияһы һанын этаплап арттырыу тураһында указдарын тормошҡа ашырыу менән бәйле. 2022 йылдың башында Рәсәйҙә 1 миллионға яҡын хәрби хеҙмәткәр бар ине. Өс йыл эсендә штат һаны 1,5 миллионға тиклем арттырылды.

✓Алғы һыҙыҡта илебеҙ һағында торған яугирҙар ҙа ураҙанан ситтә ҡалмаған. МХО-ла ҡатнашҡан Башҡортостан һалдаттарының рухи остазы, Урал арҙаяғы имам-ахуны Хәмзә хәҙрәт Хафизов ошо хаҡта һөйләне: "Ураҙа тотоусылар араһында бигерәк тә беҙҙең республика егеттәре күп. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, унда хәләл ризыҡ күп түгел, әммә ураҙа тотоусылар уны үҙҙәре әҙерләй. Беҙҙең кеүек үк сәхәр, ифтар ашай. Хәрби кеше өсөн иң мөһиме - уның эске ныҡлығы, йәғни иманы. Әгәр иман көслө булһа һәм кеше Аллаһ юлында булһа, тимәк, ул һүҙендә ныҡлы торасаҡ, башҡарған эштәре лә ышанылы буласаҡ. Изге ураҙа мосолмандарға көс бирә, имандарын нығыта".

✓Башҡортостан Республикаһы Башлығының республикала граждандар йәмғиәтен үҫтереүгә йүнәлтелгән гранттары 2019 йылда Радий Хәбиров указы менән булдырылды. "Беҙҙә грант яҙҙамы системаһы яҡшы төҙөлгән. Һуңғы биш йылда граждандар йәмғиәте институттары 1,5 миллиард һумға яҡын ошондай ярҙам алды. Беҙҙең коммерцияға ҡарамаған сектор Башҡортостан Башлығы гранттары Фонды һәм Президент гранттары фонды конкурстарында әүҙем ҡатнаша", - тип билдәләне Радий Хәбиров.

***✓ Һуңғы ваҡыт иҫеректәрҙең машиналарын конфискациялау йышыраҡ ҡулланыла башланы. Бер нисә ай ултырып сығыуҙан да бигерәк ҡиммәтле иномаркаһынан ҡолаҡ ҡағыу "текә" водителде бигерәк ныҡ айнытасаҡ.***

Әлбиттә, юл ҡазалары төрлө сәбәптәрҙән килеп тыуа, ләкин шулар араһында иң үкенеслеһе һәм ғәфү иткеһеҙе - рулдәге кешенең машинаһына эскән килеш ултырып алыуы. Тағы ла һандарға иғтибар итәйек. Былтыр бөтөн булған юл ҡазаларының 11485-е иҫерек водителдәр арҡаһында килеп тыуған. Автоброкер клуб сайты анализы буйынса, былтыр Рәсәйҙең ун төбәге араһында иҫерек водителдәр ҡатнашлығында иң күп юл ҡазаһы Краснодар крайында (535) булып, Башҡортостан был исемлектә 8-се урында (291) торһа, унын ҡарауы, беҙҙең республика был күрһәткесте 2023 йылға ҡарағанда 26 процентҡа кәметеүгә өлгәшкән. Ә бит 2023 йылдың тәүге айҙарында иҫерек водителдәр арҡаһында ҡылынған авариялар буйынса Башҡортостан тәүге өс төбәк иҫәбендә булып, 135 иҫерек водитель теркәлгән булған. Был хаҡта БР Дәүләт автоинспекция эшмәкәрлеге буйынса былтырғы йылға йомғаҡлау сығышында идара начальнигы Владимир Севастьянов та телгә алып киткәйне. Ә шулай ҙа факт факт булып ҡала: былтыр иҫерек водителдәр ғәйебе менән республика юлдарында 100 кеше һәләк булған.

Эскән килеш ҡабат-ҡабат, хатта бишенсе тапҡырға машина йөрөтөп тотолған "ҡыйыуҙар" ҙа бар икән! Был нимә тураһында һөйләй? Сәбәп бер генә - ваҡытында бындай әҙәмдәргә тейешле яза сараһы күрелмәгән, тотолған хәлдә лә ул "еңелсә ҡурҡыу" менән сикләнгән, тимәк. Мәҫәлән, 31 йәшлек ир эскән килеш машинаға ултырғаны өсөн 4 тапҡыр (!) хөкөм ителһә лә, яза сараһы еңелсә булалыр, ахыры, ул бишенсе тапҡырға йәнә рулгә тотона. Был юлы суд ҡарары ғәҙел һәм ҡәтғи була: Салауат район-ара суд тарафынан иҫерек водитель 10 айға иркенән мәхрүм ителә һәм уға 6 йыл буйы машина йөрөтөү тыйыла. Суд быны менән генә лә сикләнмәй әле: хөкөм ителеүсенең автомобиле тартып алына. Бына ошондай ҡәтғи саралар ғына айнытһа, айныта инде эсеп алып, шәпләнеп машинала елдерергә яратыусыларҙы.

Һуңғы ваҡыт, ысынлап та, иҫеректәрҙең машиналарын конфискациялау йышыраҡ ҡулланыла башланы. Бер нисә ай ултырып сығыуҙан да бигерәк ҡиммәтле иномаркаһынан ҡолаҡ ҡағыу "текә" водителде бигерәк ныҡ айнытасаҡ, һүҙ ҙә юҡ. Былтыр, мәҫәлән, Бүздәк районынан берәүҙе эскән килеш машинала йөрөгәне өсөн тәүге тапҡыр административ яуаплылыҡҡа тарттыралар, ләкин был уға бер нисек тә тәьҫир итмәй. Ҡабатлап иҫерек килеш тотолғас, енәйәт яуаплылығына тарттырыла һәм уның Volkswagen Touareg машинаһы тартып алына. Ә бына 37 йәшлек Өфө кешеһе шулай уҡ ҡабатлап иҫерек көйө машина йөрөткәне өсөн ике йылға транспорт сараһы йөрөтөү хоҡуғынан мәхрүм ителә, ә "Рено Дастер" иномаркаһы полиция һәм суд приставтары тарафынан Махсус хәрби операция ихтыяжына оҙатыла.

Бөтөн был осраҡтарҙы теҙеп һанап тормайынса ла яҡшы аңлашыла торғандыр: бынан ары иҫерек водителдәр элекке кеүек штраф түләп кенә ҡотола алмаясаҡ, шул ҡылығын ҡабатлап эләккән хәлдә йә иркенән, йә машинаһынан яҙа. Сөнки БР ЮХХДИ башлығы Владимир Севастьянов һүҙҙәре менән әйткәндә, рулдәге иҫерек - потенциаль кеше үлтереүсе ул. Бындай әҙәмдәрҙе рулгә ултырыуҙан тыйып, уның яҡындары һәм таныштары ла кемдеңдер ғүмерен ҡотҡарып ҡалыуға булышлыҡ итәсәк. Шуның өсөн иҫерек водителдәргә ҡаршы йәмәғәтселек менән бергә көрәшеү тағы ла һөҙөмтәлерәк буласаҡ.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ

# РӘСӘЙ ЯРҘАМҒА АШЫҠТЫ

**Курскиҙың сик буйҙары райондарында һаман булһа һуғыштар дауам итә. Дошман беҙҙең ергә теше-тырнағы менән йәбешеп ята һәм Курскиҙың Гуево районында һәм Рәсәй менән сик буйҙарында бөтөн булған хәрби көстәрен тупларға маташа, һәр бер метр ер өсөн тартҡылаша. Украина хәрби көстәре төнгө ваҡыттарҙа FPV-дрондарын хәрби сәптәргә генә тоҫҡап ҡалмай, аңлы рәүештә уларҙы тыныс объекттарға ла осора.**

Рәсәй Ҡораллы көстәренең "Төньяҡ" хәрби төркөмө Курскиҙың Горналь, Гуево һәм Олешня тораҡ пункттарында нығытма ҡорған боевиктарҙы ҡыҫырыҡлай, Украина ғәскәренең тере көстәре һәм техникаһына ерҙән дә, һауанан да ут асып, тәүлек эсендә 200-ләп оккупантты юҡ итте. РФ Оборона министрлығының 30 марттағы хәбәре буйынса, Рәсәй осоусылары ҡеүәтле Ми- 28НМ вертолетында дошман позицияларына ут яуҙырып, Украина хәрби көстәренең бронетехникаһын һәм тере көстәрен ҡыйратҡан. Рәсәй хәрби хеҙмәткәрҙәре 30 мартҡа ҡарата Донецк Республикаһының Запорожье пунктын тулыһынса азат иткән.

Был ваҡытта АҠШ президенты Дональд Трамп Гренландияны Америкаға ҡушыу хыялы менән яна. "Гренландия беҙҙеке буласаҡ, 100 процент ышаныс менән әйтәм",- тип белдерә ул. Быныӊ өсөн беҙгә көс ҡулланыу ҙа кәрәкмәйәсәк, ти ул, ләкин, әгәр кәрәк була икән, хәрби көс ҡулланыу ҙа күҙҙә тотола. Был ниәтен Трамп, йәнәһе лә, милли һәм халыҡ-ара хәүефһеҙлек тәьмин итеү өсөн кәрәк, тип аңлата. Шул уҡ ваҡытта ул был йәһәттән Гренландия халҡының фекерен белмәүен таныны, ләкин уларҙы Америка граждандары өгөтләргә тейеш, тип белдерҙе.

Бынан тыш, АҠШ Украинаға ер аҫты ҡаҙылмалары буйынса өҫтәмә шарттар менән тулыландырылған яңы проектты тапшырҙы. Был документ бөтөн файҙалы ҡаҙылдыҡтарҙы, шул иҫәптән, нефть менән газды ла, үҙ эсенә ала. Тәүге документтың күләме ни бары дүрт бит булһа, яңыртылған вариант... 18 бүлектән тора. Киевтың күпселек чиновниктары Америка тарафынан ҡуйылған бындай шарттарға ризаһыҙлыҡ белдерә. Әгәр был Килешеүгә ҡул ҡуйыла ҡалһа, Киев тулыһынса Вашингтон контролендә ҡаласаҡ. Өҫтәүенә, был Килешеү ваҡыт яғынан сикләнмәгән. Ҡаҙылма байлыҡтарҙан алынған табыш шунда уҡ валютаға әйләндерелеп, Украинанан ситкә сығарыласаҡ. Быныӊ менән Трамп хакимиәте Украина конфликты башланғандан алып уға АҠШ тарафынан күрһәтелгән хәрби һәм иҡтисади ярҙамды түләтеү рәүешен күҙҙә тота. Украинаның Рада депутаттары ҡыйын хәлдә ҡалды: уларға парламент кимәлендә был Килешеүҙе ратификацияларғамы, юҡмы? "Был бит Украинаны күрәләтә резервация йә колония хәлендә ҡалдырыу буласаҡ",- ти Юғары Раданың элекке депутаты Владимир Олейник. Британияның The Telegraph гәзите яҙып сығыуынса, президент Трамп Украинаны АҠШ сәнәғәтенең ресурс биҫтәһенә әйләндерергә теләй; был Зеленскийҙың башына пистолет терәү менән бәрәбәр буласаҡ.

Америка Японияға ла барып етеште. АҠШ хәрбиҙәре Япониялағы үҙ көстәрен хәрби командование кимәленә үҙгәртеп, Токио менән хеҙмәттәшлекте көсәйтергә ҡарар итте, сөнки Дональд Трамп хакимиәте Ҡытай Халыҡ Республикаһын Тайванға һөжүмдән тотҡарлап тороуҙы үҙенең төп маҡсаты тип иҫәпләй, гәрсә был бәләкәй генә ил менән Ҡытай араһы әлегә тыныс һәм Тайвандың кемдәндер ярҙам һорап яу һалғаны юҡ. Тайванда Америка базалары булмаһа ла (әлегә), был бәләкәй ил хәрбиҙәре баштан-аяҡ АҠШ ҡоралы менән ҡоралланған. Дөрөҫөн әйткәндә, Тайвань Америка өсөн Ҡытайға баҫым яһау сараһы булып хеҙмәт итә.

Ә бына бәлә-ҡазаға юлыҡҡан илдәр ниңәлер АҠШ-ҡа түгел, Рәсәйгә мөрәжәғәт итә. Ошо көндәрҙә 7,1 магнитудалы көслө ер тетрәүҙән зыян күргән Мьянма властары Рәсәйҙән ярҙам һораны һәм беҙҙең 120 белгестән торған ҙур төркөм, шул иҫәптән ҡотҡарыусылар, табиптар, кинологтар бәләгә ҡалған ил халҡына ярҙамға ашыҡты. Өҫтәүенә, беҙҙең МЧС самолеты бортында урынлашҡан аэромобиль госпиталь шулай уҡ Мьянма еренә килеп төштө. Рәсәй ҡотҡарыусылар төркөмө менән бергә бында тағы ла Ҡытай, Һиндостан, Сингапур, Таиланд белгестәре лә эшләй. Беларусь Республикаһының "Зубр" махсус ҡорткарыусылар отряды иһә бөтәһенән дә алдараҡ килеп төшкәйне, тип хәбәр итә RT мәғлүмәт сығанағы. Илдәр араһында бына шулай бер-береңде "стена аша күренгән бүре"нән түгел, ә кәрәк саҡта стихия бәлә-ҡазаларынан һаҡлау һәм ҡотҡарып ҡалыу өсөн барлыҡ тыныс, гуманлы саралар менән көрәшеү генә үҙ-ара мөнәсәбәттәрҙе көйләй һәм емешле хеҙмәттәшлекте нығытыуға ярҙам итә, илдәрҙе һәм халыҡтарҙы бер-береһе менән дуҫлаштыра, туғанлаштыра.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

өмөтләнеүем бушҡа булды. Әйткәндәй, беҙҙең Ҡариҙел яры урамында әлеге шул 25 йыл буйына даими участка терапевының булғаны ла юҡ. Ҡасан барма, икенсе участка табибына ебәрәләр, ә ул, әлбиттә, ризаһыҙлыҡ күрһәтә: үҙенең сирлеләре лә баштан ашҡан бит. Меӊ бәлә менән мәсьәләне бүлек мөдире аша хәл иткәс, ҡараласаҡ табиптар исемлеген ҡулға тотоп, неврологҡа сиратҡа баҫтым, сөнки ултырырға эскәмйәлә урын юҡ, стенаға һөйәлеп, таяғыңа нығыраҡ таянып торорға кәрәк. Өс сәғәт тә үтмәне, "изге сират" ишегенә килеп тә еттем. Бәхетһеҙлегемә, ауырыуҙар яратмай һөйләгән П. тигән оло ханым ҡабул итә булып сыҡты. Килеп инеү менән "Ишекте теге яҡтан ябығыҙ, сәй эсергә бирегеҙ", тип сәрелдәне был. "Төшкөлөккә әле бер сәғәт бар", тип әйтеүем үҙ башыма ғына булды: ул мине хатта ҡарап та, хәлде һорашып та торманы, ҡағыҙыма ҡул ҡуйҙы ла сығарып та ебәрҙе.

Мин, ярай, инвалидлыҡ юллау йүнәлтмәһе менән эләгә алдым "узкий" тип аталған белгестәргә, ә бит үҙаллы рәүештә уларға яҙылыуы ла оло бер проблема. Мәҫәлән, гастроэнтерологҡа, ревматологҡа бында бер ҡасан да яҙылып булмай - ғәжәп! Яңыраҡ күршем, беҙҙең участкаға яңы терапевт килгән, тип ҡыуандырҙы ла ул, тик уныһы күпмегә сыҙар - әйтеүе ҡыйын. Республика етәкселеге тарафынан баш ҡалабыҙҙың муниципаль дауалау учреждениелары эшен дә яҡшыртыу, камиллаштырыу буйынса хәстәрлек күрелһен ине, тип әйтмәксе инем. Бөтә проблемаларҙы ла ил Президентына яҙып хәл итергә ярамай бит, уның былай ҙа эше күп...

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Мазут ағыу эҙемтәләрен бөтөрөү башланғандан алып Анапа һәм Темрюк районы яры буйында 200 тоннанан ашыу нефтле ҡалдыҡтар йыйып алынған, тип хәбәр итә РИА Новости. Рәсәйҙең Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, 19 пляжда водолаздар ике мең тапҡырҙан ашыу диңгеҙ төбөнә төшөп, 3,1 мең квадрат метр майҙанды тикшергән. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 2024 йылдың 15 декабрендә Керчь боғаҙында ике нефть танкеры һәләкәткә осрағайны.

✓Махсус хәрби операцияла табиптарға ғәйәт ҙур яуаплылыҡ өҫтәлә. Шулай ти Борай районынан "Афина" позывнойлы шәфҡәт туташы. Әлеге ваҡытта яҡташыбыҙ фронт госпиталендә хеҙмәт итә. Ул хәрби хәрәкәт зонаһында рух көсөнөң оло әһәмиәткә эйә булыуын билдәләне. "Афина" МХО-ға тиклем Өфөнөң Ҡыуатов исемендәге Республика клиник дауаханаһында операция шәфҡәт туташы булып эшләй. Ул медицина колледжын тамамлағас та хәрби ойошмала эшләргә теләй, әммә ҡыҙҙы атаәсәһе был уйынан кире күндерә. Әммә "Афина" маҡсатына тоғро ҡала һәм МХО биләмәһендә хеҙмәт итеү юлын һайлай.

✓2025 йылдың 1 мартынан шәхси йорттарҙы эскроу иҫәбен ҡулланып ҡына төҙөргә мөмкин. Заказсы йортто ҡабул итеп, документҡа ҡул ҡуйғандан һуң, 14 эш көнө эсендә күсемһеҙ милекте теркәргә бурыслы. Әгәр был килешеүҙә яҙылған булһа, подрядсы ла теркәй ала, тип асыҡлыҡ индерҙеләр Башҡортостан буйынса Росреестрҙа. Льготалы "ғаилә ипотека"һы аҡсаһын шулай уҡ эскроу аша шәхси йорт һалыу өсөн тотонорға мөмкин. Подрядсылар Берҙәм торлаҡ төҙөлөшө мәғлүмәт системаһында компания, шәхси йорт проекттары, яҡынса хаҡы, эштәрҙе башҡарыу ваҡыты, шулай уҡ эскроу иҫәбе асылған банк тураһында мәғлүмәт баҫтырып сығарырға тейеш.

✓Ҡырмыҫҡалы районының Александровка ауылында "Йәшәү өсөн инфраструктура" милли проекты сиктәрендә 23 метр оҙонлоҡтағы шишмә күпере төҙөкләнderelә. Ауыл халҡы өсөн был айырыуса мөһим объект, сөнки Р-240 Өфө - Ырымбур трассаһына сығыуҙы тәьмин итә. Авария хәлендәге күперҙе 2024 йылда ремонтлай башланылар. Хәҙер объекттың әҙерлеге 60 процент тәшкил итә. Күперҙе төҙөкләндереү эше 2025 йылда тамамланырға тейеш. Әлегә урындағы халыҡ трассаға сығыу өсөн урау юлдан файҙалана.

✓Таиландта ер тетрәгән. Уның магнитудаһы 7,7 - 7,9 балл менән баһалана. Бангкокта бейек-бейек йорттар емерелә. Әлегә ҡорбандар һәм килтерелгән зыян суммаһы тураһында аныҡ мәғлүмәттәр юҡ. Яҡынса мәғлүмәттәр буйынса, Таиландтың баш ҡалаһында илебеҙҙән ике меңгә яҡын туристың булыуы ихтимал.

✓ *Беҙ бер тенденцияға иғтибар иттек: колледжда ремонт яһағандан һуң унда уҡырға инергә теләгән студенттар күбәйә. Хәҙер ремонт үткәрелгән колледждарға инеүе ҡыҙыҡлы.*



ҠЫҪҠАСА

# ИМЕНЛЕКТЕ...

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республиканың терроризмға ҡаршы комиссияһы һәм оператив штаб ултырышын үткәрҙе.** Ҡатнашыусылар май байрамдарында йәмәғәт именлеген тәьмин итеү мәсьәләләрен тикшерҙе. Республика етәксеһе һыҙҙаренсә, май айында ойошторолған байрамдарға, айырыуса Еңеүҙең 80 йыллығына арналған сараларға, атап әйткәндә, Өфөлә тантаналы парадка халыҡтың күпләп килеүе көтөлә. Йәмәғәт тәртибен һәм граждандарҙың хәүефһеҙлеген тәьмин итеү өсөн идара итеү ҡарарҙары әҙерләнгән, шулай уҡ оператив штаб булдырылған. Был хаҡта республика буйынса эске эштәр министры вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Артур Сәйфуллин хәбәр итте. Ведомство вәкилдәре транспорт инфраструктураһы объекттарын терроризмдан һаҡлауҙы көсәйтеү сараларын ҡараны, май байрамдары осоронда ведомство-ара үҙ-ара эш итеү тәртибен, шулай уҡ хоҡуҡ һаҡлау органдары, оператив һәм авария хеҙмәттәре эшенең төп йүнәлештәрен билдәләне.

✓ **2025 йылда Башҡортостанда "Йәшәү өсөн инфраструктура" милли проекты сиктәрендә М-5 "Урал" (Шишмә - Аксенов - Ҡырғыҙ-Миәкә) трассаһының 21 саҡрымлыҡ участкаһында ремонт эштәре башҡарыла.** Ул Әлшәй, Дәүләкән, Миәкә, Шишмә райондары биләмәләре буйлап үтә. Эшселәр юл япмаһын яңырта, ситтәрен нығыта, юл тамғалары һыҙа. Ремонт көндәр бер аҙ яҡшырғас башлана, тип хәбәр итә Башҡортостан Хөкүмәтенең матбуғат хеҙмәте. Башҡортостан транспорт һәм юл хужалығы министрының беренсе урынбаҫары Виктор Жульков һыҙҙаренсә, был трасса республиканың төрәк юлдар селтәренә инә. Бынан тәүлегенә 5 мең, ә айырым участкаларҙа 12 мең тирәһе машина үтә. Тап шуға күрә юлдың сифатлы булыуы мөһим.

✓ **Башҡортостанда быйыл баланы беренсе класҡа яҙыуға 12,1 меңдән ашыу ғариза бирелгән. Был хаҡта социаль селтәрҙәге сәхифәһендә республиканың мәғариф һәм фән министры Илдар Мәүлитбирҙин хәбәр итте.** Дәүләт хеҙмәттәре аша 10,3 меңдән ашыу ғариза тапшырылған. Ведомство етәксеһе һыҙҙаренсә, кампанияның беренсе этабы - 1 апрелдән 30 июнгә, ә икенсеһе 6 июлдән һәм 5 сентябргә тиклем ойошторола. "Беренсе этап мәктәпкә уҡырға инеү өсөн өҫтөнлөклө хоҡуҡҡа эйә булған балалар, шулай уҡ беркетелгән территорияла, йәғни мәктәп урынлашҡан районда йәшәгән балалар өсөн тәғәйенләнгән. Икенсе этап иһә беркетелгән биләмәлә йәшәмәгән балалар өсөн. Йәғни ошо этапта икенсе райондың мәктәптәренә ғариза бирергә мөмкин", - тине Мәүлитбирҙин. Республика дәүләт идаралығының һанлы үҫеш министры Геннадий Разумикин мәғлүмәттәре буйынса, Өфө, Нефтекама, Салауат, Стәрлетамаҡ, Октябрьский, Сибай, шулай уҡ Туймазы, Өфө, Ишембай һәм Бәләбәй райондары әүҙемлек күрһәткән.

ТӨРЛӨҺӨНӨН

# ДӘҮЛӘТ ДУМАҺЫНДА...



**Башҡортостан - илдә урта һөнәри белем биреү учреждениелары һаны буйынса лидерҙарҙың береһе. Республикала 92 колледж һәм 44 филиал эшләй. Дәүләт Думаһының Мәғариф буйынса комитетының күсмә кәңәшмәһендә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ошондай һандар килтерҙе.**

Кәңәшмәнең темаһы - кадрҙар әҙерләүҙең һөҙөмтәлелеген күтәреү өсөн Башҡортостанда урта һөнәри белем биреү системаһын яңыртыу тәжрибәһе. "Беҙҙә колледждарҙың инфраструктураһын яҡшыртыу, уларҙы матди-техник яҡтан йыһазландырыу, шулай уҡ ятаҡтарын капиталь ремонтлау өсөн республика программаһы ҡабул ителде. Беҙ бер тенденцияға иғтибар иттек: колледжда ремонт яһағандан һуң унда уҡырға инергә теләгән студенттар күбәйә. Хәҙер ремонт үткәрелгән колледждарға инеүе ҡыҙыҡлы. Тағы ла бер мөһим бурыс - студенттарҙың остаздарына ярҙам итеү. Беҙҙең колледждарҙа 5 меңдән ашыу уҡытыусы һәм 500-гә яҡын производствоға өйрәтеү мастеры эшләй. 2022 йылдан иң яҡшы уҡытыусыларға һәм производствоға өйрәтеү мастерҙарына грант ярҙамы күрһәтелде. Өс йыл эсендә 50 белгес 690-шар мең һумлыҡ грант алды. Һәләтле студенттар өсөн стипендиялар күләме һәм һаны арттырылды", - тип билдәләне республика етәксеһе.

Хәбәр ителеүенсә, былтыр республикала 15 колледжда капиталь ремонт эштәре башҡарылды. Республикала, Радий Хәбировтың ҡушыуы буйынса, колледждарға 2000 кешегә күберәк ҡабул итәләр. Улар иһә - оборона сәнәғәте предприятиелары өсөн эшсе кадрҙар. "Профессионалитет" федераль программаһы Башҡортостан колледждарын үҫтереүгә нығ ярҙам итә. Ошо программа сиктәрендә республикаға 1,6 миллиард һумдан ашыу федераль субсидия йәлеп ителде. Әлеге эштәр буйынса беҙҙең төбәк илдә беренсе урынды биләй.

# ХӨКҮМӘТ ОТЧЕТ БИРӘ

**Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы депутаттары пленар ултырышта республика Хөкүмәтенең 2024 йылдағы эш һөҙөмтәләре тураһында отчетын тыңланы.**

Билдәләнеүенсә, Махсус хәрби операция бурыстарын хәл итеү, яугирҙарға һәм уларҙың ғаиләләренә ярҙам күрһәтеү төп йүнәлеш булып ҡала. Былтыр ошо маҡсатка 13 миллиард 400 миллион һум аҡса йүнәлтелгән. Республикала шифахана-курорт дауалауынан алып льготалы газ үткәреүгә тиклем 43 төбәк ярҙам сараһы ғәмәлдә. Махсус хәрби операция биләмәһенә 146 гуманитар ылау оҙатылған.

Балалар баҡсаларын ремонтлау буйынса федераль программа сиктәрендә республикала 2025-2027 йылдарҙа 16 мәктәпкәсә учреждение ремонтлана. Былтыр 1577 урынлыҡ 4 мәктәп, шул иҫәптән һаулыҡ мөмкинлектәре сикләнгән балалар өсөн "Йондоҙ" белем биреү үҙәге сафҡа инде, 6 мәктәп капиталь ремонтланды. Быйыл 35 мәктәптә эштәр тамамлана. Киләһе йылда 10 меңдән ашыу уҡыусыға иҫәпләнгән 9 мәктәп файҙаланыуға тапшырыла.

Башҡортостан спорт ҡоролмалары төҙөлөшө темптары һәм уларҙың һаны буйынса илдә лидерҙар иҫәбендә. Былтыр өс ҙур объект сафҡа индерелде: Көрәш һарайы, Фехтование үҙәге һәм Ишкәкле слалом өсөн ҡоролмалар комплексы. Быйыл тағы 5 спорт объектын файҙаланыуға тапшырыу планлаштырыла. Еңел атлетика манежы менән спорт комплексын һәм олимпия резервы училищеһын, шулай уҡ Бокс үҫтереү үҙәген һәм Теннис академияһын проекттар эштәре бара.

Былтыр 123 йәмәғәт киңлеге төҙөкләндерелеп, ошо күрһәткес буйынса республика Рәсәйҙә 7-се урынға сыҡҡан. 1220 километр автомобиль трассаһы норматив хәлгә килтерелгән. 60 километрҙан ашыу автомобиль юлы сафҡа индерелгән. 26 күпер һәм юл үткәргес төҙөлгән һәм ремонтланған. Тулайым ауыл хужалығы продукцияһы күләме буйынса республика илдең тәүге ун төбәге иҫәбенә ингән һәм Волга буйында икенсе урынды биләгән.

# БЫЛ КАДРҘАРҒА ҠЫТЛЫҠ ҘУР

**Евразия ғилми-белем биреү үҙәгенең вуз-ара студенттар кампусында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров урта һөнәри белем биреү ойошмалары студенттары лидерҙары менән осрашты.**

"Республикала 92 колледж бар, уларҙың һаны буйынса илдә алдынғы урындарҙы биләйбеҙ. Уларҙа 120 мең студент белем ала. 169 белгеслек һәм 84 эшсе һөнәр буйынса кадрҙар әҙерләнә. Беҙҙә күп кенә тармаҡтарҙа квалификациялы кадрҙарға ҡытлыҡ ҙур. Эшсе һөнәрҙәр йәнә популярлыҡ яулай бара. Технологияларҙы үҫтереү, автоматлаштырыу, һанлы форматҡа күсеү һөҙөмтәһендә һеҙҙең алда киң мөмкинлектәр асыла. Һеҙ - заманса ҡорамалдарҙа эшләү, мөһим техник оҫталыҡ, юғары квалификация алыу мөмкинлеге булған яңы быуын белгестәре. Быларҙың барыһы ла һеҙгә профессиональ яҡтан үҫешеүҙә мөһим роль уйнай. Беҙ урта һөнәри белем биреүгә ҙур иғтибар бүләбеҙ, колледждарҙа һәм ятаҡтарҙа капиталь ремонт эшләй башланыҡ", - тине Радий Хәбиров.

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, республика Башлығы тәҡдиме менән 2022 йылдан урта һөнәри белем биреү учреждениеларын яңыртыу буйынса төбәк программаһы ғәмәлгә ашырыла. Былтыр 15 колледжға 331 миллион һумлыҡ капиталь ремонт яһалды. "Өс йылда республика ҡаҙнаһынан 29 колледжды капиталь төҙөкләндереү өсөн 1,3 миллиард һум бүлдек. Быйыл Мәсәғүт педагогия һәм Аҡъяр тау колледжын, шулай уҡ Башҡорт агросәнәғәт колледжының Шишмә филиалын ремонтлайбыҙ. Алты колледж ике йылда ҡорамалдарҙы яңыртыуға 30-ар миллион һум аҡса алды", - тип билдәләне Радий Хәбиров.

# АҒАС УЛТЫРТЫУ ҺӘМ...

**"Башинформ" мәғлүмәт агентлығы майҙансығындағы "Профи" медиа клубында уҙған түңәрәк ҡорҙа республикала ағас ултыртыу акциялары тураһында һөйләнеләр. Унда республика район һәм ҡала киң мәғлүмәт сараларының 70 вәкиле ҡатнашты.**

Журналистарҙың һорауҙарына Башҡортостандың урман хужалығы министры урынбаҫары Альберт Закиров, тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министры урынбаҫары Шамил Фархов, торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры урынбаҫары Вилорий Угаров һәм Өфөнөң торлаҡ-коммуналь хужалыҡ идаралығы начальнигы урынбаҫары Данил Ғәлиуллин яуап бирҙе. Тикшерелгән темалар иҫәбендә - "Йәшел Башҡортостан", "Рәсәй һыуы" кеүек күләмле акциялар, макулатура йыйыу буйынса Бөтә Рәсәй "Бум баттл" акцияһы. Бынан тыш, дәүләт урман фонды биләмәһендә "Хәтер баҡсаһы" ағас ултыртыу акцияһын үткәреү тураһында иғлан иттеләр. Ул Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында һәләк булған совет кешеләре тураһында хәтерҙе һаҡлауға йүнәлтелгән, шулай уҡ МХО геройҙарына арналған. Акция дәүләт башлығы Владимир Путиндың ҡушыуы буйынса бойомға ашырыла. Быйыл, Бөйөк Еңеүгә 80 йыл тулған йылда, "Хәтер баҡсаһы" тағы ла күләмлерәк итеп үткәреләсәк, тип белдерелде.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Башҡортостанда торлаҡты тәүлек әйләнәһенә ҡуртымға алыу өсөн иң ҡиммәт хаҡ теркәлгән. Фатирҙың уртаса ҡуртым хаҡы - 2,5 мең һум. Ә ҡаланан ситтәге йорт тәүлегенә 8,2 мең һум тора. Уҙған йылдың февраленән тәүлек әйләнәһенә ҡуртымға тапшырылған торлаҡҡа һорау - 66 процент, ә тәҡдим 33 процентҡа артҡан. Мәскәүҙә, Санкт-Петербургта уртаса хаҡ 4,8 мең һәм 3,2 мең һум тәшкил иткән. Краснодар крайында - 3,2 мең һум. Өфөлә фатирҙарҙы оҙайлы ваҡытҡа ҡуртымға биреү тәҡдимдәре 37 процентҡа күберәк.

✓ Башҡортостанда 2025 йылдың ғинуарында 2741 сабый тыуған. Был 2024 йылдың ғинуарына ҡарағанда 72 сабыйға аҙыраҡ, тип хәбәр итте республика статистиктары. 2025 йылдың ғинуарында республикала 4837 кеше вафат булған. Был да уҙған йылдың ғинуары менән сағыштырғанда 72 кешегә кәмерәк (4909 кеше үлгән). Шул уҡ ваҡытта Башҡортостанда ғаилә ҡороусылар күбәйгән. Мәҫәлән, 2025 йылдың ғинуарында 1323 пар өйләнешкән (былтыр ғинуарҙа 990 пар сәстәрен сәскә бәйләгән). Республикала айырылышыуҙар кәмегән. Ағымдағы йылдың ғинуарында 999 никах тарҡалған. 2024 йылдың ғинуарында 1447 айырылышу осрағы теркәлгән.

✓ Яҡташыбыҙ лотереяла 15 миллион һумдан ашыу аҡса отҡан. "Столото" мәғлүмәттәре буйынса, 11 мартта Мәскәү ваҡыты буйынса киске сәғәт 6-сы яртыла "Спортлото "6 из 45" лотереяһының 13976-сы тиражы барышында суперприз - 15 271 876 һум аҡса уйнатылған. Был юлы яҡташыбыҙға уңыш йылмайған. Ул отҡан аҡсаһын алыу өсөн лотерея үҙәгенә мөрәжәғәт итмәгән әле. Бәлки, ул был хаҡта белмәйҙер. Әлеге ваҡытҡа уның мобиль ҡушымтала 60 һумға бер билет һатып алыуы тураһында ғына билдәле.

✓ Башҡортостандың йәш спортсылары спорт акробатикаһы буйынса Рәсәй беренселегендә иң яҡшылары тип танылды. Орел ҡалаһында үткән турнирҙа илдең 34 төбәгенән 11-16 йәшлек 300-ҙән ашыу спортсы ҡатнашты. Октябрьский ҡалыһы хакимиәте башлығы Алексей Пальчинский хәбәр итеүенсә, Дина Низаева менән Тихон Брезгин ҡатнаш дисциплинала пьедесталдың юғары баҫҡысына күтәрелде. Төркөмдәр программаһында Маргарита Садовникова, Камилла Кириллова, Анастасия Иванова икенсе булды. Билдәләнеүенсә, Октябрьский ҡалаһы Башҡортостанда спорт акробатикаһы буйынса төп үҙәктәрҙең береһе булып тора.

✓ Башҡортостан көрәшселәре грек-рим көрәше буйынса Рәсәй беренселегендә призлы урындар яуланы. Республиканың Спорт министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, 55 килограмға тиклемге ауырлыҡ категорияһында Илья Кандалин - икенсе, 63 килограмға тиклемге ауырлыҡ категорияһында Данил Мәрҙәнов өсөнсө урынды алды. Ике спортсы ла Октябрьский ҡалаһының спорт мәктәбендә Алексей Зиманов етәкселегендә шөғөлләнә.

ДЕПУТАТ ҺҮҘЕ

# ХӘСТӘРЛӘҮГӘ, ЕТЕШЛЕККӘ ӨМӨТ



**Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры Андрей Назаровтың Дәүләт Йыйылышы пленар ултырышындағы отчет докладында республикала ғәмәлгә ашырылған социаль сәйәсәт тураһындағы мәғлүмәттәргә төп урын бирелде.**

Ысынлап та, Хөкүмәттең төп маҡсаттарының береһе - халҡыбыҙҙың тормош шарттарын яҡшыртыу. Һәр бер ғаилә, ололар ҙа, кеселәр ҙә, социаль яҡтан яҡлаулы булһын, тормошобоҙҙоң яҡшы яҡҡа үҙгәрәсәгенә өмөтөн өҙмәһен, тибеҙ. Ябай кешеләр иҡтисадтағы ҡаҙаныштар, төрлө инвестициялар күләме, башҡа шундай күрһәткесле цифрҙар менән артыҡ ҡыҙыҡһынып бармай. Уларға көндәлек тормоштоң етеш булыуы мөһим. Кешеләр власть органдарының үҙҙәре хаҡында хәстәрлек күреүен тойоп йәшәргә теләй. Шуны күҙ уңында тотоп та, беҙ, депутаттар, республикабыҙ Хөкүмәте менән тығыҙ бәйләнештә эшләйбеҙ. Беҙҙең Комитетта былтыр һаулыҡ һаҡлау, социаль мәсьәләләр һәм ветерандарға ярҙам итеүҙе камиллаштырыу буйынса 19 норматив акт ҡабул ителде, унан башҡа РФ Дәүләт Думаһынан беҙҙең ҡарамаҡҡа тәшөрөлгән 173 закон проектын тикшереп, үҙ тәҡдимдәребеҙҙе ебәрҙек.

Һаулыҡ һаҡлау өлкәһен камиллаштырыу БР Хөкүмәтенең иғтибар үҙәгендә, шуға күрә ошо маҡсатта йылына 100 млрд. һумдан ашыу финанс сығымдары бүленә. Шуныһы ҡыуаныслы, ауылдарыбыҙҙа заманса реконструкцияланған модуль тибындағы яңы ФАП-тар арта бара. Беҙ йыш ҡына һаулыҡ һаҡлау министры Айрат Рәхмәтуллин менән райондарға, ҡалаларға сығып, коллегиялар уҙғарабыҙ, урындарҙа халыҡ һаулығын һаҡлау буйынса ниндәй проблемалар булыуын асыҡлайбыҙ, эштәр барышын контролгә алабыҙ. Райондарҙы медицина кадрҙары менән тәъмин итеүгә иғтибар арта бара, "Земство докторы", "Земство фельдшеры" программалары ғәмәлгә ашырыла, ауылдарға барырға теләүсе медицина хеҙмәткәрҙәре ҙур күләмдә матди түләүҙәр ала, урындарҙа улар өсөн уңайлы йәшәү шарттары булдырыла. Былдай мөһим ғәмәлдәрҙе халыҡ күрә һәм яҡшы баһа бирә.

Власть әһелдәрен демография мәсьәләләре лә борсомай ҡалмай. Йәш ғаиләләрҙе торлаҡ менән тәъмин итеү иғтибар үҙәгендә тотола. Мәҫәлән, медицина университеты ректоры В.Н. Павловтың ҡарары менән ғаилә ҡорған студенттар ятаҡтарҙа айырым бүлмәләр менән тәъмин ителә. Балалары тыуһа, уҡыу йорто улар өсөн мини-яслелар булдырған, лекциялар бөткәнсе студенттарҙың балалары ҡараулы була. Алдағы көндәрҙә БР Хөкүмәте менән бергә студент ғаиләләренә ярҙам итеү буйынса яңы ҡарарҙар ҡабул итәсәкбеҙ.

Күп балалы ғаиләләргә матди яҡтан ярҙам ойоштороу шулай уҡ республикала тыуым кимәлен арттырыу мөмкинлеген бирә. Бына бер генә факт: Башҡортостанда тыуған балаларҙың һәр өсөнсөһөнөң әсәһе күп балалы, тимәк, улар 4-се, йә иһә 5-се бала булып донъяға килә. Аллаһҡа шөкөр, үҙебеҙҙең дә бер ҡыҙыбыҙ - 3, икенсеһе 4 бала тәрбиәләй.

Республикабыҙҙа хәрби хәрәкәттәрҙә ҡатнашҡан ветерандар, МХО-ла хәрби бурысын үтәгән яугирҙар ғаиләләре БР Хөкүмәтенең, урындарҙағы властарҙың иғтибар үҙәгендә, улар законда ҡаралған ярҙам сараларынан мәхрүм түгел. Әйтергә кәрәк, республикабыҙҙың төрлө кимәлдәге вәкәләтле органдарының 30 депутаты әлеге ваҡытта МХО-ла хеҙмәт итә. Беҙҙең депутаттарыбыҙ республикала ойошторолған частарҙа хеҙмәт иткән яугирҙарға гуманитар ярҙам ойоштороуҙа әүҙем ҡатнаша, айына ике тапҡыр гуманитар конвой менән үҙҙәре лә яу барған ерҙәргә барып ҡайта.

Яңыраҡ Бөйөк Еңеүҙең 80 йыллығын билдәләүгә әҙерләнеү буйынса республика ойоштороу комитетының тәүге ултырышы уҙғарылды, уны БР Премьер-министрының беренсе урынбаҫары Урал Килсенбаев етәкләй. Был илебеҙ тарихындағы бик мөһим ваҡиға, беҙ Бөйөк Ватан һуғышы геройҙары хаҡындағы хәтеребеҙҙе яңыртасаҡбыҙ, һәр бер яугирҙы хөрмәтләп иҫкә аласаҡбыҙ. Әлбиттә, байрам алдынан ауыл-ҡалаларҙағы обелискыларҙы, һәйкәлдәрҙе яңыртыу, бөйөк яуҙа ҡатнашыусыларҙың ҡәберҙәрен ипкә килтереү, мәктәптәрҙә, мәҙәниәт йорттарында төрлө саралар ойоштороу күҙаллана. Ошо күркәм байрамдың йәш быуындарҙа ватансылыҡ тәрбиәләү йәһәтенән ҙур әһәмиәткә эйә булыуын онотмайыҡ, кәҙерле замандаштар.

**Салауат ХАРРАСОВ,**
**БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың һаулыҡ һаҡлау, социаль сәйәсәт һәм ветерандар эштәре буйынса комитеты рәйесе.**

"КИСКЕ ӨФӨ" ПРОЕКТЫ

# УЛАР БАШҠОРТ МӘКТӘБЕНДӘ УҠЫНЫ!

**Ауылдарыбыҙҙың һәм ҡалаларыбыҙҙың башҡорт мәктәптәрендә белем алып, үҙ тормошонда, эшмәкәрлегендә, ижадында бейектәрҙән-бейек үрҙәр яулаған, республикабыҙҙа һәм Рәсәй кимәлендә киң танылыу тапҡан бик күп арҙаҡлы шәхестәребеҙ бар. Бөгөн балалар, йәштәр улар хаҡында бигүк хәбәрҙар түгел. Башҡорт мәктәбендә фәндәрҙе башҡортса өйрәнеп тә бик юғары маҡсаттарға, вазифаларға өлгәшеп була икәнен белһендәр әйҙә.**

## ДИҠҠӘТ НАСРЕТДИН УЛЫ БУРАҠАЕВ

Д.Н. Бураҡаев - 1957-1981 йылдарҙа СССР Фәндәр академияһының Башҡортостан филиалы Геология институты ғилми хеҙмәткәре. 1970 йылдан СССР Журналистар союзы ағзаһы, яҙыусы. Геология-минералогия фәндәре кандидаты (1967). Башҡорт АССР-ының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре (1979). Ул 1932 йылдың 30 декабрендә Башҡорт АССР-ы Көйөргәҙе районының Үрге Мотал ауылында уҡытыусы ғаиләһендә тыуа. Атаһы һуғышта һәләк булып ҡалғас, Зияйетдин олатаһы тәрбиәһендә үҫә. Олатаһы рус-япон һуғышында ҡатнашҡан кеше, халыҡ тарихын яҡшы белә, ейәнендә тыуған еренә, тарихына, мәҙәниәтенә һөйөү тәрбиәләй. Төплө һәм киң белемдәргә эйә булыу үсмерҙең төп маҡсатына әйләнә. Күрше Таймаҫ урта мәктәбендә ете йыл уҡый, 1952 йылда Өфөләге 9-сы башҡорт мәктәбен (хәҙер Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты) көмөш миҙалға тамамлай. Шул уҡ йылда Диҡҡәт Бураҡаев СССР-ҙың иң шөһрәтле уҡыу йорто - М. В. Ломоносов исемендәге Мәскәү дәүләт университетының геология факультетына уҡырға инә, 1957 йылда уны ҡыҙыл дипломға тамамлай.

Уның бар хеҙмәт юлы СССР Фәндәр академияһының Башҡортостан филиалы Геология институты менән бәйле. Өлкән лаборанттан алып өлкән ғилми хеҙмәткәргә тиклем баҫҡыстарҙы үтә. Башҡортостандың түбәнге карбон ҡатламдарында нефть, ташкүмер ятҡылыҡтарын өйрәнә. Д. Н. Бураҡаевтың ғилми эҙләнеүҙәре республикабыҙҙың Урал алды районларында алып барыла, был төбәктең уға тиклем аҙ өйрәнелгән карбон ҡатламдарында нефть һәм газ перспективаларын билдәләүгә йүнәлтелә. Бының менән ул Башҡортостандың минераль-сырьё базаһын үҫтереүгә һәйбәт ҙур өлөш индерә.

Д.Н. Бураҡаев - 70 ғилми хеҙмәт авторы. Бынан тыш, республика кимәлендәге төбәк һәм Бөтә Союз ғилми кәңәшмәләрендә 15-тән артыҡ доклад менән сығыш яһай. Ғалим геологик терминдарҙың башҡортсаға тәржемәһе буйынса эш алып бара. Тәбиғәтте һаҡлау, айырыуса ер аҫты һыуҙарын бысратмау, сүплектәрҙең эшкәртелмәүе тураһында мәҡәләләр менән сығыш яһай. Геологияға ҡағылышлы булған археология, география, топонимика, астрономия менән дә ҡыҙыҡһына.

Д. Н. Бураҡаев башҡорт халҡы өсөн уның тыуған телендә байтаҡ фәнни-популяр әҫәрҙәр ижад итә, был өлкәлә бик күп йылдар буйы өлгө булып торорлоҡ үҙенсәлекле һәм ҡиммәтле мираҫ ҡалдыра. Ул үҙе иҫән сакта "Нефть тураһында очерктар (1966), "Серҙәр донъяһына сәйәхәт" (1971), "Аждаһа күле" (1974) исемле ғәжәп ҡыҙыҡлы йыйынтыҡтар баҫтырып сығара. 1981 йылда Өфөлә вафат була.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфө хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев төбәктәрҙең баш ҡалалары мэрҙары һәм илдең эре финанс-сәнәғәт үҙәктәренең "Милли рейтингы"нда дүртенсе урынға күтәрелде. "Рейтинг" мәғлүмәт коммуникациялары үҙәгендә билдәләнеүенсә, Ратмир Мәүлиевтың позициялары нығыныуы һәм үҫеүе ҡала хужалығын идара итеүҙе оптималләштереү буйынса системалы эшкә бәйле. Күҙәтеүселәр Өфө мэрының эш стилен системалы тип баһалай.

✓"Өфө Арена"ла намаҙ бүлмәһе асылды. Мосолмандарға көн дә биш тапҡыр намаҙ уҡырға кәрәк. Шуға күрә былдай мөмкинлекте көйөрмәндәребеҙ өсөн булдырыу күптән кәрәк ине, тип хәбәр иттеләр "Салауат Юлаев" клубынан. Әле "Салауат Юлаев" плей-оффтың беренсе һынауында "Себер" клубы менән көрәште башланы. Уйындар серияһы Өфөлә старт алды. Әгәр ҙә серия биш һәм унан күберәк уйынға тиклем дауам итһә, командалар енеүсене 4, 6 һәм 8 апрелдә өҫтәмә уйындарҙа билдәләйәсәк.

✓Өфөлә Еңеүҙең 80 йыллығы уңайынан һуғыш йылдарында эвакуацияланған ҡатын-ҡыҙҙарға иҫтәлекле миҙалдар тапшырылды. Белдереүҙәренсә, Евгения Куфтерина блокаданы кисергән һәм атаһынан башҡа Башҡортостанға эвакуацияланған, ошонда белем алған һәм тәрбиәсе булып эшләгән. Шакира Бикбулатова ғаиләһе 12 бала араһында иң кесеһе. Бөйөк Ватан һуғышы башланғанда уға һигеҙ йәш булған. Ата-әсәһе Мәскәү өлкәһенең "Молот" заводында эшләгән. 1943 йылдың мартында Шакира Бикбулатова әсәһе һәм апаһы менән бергә Башҡортостандың Шишмә районына эвакуацияланған.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республикабыҙҙың МХО ветерандарын ҡышҡы спорт төрҙәре буйынса "Ватанды һаҡлаусылар кубогы" Бөтә Рәсәй ярыштарында уңышлы сығыш яһауҙары менән ҡотланы. Турнирҙа Башҡортостан намыҫын Артём Мөхәрәмов, Радик Йосопов, Алексей Холопов һәм Олег Мөфтәхетдинов яҡланы. Улар биатлонда, саңғы уҙышында һәм тау саңғыһы спортында ҡатнашты. Саңғы уҙышында һәм биатлонда Махсус операция ветераны Олег Мөфтәхетдинов командабыҙға ике алтын миҙал килтерҙе. Артём Мөхәрәмов тау саңғыһы спортында бронза призер булды.

✓Өфөлә 18-20 йәшлек егет-ҡыҙҙар араһында билбау көрәше буйынса Рәсәй беренселеге ярыштары үтте. Баш ҡала хакимиәте хәбәр итеүенсә, турнирға илдең 25 төбәгенән спортсылар килде. Төрлө ауырлыҡ категорияларында алыштар Көрәш һарайында ойошторолдо. Бынан алдараҡ Өфөлә Максим Серафимов иҫтәлегенә грек-рим көрәше буйынса Рәсәй беренселеге уҙҙы. 6+

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

## Ваҡ аҡсарлаҡ

**(Малая чайка)**



Иң ваҡ аҡсарлаҡ, йәйелгән көйөнә ҡанатының киңлеге - 60-70 см. Тәпәйҙәре, суҡышы - ҡыҙыл, арҡаһы, ҡанаттары - ҡара күгелйем. Йәйен башы ҡара төҫтә була, көҙөн соңҡа тирәләре аҡһыл төҫкә инә. Еңел оса, осоп барған килеш бөжәктәрҙе тотоп ашай. Тауышы моңло, "кек-кек-кек" тип ишетелә.

Балтиканан Алтайға тиклем йәшәй. Һаны буйынса Башҡортостанда ла күл сарлағынан ҡалышмай. Сыбаргүл, Бөрсөнсө күлдәре (Әбйәлил районы), Оло Учалы күле (Учалы), Сибай менән Баймаҡ ҡалалары тирәһендәге завод быуаларында, Асылыкүлдә (Дәүләкән районы), Талҡаç, Күлтабан (Баймаҡ районы) күлдәрендә, хатта Өфө тирәһендә Ағиҙел йылғаһы буйында йыш осрай ине.

Башҡа аҡсарлаҡтарға ҡарағанда, бер айға һуңғараҡ күренә. Май башында ғына 3-8 ваҡ аҡсарлағынан торған төркөм һаҙлыҡтарҙа, ҙур йылға һәм күл буйҙарында үҙ урындарын таба. Йыл һайын йәшәгән ерен үҙгәртеп тора. 1, 5, йышыраҡ 3 йомортҡа һала. Ата ҡош менән инә ҡош икәүләп 19-24 көн буйына баҫа. Бәпкәләрҙе өлкән ҡоштар ныҡ һаҡлай, йыртҡыс ҡоштарҙы тауышланып ҡыуып ебәрә.

Был ҡоштарҙың төп ризығы булып һыуҙа һәм ерҙә йәшәгән умыртҡаһыҙҙар төркөмөнә ҡараған бөжәктәр - ваҡ энәғараҡтар, һыу ҡандалаһы, саранчалар төркөмөнә ҡараған ваҡ бөжәктәр, моллюскылар, селәүсендәр, ә умыртҡалыларҙан ваҡ балыҡтар тора. Күлтабанда ваҡ аҡсарлаҡтың оса торған ҡырмыҫҡаларҙы һауала уҡ тотоуын күрергә насип булғайны.

Июль башында 5-20 ҡоштан торған төркөмдәр күренә башлай, улар йылы яҡҡа осорға әҙерләнә. Был осор 10 көн тирәһе дауам итә һәм август башына республикала ваҡ аҡсарлаҡтар ҡалмай тиерлек. Ырымбурҙа һирәк оя ҡора, ҡайһы бер йылдарҙа ғына осратырға була.

Ҡышлау урындары киң территорияны ала - Каспий диңгеҙенең көньяғынан алып Британия һәм Африканың төньяғына тиклем.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов, "Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан. (Дауамы бар).**

*БЫНАҒАЙЫШ!*

**"Газпром" етәкселеген Рәсәй ҡулланыусыларына газдың арзан булыуы бошондора икән. Ошоға тиклем, арзанмы-ҡиммәтме, әллә ни ризаһыҙлыҡ тыуҙырмаған мәсьәлә бөгөн килеп Рәсәйҙә газға ағымдағы күмәртә хаҡы кимәленең газ инфраструктураһы үҫешен тотҡарлауы "асыҡланды". Был хаҡтағы "асыш"ты "Газпром" акционерҙар йәмғиәтенең бүлек начальнигы Алексей Сахаров аңғарып ҡалған, ти. Уның белдереүенсә, ошоноң менән бәйле, газды ташыуға тарифтарҙы күтәреү кәрәк.**

# КӘСЕП ИТМӘЙ, ТАБЫШ КИЛМӘЙ



РФ Хөкүмәте тарафынан 2022 йылдан алып граждандар өсөн газ хаҡтарын арттырыу һуңғы 10 йыл эсендәге иң ҙур рекордҡа тиң булды. Былтыр, мәҫәлән, ул 11,2 процентҡа, ә 2022 йылда тәүҙә - 3, декабрҙә 8,5 процентҡа ҡиммәтләнде. Быйыл иһә 1 июлдән башлап 10,3 процентҡа арттырыласаҡ һәм бөтөн был хаҡтарҙың артыу кимәле 37 процент тәшкил итәсәк. Бынан тыш, быйыл, етмәһә, электр энергетикаһы предприятиелары һәм торлаҡ-коммуналь хужалыҡ объекттары өсөн тағы ла күберәк - 21,3 процентҡа арттырыласаҡ. Ә был шулай уҡ барыбер ябай ҡулланыусы кеҫәһенә һуғасаҡ, сөнки ул киләһе йәйҙән алып электр энергияһына 12,6 процентҡа күберәк түләй башлаясаҡ. Яҙыуҙарынса, был "Газпром"ға 33 млрд һум өҫтәмә табыш килтерәсәк икән...

Бер һүҙ менән әйткәндә, ошо ҙур корпорацияның бөгөнгө санкция шарттары менән бәйле зыян күреүен халыҡ үҙ иңенә йөкмәргә тейеш булып сыға. Бынан тыш, Рәсәй властары "Газпром"ға һалымдарҙы байтаҡҡа кәметергә йыйына. Әйтерһең дә, ауырыу баланы бәпләйҙәрме ни! Етмәһә, корпорация файҙалы ҡаҙылдыҡ табыуға (НДПИ) тейешле һалымды ла түләүҙән туҡтаясаҡ икән. Бер яҡтан, аңларға ла була: Европа газ баҙарын юғалтыу корпорацияны миллиардтарса һум зыянға ултыртты. ***Бөтөн ил өсөн еңел булмаған бындай шарттарҙа, бәлки, "Газпром"дың үҙенә лә эске резервтарын файҙаланыу, йылына миллиардлаған һум эш хаҡтарынан баш тартып тороу кәрәктер? Билдәле булыуынса, компания үҙенең офисында ултырған 4 100 хеҙмәткәрҙең 1,6 меңен ҡыҫҡартырға йыйына, имеш, сөнки корпорация йыл һайын үҙәк офис чиновниктарына эш хаҡы түләү өсөн 50 млрд (!) һум күләмендә аҡса сарыф итә икән.*** Әйе, мул ашлы "кәритә" үҙ янына саманан тыш күп йыйған йылы урын яратыусыларҙы, әйтергә лә түгел. Юғары белемле бер ханымдың ошо йәһәттән, нисек итеп "Газпром"ға йыйыштырыусы булып урынлашырға икән, тип көнө-төнө хыялланыуы иҫкә килеп төшә... Әйткәндәй, штатты ҡыҫҡартыуҙан алынған аҡса һәм социаль түләүҙәр суммаһы, был хаҡта "Газпром" етәксеһенә күрһәтмә-хаттан күренеүенсә, эш урындарын һаҡлап ҡалған "персоналдың үҫешен һәм эшкә мотивацияһын күтәреү буйынса сараларға" йүнәлтеләсәк. Һорау тыуа: әгәр аҡса барыбер һанһыҙ хеҙмәткәрҙәр мәнфәғәтендә тороп ҡала икән, был ҡыҫҡартыуҙың ғилләһе ниҙән ғибәрәт буласаҡ һуң?

Халыҡты Рәсәйҙең тораҡ пункттарына газ үткәреү мәсьәләһе лә борсой, ә "Газпром"дың илдәге яңы төбәктәрҙе зәңгәр яғыулыҡ менән тәьмин итеү һәм газ элек үткәрелгән урындарҙа газификацияны тамамлап ҡуйыу өсөн аҡсаһы етмәй. Шулай итеп, был йәһәттән дә торлаҡтарға газ үткәреү ҡулланыусыларҙың үҙ проблемаһы булып ҡаласаҡ. "Газпром" ғәйәт ҙур корпорация булһа ла, илдәге зәңгәр яғыулыҡ баҙарында берҙән-бер компания түгел. Уның иҫәбенә Рәсәйҙә табылған бөтөн газдың 56 проценты тура килә. Күләме яғынан икенсе урында булған "Новотэк" (13 процент) табылған газдың күп өлөшөн сит илгә оҙата, ә бына "Роснефть", "Лукойл", "Сорғотнефтегаз" компаниялары эске баҙарға эшләй. Илдә тағы ла зәңгәр яғыулыҡ табыусы бәләкәйерәк күләмдәге 140-лап фирма бар һәм уларҙың бөтәһе лә магистраль газ үткәргесе хужаһы "Газпром"ға аҡса түләй. Тап ана шул магистраль үткәргес менән файҙаланғандары өсөн бойондороҡһоҙ етештереүселәргә лә "Газпром" тарифтарҙы күтәрергә уйлай. Элек улар 100 км өсөн 62,2 һум түләһә, киләсәктә хаҡ 109-170 һумға артыуы мөмкин...

Әшул арала эксперттар быйыл "Газпром"дың триллионға яҡын зыян күрәсәген фаразлай. РФ менән гигант газ үткәргесе аша бәйләнгән Европа Рәсәйҙән энергия сығанаҡтары ҡабул итеүҙе туҡтатасаҡ. Шуға ҡарамаҫтан, "Төрөк юлы" менән "Балҡан юлы" аша Рәсәй Румынияға, Грецияға, Сербияға һәм Венгрияға йылына 15 млрд куб. зәңгәр яғыулыҡ ебәреүен дауам итә, ләкин был йылына элекке 180-200 млрд куб. менән сағыштырырлыҡ та түгел. Коммерсант.ру яҙыуынса, "Газпром" Европа кимәлендә элекке кеүек әһәмиәткә эйә була алмаç, ахыры, сөнки континент шыйыҡлатылған тәбиғи газ (СПГ) менән ер аҫты һаҡлағыстарындағы (ПХГ) зәңгәр яғыулыҡ запасына иҫәп тота.

Хаттин ашыуҙың барыбер бер сиге була, ти торғайны өлкәндәр. Ләкин ил байлығына хужа булып алған берәмектәр аптырап ҡалмаç: халыҡ бар бит, халыҡ күтәрер, халыҡ түләр. Тик был ғәҙелме? Сағыштырыу өсөн нефть һатыуҙан килгән аҡсаны граждандарына бүлеп биреүсе илдәрҙе атап китәйек, булмаһа: Берләшкән Ғәрәп Әмираттары, Кувейт, Катар һәм АҠШ-тың Аляска штатында нефть һатыуҙан килем, 13-сө эш хаҡы һымаҡ, йылына бер тапҡыр урындағы халыҡтың банк иҫәбенә күсерелә килә. Бынан тыш, ғәрәп илдәрендә нефть килеме иҫәбенә бушлай белем алыу һәм медицина хеҙмәтләндереүе, төрлө пособиелар, түбән процентлы кредиттар, торлаҡ һатып алыуҙа дәүләт ярҙамы, арзан бензин менән тәьмин итеү бойомға ашырыла.

**Фирүзә ИШБИРҘИНА.**

*БЕЛМӘҺӘҢ...*

# ПЕНСИЯҢ ТУПЛАНҒАНМЫ?

**Рәсәй Социаль фондының төбәк бүлексәһендә Башҡортостанда йәшәүселәргә пенсияның тупланма аҡсаһын нисек алырға кәрәклеге хаҡында һөйләнеләр.**

2025 йылда тупланма пенсияның бар суммаһын 60 йәшлек ир-егет һәм 55 йәшлек ҡатын-ҡыҙҙар, шулай уҡ ҡартлыҡ буйынса страховка пенсияһын ваҡытынан алда тәғәйенләү хоҡуғына эйә булған граждандар бер тапҡыр алырға мөмкин. Бының өсөн тупланған пенсия күләме 411 мең 750 һумдан артмаҫҡа тейеш. Әгәр тупланмалар ошо сумманан артһа, айлыҡ түләүҙәр тәғәйенләнә, уларҙың күләме айырым иҫәпләнә. Түләүҙәрҙе иҫәпләүҙең яңы тәртибе 2024 йылдың июленән ғәмәлдә. Хәҙер бер тапҡыр түләү тураһында ҡарар граждандарҙың тупланма суммаһына һәм билдәләнгән түләү осорона бәйле, ул ағымдағы йылда 270 ай йәки 22,5 йыл тәшкил итә.

"Әгәр тупланма пенсия пенсионерҙар өсөн дөйөм Рәсәй йәшәү минимумының 10 процентын һәм унан кәмерәк тәшкил итһә, йәки 1525 һум һәм унан кәмерәк булһа (ағымдағы йылда), ул саҡта кеше бөтә тупланманы бер тапҡыр аласаҡ. Мәҫәлән, 2025 йылда 60 йәше тулған ир-егеттең тупланмаһы 405 мең һум тәшкил итә. Был сумманы 270 айға бүлгәндә айына 1500 һум алабыҙ. Ағымдағы йылға пенсионерҙың йәшәү минимумының 10 процентынан кәмерәк сумма (1525 һум), шуға ярашлы ул тупланма пенсияның бөтә суммаһын бер тапҡыр аласаҡ. Әгәр бүленгәндә алынған сумма 1525 һумдан артһа, тупланма айлыҡ түләүҙәргә бүленәсәк", - тип асыҡлыҡ индерҙеләр ведомствола. Пенсия тупланмалары тураһында мәғлүмәтте Дәүләт хеҙмәттәре порталы аша шәхси иҫәптән күсермә заказ итеп йәки йәшәгән урыны буйынса Рәсәй Социаль фонд бүлексәһенә мөрәжәғәт итеп онлайн алырға мөмкин.

"Киске Өфө" гәзитенең махсус бите

42

# Шифа

4 - 10 апрель (алағарай) 2025 йыл

№13 (1157)

МЕДИЦИНА ХӘБӘРҘӘРЕ

## АУЫЛҒА...

**Башҡортостанда "Ауыл фельдшеры" программаһы буйынса 33 табипҡа 500 мең һум аҡса түләнә. Был хаҡта республика етәксеһе Радий Хәбиров хәбәр итте.**

"Башҡортостан райондарына эш сәфәре барышында йыш ҡына фельдшер-акушерлыҡ пункттарына инеп сығам, - тип билдәләне ул. - Башҡортостанда ауыл биләмәләре байтаҡ, халыҡҡа медицина ярҙамы бик кәрәк. Беҙ ауыл медицинаһы өсөн күп эштәр башҡарҙыҡ һәм уны дауам итәбеҙ. Тотош республикала 500 фельдшер-акушерлыҡ пунктын, 10-ға яҡын участка дауаханаһын һәм амбулаторияһын яңырттыҡ. Әммә иң мөһиме - унда эшләгән хеҙмәткәрҙәр. Беҙҙә "Ауыл табибы/ Ауыл фельдшеры" федераль программаһы гәмәлгә ашырыла, ауыл дауаханаларына эшкә ҡайтҡан медиктарға финанс ярҙамы күрһәтелә. Республикала иһә ФАП-тарға иҫәпләнгән үҙебеҙҙең "Ауыл фельдшеры" программаһы эшләп килә. Быйыл беҙ тағы 33 табипҡа 500 мең һум аҡса түләйбеҙ", - тип яҙҙы республика етәксеһе социаль селтәрҙәге сәхифәһендә.

## БЫНЫҺЫ КӘМЕГӘН...

**Башҡортостандың Һаулыҡ һаҡлау министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, былтыр республикала туберкулездың әүҙем формаһы менән сирләгән 2411 пациент иҫәпләнгән, шуларҙың 1251-ендә йөғошло ауырыу тәүге тапҡыр асыҡланған.**

Һуңғы өс йылда сирләүҙәр 1000 кешегә кәмегән. Шул уҡ осорҙа табиптар туберкулездан үлем осраҡтарын 13,4 процентҡа кәметеүгә өлгәшкән. Республикала туберкулёз проблемалары менән Республика клиник фтизиопульмонология үҙәге шөғөлләнә, уның составында йәмғеһе 10 филиал бар. Үҙәктә заманса фәнни технологиялар һәм инновацион ысулдар ҡулланыла, шул иҫәптән юғары технологиялы медицина ярҙамы күрһәтелә, тип хәбәр ителәр Башҡортостандың Һаулыҡ һаҡлау министрлығынан. Хәбәр иткәнебеҙсә, Өфөлә туберкулёзға ҡаршы диспансерҙың тәҙеклөндерелгән балалар бүлексәһе асылды.

## БАЛАЛАРҘЫ...

**Рәсәй Хөкүмәте былтыр яңы тыуған сабыйҙарға неонаталь скрининг үткәреү өсөн төбәктәргә өҫтәмә рәүештә 770 миллион һум аҡса бүлде.**

Был хаҡта федераль Министрҙар кабинетының матбуғат хеҙмәте хәбәр итә. Финанс ярҙамы "Һаулыҡ һаҡлауҙы үҫтереү" дәүләт программаһына ингән "Киңәйтелгән неонаталь скринингты тәьмин итеү" федераль проекты сиктәрендә күрһәтелә. Киңәйтелгән неонаталь скрининг - яңы тыуған балаларҙа нәҫел һәм тыумыштан килгән сирҙәргә тикшереү үткәреү. Былдай тикшереүҙәр ҡаты сирҙәрҙе иртә стадияла асыҡларға һәм тиҙ арала тейешле медицина ярҙамы күрһәтергә мөмкинлек бирә, тип асыҡлык индерҙеләр Башҡортостандың Һаулыҡ һаҡлау министрлығында.

ТУРАҺЫН ӘЙТКӘНДӘ...

# АҠСА ДАУАЛАЙМЫ?

**Үтеп киткән йылдың ноябрь-декабрь айҙарында дауахана тупһаларын байтаҡ тапарға тура килде. Быңдай мохтажлыҡ ваҡыты-ваҡыты менән һәр кемдең алдына килеп баҫа - сир сараһыҙлаһа, йөрәмәй әмәлең юҡ шул.**



Ҡайҙағы кеүек үк, медицина учреждениеларында ла күп осраҡта үҙеңде артыҡ тояһың. Сөнки бында һине көтөп тормағандарын теркәү бүлегендә үк бәләкәй тәҙрә уйымы аша аралашҡан аҡ халатлы туташ ҡәтғи интонацияны, ҡырыҫ күҙ ҡараштары менән иҫкәртә. Әлбиттә, был - ҡағиҙә, тип раҫлау ысынбарлыҡты инҡар итеү булыр ине. Гөмүмән алғанда, табиптар ауырыуҙарға йылы мөнәсәбәт күрһәтә, улар менән сабыр мөғәмәлә итә. Күрәһең, көсөргәнешле дөйөм кәйеф сирле кешенең мыжыҡлығы, үҙенә күберәк иғтибар талап итеүе, шик-шөбһәләр солғанышында булыуы менән аңлатылалыр. Дауаханаларға бит бер кем дә ирекҡәндән бармай.

Өфө эргәһендәге төҙәк, ҡараулы ҙур ауылдарҙың береһендәге поликлиникаға тәүләп инеүем. Кешеләр, бер-береһен белгәс, һаулыҡ һорашалар, хәлдәрен һөйләйҙәр, тормош тураһында гәпләшәләр. Бәлки, шуғалыр, ҡырмыҫҡа иләүендәй ҡайнап торған баш ҡаланың ундай урындарынан айырмалы, бындағы мөхит ипле, ығы-зығыһыҙ.

Ошо урында, ауылдарҙағы дауахаларҙың ябылыуын, хатта район үҙәгендә лә бик күп медицина учреждениеларының ҡыҫҡартылыуын иҫкә алып, халыҡтың, бигерәк тә оло быуын вәкилдәренең, социаль һәм һаулыҡ һаҡлау өлкәләрендә ҡағылған ниндәй мөһим дәүләт ҡурсалауынан мәхрүм ҡалыуын нығыраҡ кисерәһең. Элек минең тыуған ауылымда ятып дауаланыу өсөн дә шарттар бар ине. Бөгөн халыҡ алтмыш саҡрымға район үҙәгенә йөрөргә мәжбүр. Ә ауыр сирлеләрҙе тик ҡалала ғына ҡарайҙар...

Ауырыуым тәрәндә булғанға, ентекле тикшереү кәрәк икән. УЗИ аппаратында ҡаралыуға сират ҙур - ике аҙна көтөргә тура килде. Уны ҡала үртаһында урынлашҡан Өфө районы поликлиникаһында үттем. Баш ҡалаға терәлеп ятһа ла, район район инде - бина теге быуаттың 70-се йылдарынан ремонт күрмәгән һымаҡ тойолдо. Талонда билдәләнгән ваҡытҡа барһам да, ярты сәғәттән ашыуға һуңлап индем. Яҙылмай килгән ике-өс кешене, саҡырып, табип үҙе алдан үткәрҙе. Аппараттары ла иҫкергән, ахыры, төпкә төшөп ҡарай, сирле эске ағзаны ентекле тикшерә алманылар.

Магнит-резонанслы томография үтмәй булмаҫ, тине йүнәлтмә биргән участка табибы, бындай һөҙөмтәгә аптырай бирел. Тик МРТ тикшерелеүенә яҙылырға мөмкин булған мөҙҙәттәге көндәрҙең береһе лә буш түгел ине. Түләүле клиникаға мөрәжәғәт итеүҙән башҡа сара ҡалманы.

Сығып барғанда пенсия йәшендәге ике ҡатындың ошондай һөйләшеүе ҡолағыма салынды:

- Кемдә ҡаралдың?
- Фәлән Фәләновичта булдым...
- Ул биш минут ҡына ҡабул итә бит. Сирең тураһында яҡшылап төпсөнөп тә тормай...
- Һы... Зато сират юҡ - тиҙ генә инәһең дә, килеп тә сығаһың...

Эйе, дауахаларҙа беҙҙә иң ҡурҡытҡаны - сират. Сират көтөп ултырыуҙан да бигерәк, уны һаҡлап тотоу, алдыңдан кемдеңдер "һорайым ғына" тип, табипҡа инеп китеүенә юл ҡуймау, һинән алдан һәм арттан баҫыусыларҙы кейеме, башҡа билдәһенән таныу заурлығы быуынды ала.

Түләүле хеҙмәттең ниндәйе талап ителгәндә лә, йәштәр рекламаға ышанып бармай. Интернет селтәре аша тикшереп, тәҡдимдәр араһынан ыңғай баһаға лайыҡ булғандарын эҙләй. Ысынлап та, һайлап алыу мөмкинлеге унда бик киң. Мин иһә табип тәҡдим иткән телефондан шылтыраттым. Иң яҡын көнгә, үҙем өсөн ҡулайлы ваҡытҡа яҙылдым. Телефондың теге осондағы мөләйем тауыш тикшерелеүгә нисек әҙерләнеү кәрәкле тураһында аңлатмалар бирҙе. Көнө килеп еткәс, клиниканан тағы шылтыраттылар булды, килеү-килмәүемде асыҡланылар. Аппарат бит буш торорға тейеш түгел - ул аҡса сығанағы.

Урамдан тура яҡты һәм бөхтә ҡабул итеү бүлмәһенә эләгәм. Ингән урында ҙур һауыт менән бахилалар ҡуйылған (дәүләт медицина учреждениеларында 10 һумға һатып алырға кәрәк).

- Мин сәғәт өскә яҙылғанмын, - тием күкрәк бейеклегендәге барьер аша ултырған аҡ халатлы ҡыҙға.
- Рәхим итегеҙ... Өҫкө кейемегеҙҙе һалып, шкафҡа элегеҙ. Диванға ултырып, бер аҙ көтһәгеҙ, килешеү ҡағыҙы әҙер булғас, саҡырырмын, - тине ул.

Өс-дүрт кеше ултыра. Бүлмә йылы, таҙа. Телевизор эшләй. Арыраҡ эсәр һыу менән кулер тора.

- Килешеү әҙер. Рәхим итеп, танышығыҙ ҙа, ҡул ҡуйығыҙ, - тип өндәштеләр. Ҡағыҙ эше тамамланғас: - Әҙ генә көтөгөҙ, хәҙер һеҙҙе саҡырырҙар, - тине мөләйем ҡыҙ.

"Рәхим итегеҙ..." "Зинһар өсөн аҙ ғына көтөгөҙ..." - итәғәтле мөғәмәлә, аҙым һайын иҫкәртеп тороуҙары, нимәләр тәҡдим итеүҙәре, күрһәтеүҙәре, аңлатыуҙары, саҡ ҡына тотҡарлыҡ, килеп тыуған башҡа уңайһыҙлыҡтар өсөн (ҡырыҫ тормошҡа өйрәнгән кешеләр булараҡ, беҙ уларҙы, асылда, күрмәйбеҙ ҙә, тоймайбыҙ ҙа) ғәфү үтенеүҙәре... Ғөмүмән, бындай мөхит һинең үҙ баһаңды күтәрә, баҡһаң, һаулыҡ һаҡлау өлкәһендә лә мөнәсәбәттәрҙе бөтөнләй башҡаса ҡороп була ла баһа, тигән фекер тыуҙыра.

**Шунан уйлап ҡуяһың: аҡсаһын түләгәс ней...**

***Был раҫлауҙа дөрөҫлөк тә, яңылышыу ҙа бар, әлбиттә. Сөнки дәүләт ҡарамағындағы дауаханаға барыу ҙа бушлай түгел. Тик был осраҡта аҡсаны, кеҫәнән сығарып, үҙебеҙ бирмәйбеҙ, беҙҙе ҡараған, тикшергән, дауалаған өсөн киткән сығымдарҙы мотлаҡ медицина страховкаһы ҡаплай. Йәғни медицина учреждениеһы һаулығыбыҙ өсөн күпме аҡса түккәнен һәм ҡайтарып алғанын белмәйбеҙ. Аҡса тынлыҡты ярата, тигәндәй, ул күҙгә күренмәй иҫәптән иҫәпкә күсә, тәғәйен ерենә барып етә.*** Әйткәндәй, "Башҡортостан Республикаһының 2025 йылға, 2026 һәм 2027 йылдарҙың план осорона мотлаҡ медицина страховкаһы төбәк фонды бюджеты тураһында"ғы законына ярашлы, 2025 йылға 97,9 млрд һум аҡса ҡаралған. Аҙ сумма түгел был. Дүрт миллионлыҡ республика халҡының һәр кеменә 24,5 мең һум самаһы тура килә.

***"Ике осраҡта ла медицина хеҙмәте аҡса менән баһалангас, нишләп түләүле клиникалар менән дәүләт һаулыҡ һаҡлау ойошмаларында кешегә мөнәсәбәт төрлөсә?" - тигән һорау тыуа.*** Уға яуап табыуы еңел түгел. Бәлки, беҙ хоҡуҡтарыбыҙҙы белеп еткермәйбеҙҙер, етешһеҙлектәр тураһында ҡысҡырып бармайбыҙҙыр, ялыу менән мөрәжәғәт итмәйбеҙҙер. Закон буйынса, махсуслашҡан страховкалау ойошмалары медицина хеҙмәтенең сифатын һәм теүәл атҡарылыуын даими контролдә тота. Әгәр һәр етешһеҙлек тураһында мәғлүмәт уларға барып етһә, бәлки, хәл яҡшыға үҙгәрер ине.

Хәйер, сәбәптең тәрәнерәктә ятыуы ла ихтимал. Нисек кенә булмаһын, кеҫәнән сығарып үҙ ҡулдарың менән түләгән аҡсаның көсө барыбер ҙурыраҡ. Нишләп улай һуң? Быны нескәлектәрен, мәсьәләнең аръяғын һәр кем, урын-еренә еткереп, үҙе лә фаразлап ҡуя ала.

Рәсәй һаулыҡ һаҡлау министры Михаил Мурашко 25 февралдә Дәүләт Думаһы депутаттары алдындағы отчет докладында, илдең һаулыҡ һаҡлау учреждениеларында 23,3 мең табип һәм 63,6 мең урта медицина персоналы етмәй, тип белдерҙе. Тимәк, табиптар һаулыҡ һаҡлау учреждениеларындағы хәлдәр менән үҙҙәре лә риза түгел һәм күпләп эштән китә. Баяғы шәхси клиникаларға. Студент саҡта уҡ дауахаларҙың эске хәлен белеп йөрөгән йәштәр ҙә, диплом алғас, халыҡ һаулығы һағына баҫырға ашыҡмай...

Һаулыҡ һаҡлау өлкәһе үҙенә етди иғтибар талап итә. Юғары трибунанан министр үҙе проблемаларҙы күтәреп сыҡҡас, был турала өҫтә беләләр, тигән уй өмөт уята.

**Байгилде МОТАЛЛАП.**

✓ *Иң боронғо кешеләрҙең, бынан 40 - 50 мең йыл әүәлерәк һәм унан да алдараҡ йәшәгән әҙәми заттарҙың ғүмере оҙайлы булмаған: уртаса алғанда, таш быуатында кеше - 20, тимер быуатында 30 йыл тирәһе генә йәшәй алған.*

ҠЫҘЫҠЛЫ ӘҢГӘМӘ

**Гәзитебеҙҙең бөгөнгө әңгәмәсеһе - Хәйбулла егете, БР Һаулыҡ һаҡлау министрлығының Республика клиник онкодиспансерында хирург-онколог вазифаһында эшләүсе Замир Сәлих улы АБДУЛЛИН.**

# ЯМАН ШЕШТӘН ҠУРҠЫП ЙӘШӘМӘ,

## йәшәү рәүешенде сәләмәтлеккә көйлә!



**Хөрмәтле Замир Сәлих улы, әңгәмәбеҙ башында үҙең хаҡында бер кәлимә һүҙ әйтеп үтһәң, урынлы булыр ине...**

- Мин Хәйбулла районының Ғәлиәхмәт ауылында тыуғанмын. Нәҫелебеҙ Үҫәргән ырыуына ҡарай. Атайым ырыуыбыҙ, нәҫәл-нәсәбебеҙ тураһында бик күп мәғлүмәт туплап, ғаилә шәжәрәһен 27 быуынға тиклем асыҡланы. Миңә 5 йәш тулғас, ғаиләбеҙ Сиҙәм ҡасабаһына (Целинный) күсеп килде, 11 йәшем тулғансы ошо ҡасаба мәктәбендә рус телендә уҡыным. Шунан һуң имтихандар биреп, Өфөләге Башҡорт-төрөк лицейына уҡырға индем. Был мәктәптең үҙенсәлеге шунда булды - математика, физика, химия фәндәре инглиз телендә уҡытылды, шулай уҡ башҡорт теле һәм әҙәбиәте, төрөк теле дәрестәре лә мотлаҡ уҡыу предметтары ине. Күп телдәрҙе белеү бик һәйбәт, һәм, әлбиттә, туған телеңде белеү ҙә үтә мөһим. Мин бәләкәй сағымдан русса уҡығас, башҡорт телен насарыраҡ белә инем, әммә үҙем бик теләгәс, һәйбәт кенә һөйләшергә өйрәнә алдым. Ә бына Сиҙәм мәктәбендә уҡытыусыбыҙ Гүзәл Кашаф ҡыҙы инглиз телен беҙгә бик һәйбәт өйрәтте, быны Өфөгә килгәс кенә аңланым: башҡорт-төрөк лицейында класташтарымдың, хатта элегерәк Өфө мәктәптәрендә уҡығандарҙың да, инглиз телен белеү кимәле минекенән күпкә ҡайтышыраҡ ине.

Әйткәндәй, атайым география уҡытыусыһы булһа, әсәйем врач-педиатр ине. Атайым географ булғас, төрлө илдәр буйлап сәйәхәткә сығып китә инек. Венала, Стамбулда, Ҡаһирәлә булдыҡ, хатта Ҡырғыҙстан менән Ҡытай сиктәрендә булып, Тянь-Шань тауҙарын да барып күрҙек. Сәйәхәткә сығыр алдынан барасаҡ илдәр тураһында күберәк уҡып, билдәле бер мәғлүмәткә эйә булырға тырышыла ине.

**Мәктәптә уҡыған йылдарында ниндәй фәндәр күңелеңә иң ныҡ оҡшаған ы булды?**

- Ғөмүмән, мин уҡырға яраттым, барса предметтар ҙа ҡыҙыҡлы тойола торғайны. Әммә тарих дәрестәре барыһынан да нығыраҡ оҡшай ине. Боронғо замандарҙа кешеләр нисек йәшәгән, ниндәй күренекле шәхестәр, тарихи ваҡиғалар булған - былар халҡыбыҙға ҡарата ҡыҙыҡһыныу уята, рухи тәрбиә нигеҙен булдыра. Бына, мәҫәлән, бер үк тарихи ваҡиға хаҡында төрлө китаптарҙа төрлөсә яҙалар, шунан ҡайҙа дөрөҫлөк, хәҡиҡәт, ә ҡайҙа уйҙырма икәне хаҡында уйлана башлайһың.

Мин тағы ла химия фәнен үҙ иттем. Бында уҡытыусыбыҙ Лиза Ҡыям ҡыҙының роле бик ҙур булды. Ул балаларҙа үҙе уҡытҡан фәнгә ҡарата шундай ҡыҙыҡһыныу уята алды: уның һөйләгәнен, аңлатҡанын мөкиббән китеп тыңлайһың, ғәжәпләнәһең, һорауҙар бирәһең. Шуға күрә лицейҙы тамамлауға химия фәне буйынса белемебеҙ сифаты бик юғары булды.

**Тимәк, юғары уҡыу йортон һайлағанда икеләнеп тормағанһыңдыр?**

- Баштан уҡ йә табип, йә иһә химик-технолог һөнәрен һайлармын тип уйлай инем. Лицейҙы тамамлағас, БДУның химия факультетына уҡырға инергә теләнем, әммә медицина университетына ла документтар тапшырҙым. Һабаҡташ дуҫым да шулай итте. Аҙаҡ икәүләп һөйләштек тә, медуниверситетка инергә ҡарар иттек.

**Хәҙерге медицинала онкология өлкәһе иң ҡатмарлыларҙан һанала, ул табиптан, теорияны белеүҙән башҡа, ғәмәли тәжрибәне, оҫталыкты талап итә. Ни эшләп онкология өлкәһен үҙ иттең?**

- Тәүҙә эндокринолог һөнәре буйынса әҙерлек (специализация) үтергә уйланым. Биология, биохимия фәндәре, кеше организмының гормональ торошон өйрәнеү миңә үтә ҡыҙыҡлы ине. Эндокринология кафедраһына барып, теләгемде белдерҙем. Тик унан мине кире бороп сығарҙылар: "Беҙгә ҡыҙҙар ғына кәрәк, ә һин егет кеше бит, хирургияға бар", - тинеләр. Ул саҡта ғаиләбеҙ Воркута ҡалаһына күсеп киткәйне, шуға күрә интернатураны ошо ҡалала үттем. Интернатурала уҡығанда торакаль хирургия (күкрәк ағзалары), ҡан тамырҙары хирургияһы менән ҡыҙыҡһына инем. Өфөгә ҡайтҡас, ошо йүнәлештә һайларға, ординатурала уҡырға теләнем. Билдәле онколог Шамил Хәнәфи улы Ганцев ярҙамы менән теләгем тормошҡа ашты: ул мине ординатураға уҡырға алды. Шулай итеп, онкология өлкәһен ентекләп өйрәнә башланым. Шамил Хәнәфи улы республикабыҙҙа онкология буйынса иң көслө теоретиктарҙан һанала, ә хирург-онкологтың эш итеү алымдарын практик рәүештә башҡаларҙан өйрәнәһең.

Ординатурала уҡығанда уҡ торакаль хирургия бүлегендә эшләй башланым - ҡыҙыл үңәс, үпкә, йөрәк һәм башҡа күкрәк ағзаларындағы онкологик сирҙәрҙе хирургик юл менән дауалау бүлеге ул. Уны талантлы хирург, БАССР-ҙың һәм РСФСР-ҙың атҡаҙанған табибы, медицина фәндәре докторы Рәшит Ғәзиз улы Баҙыҡов етәкләй ине. Ул минән хирургия өлкәһендә ниндәй операциялар эшләй алыуым тураһында һорашты, ә бер айҙан һуң ошо бүлеккә ярты ставкаға эшкә алды. Миңә тиклем 15 йыл дауамында бүлеккә йәш табиптарҙы алмағандар, сөнки бында эшләү өсөн ҙур тәжрибә туплау мотлаҡ. Әйтергә кәрәк, бында, башлыса, олораҡ быуын хирургтары эшләй ине. Бүлеккә килеү менән тәүҙә хирургтың ассистенты рәүешендә операцияларҙа ҡатнаша башланым. Чижиков Валерий Федорович, Лобода Владимир Витальевич, Сафиуллин Рим Вәли улы кеүек үҙ эшенең оҫталарынан бик күп нәмәгә өйрәндем. Ғөмүмән, теләһә кем хирург була алмай, уның өсөн оло теләк, белем һәм тәжрибә булыуы мотлаҡ.

Хирург өсөн бер яҙылмаған ҡағиҙә бар: операцияны мөмкин тиклем аҙыраҡ ваҡытта һәм уңышлы тамамлай алыу фарыз. Операция ваҡытында сирлегә наркоз бирелә, ул ни тиклем оҙаҡ бара, шул тиклем күберәк наркоз талап ителә, ә был кеше организмына зыян да килтерә. Шуға күрә оҙайлы операцияларҙы үҙһенмәйем.

**Башҡортса "яман шеш" тип аталған мәкерле сирҙең башҡа телдәрҙәге атамалары ла бар, улар, башлыса, ҡыҫала тигән һүҙҙе аңлата: русса - рак, грекса - карцивос, латинса - канцер. Был сир ни сәбәпле шулай атала башлаған?**

- Берҙән, был сир кешенең ағзаларын ҡыҫала һымаҡ ҡыҫып алып бара, шеш, туҡтауһыҙ ҙурая барып, билдәле бер ағзаның эшмәкәрлегенә зыян килтерә, нормаль күҙәнәктәрҙе ҡыҫырыҡлай һәм юҡҡа сығара. Икенсенән, боронғо Греция табибы Гиппократ (б.э. тиклем 470 - 360 йылдар), яман шеш һәм уның янындағы ҡуҙғыған урындың ҡрабҡа оҡшауына иғтибар итеп, ошо сирҙе грекса "карцинома", йәғни "ҡыҫала шеше" тип атай. Шул уҡ табип "онкос" атамаһын да индерә, ул шеш мәғәнәһен белдерә. Әммә хәҙерге онкологияла яман шеш сирҙәренең барыһы өсөн дә бер карцинома термины ғына ҡулланылмай, был атама ағзаларҙың эпителиаль күҙәнәктеренән шешенә ҡарай; унан башҡа лимфома, саркома һәм лейкоз тип аталған яман шеш сирҙәре билдәле.

**Яман шеш сиренең асылын, уның биогенетик механизмдарын ғалимдар нисек аңлата?**

- Ниндәйҙер бер сәбәптәр арҡаһында кеше организмының ҡайһы бер күҙәнәктәрендә биологик тайпылыштар хасил була, образлы итеп әйткәндә, уларҙың бүленеү, үрсеү механизмы дөрөҫ эшләмәй башлай. Башлыса, һәр күҙәнәктең йәшәй алыу оҙайлығы була, иҫкергән күҙәнәк юҡҡа сығып, яңыһы менән алышына, ул фәндә апоптоз тип атала. Бындай процестар генетик яҡтан программаланған, үлгән күҙәнәктең ҡалдыҡтары макрофагтар, йә иһә күрше күҙәнәктәр тарафынан "йотолоп", юҡҡа сыға. Был иммун системаһы өсөн бик мөһим, сөнки боҙолған, гендарында мутация барлыҡҡа килгән күҙәнәктәр организм өсөн үтә хәүефле. Яман шешкә сәбәп булған күҙәнәктәрҙә уларҙың нормаль бүленеше юҡҡа сыға, улар бер нисек тә көйләнмәгән, сикләнмәгән рәүештә, туҡтауһыҙ үрсей башлай, шеш барлыҡҡа килеп, үҫә, ҙурая бара. Яман шеште астрономияла ҡулланылған "ҡара тишек" менән сағыштырып була: ул организмдың барса биологик ресурстарын үҙенең контролһеҙ үҫеше өсөн бер туҡтамай һурып алып тора, сирле кеше ябыға, иммун системаһы бындай күҙәнәктәргә ҡаршы тора алмай.

**Яман шешкә килтереүсе төп сәбәптәр тураһында аңлатма биреп китһәгеҙ, урынлы булыр.**

- Был сирҙең барлыҡҡа килеүенең сәбәптәре күп төрлө. Уларҙың иң хәүефлеләренән генетик сәбәптәрҙе билдәләп үтергә кәрәк. Кеше организмының гендары үҙгәрмәй тормай, әммә кеше геномында төрлө мутациялар башланыуы мөмкин. ДНК сылбырҙарынан хасил булған хромосомаларҙың да тәҙәләшеүендә төрлө сәбәптәр арҡаһында мутациялар башлана. Уларҙың ҡайһылары организмдың биологик ритмына зыян килтерә, яман шештең теге йә иһә икенсе бер формаһына сәбәп булып тора.

Иң боронғо кешеләрҙең, бынан 40 - 50 мең йыл әүәлерәк һәм унан да алдараҡ йәшәгән әҙәми заттарҙың ғүмере оҙайлы булмаған: уртаса алғанда, таш быуатында кеше - 20, тимер быуатында 30 йыл тирәһе генә йәшәй алған. Европала хатта ки XVI - XVIII быуаттарҙа ла уртаса ғүмер оҙайлығы ни барыһы 30 - 40 йыл ғына тәшкил иткән. Кешеләр, башлыса, аслыҡ, киң таралған үлемесле инфекциялар, һуғыштарҙың күп булыуы һөҙөмтәһендә күпләп үлеп торған. Әлбиттә, ул замандарҙа ла яман шеш ауырыуы була, әммә ул әллә ни күп осрамай, сөнки ошо ҡыҫҡа ваҡыт арауығында кеше организмында генетик мутациялар күп тупланып өлгөрмәй.

Беҙ - XXI быуат кешеләребеҙ, уртаса ғүмер оҙайлығы күпкә артты, мәҫәлән, Гонконгта, Японияла, Сингапурҙа, Швейцарияла, Финляндияла ҡатын-ҡыҙҙар 85 - 89, АҠШ-та, Европаның алға киткән илдәрендә ирҙәр 80 йәштән уҙып китһә, Рәсәйҙә ҡатын-ҡыҙҙар ғүмеренең ошо мөһим күрһәткесе 79,

**✓ Мөхит экологияһы ни тиклем насарыраҡ, онкологик сирле кешеләр ҙә шул тиклем күберәк. Беҙҙең ҡалаларҙа тирә-яҡ мөхитте бысратыусы предприятиелар байтаҡ.**



ирҙәрҙең 69 йәш. Шул уҡ ваҡытта иҡтисади яҡтан алға киткән илдәрҙә лә кешеләрҙең ваҡытынан алда вафат булыуының сәбәбе, йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәренән ҡала, яман шеш менән бәйле.

Ни өсөн шулай килеп сыға һуң? Бер яҡтан ҡараһаң, сирле кешеләргә медицина ярҙамы күрһәтеүҙең ыңғай йоғонтоһон күрмәйенсә булмай: хәҙер инфекцион һәм инфекцион булмаған, шулай уҡ хроник ауырыуҙарҙы ваҡытында дауалау мөмкинлектәре күпкә артты, яңы дауаханалар, поликлиникалар, ФАП-тар асыла, заманса техник саралар, приборҙар, инструменттар ҡулланыла, бик күп төрлө дарыуҙар бар. Икенсе яҡтан, граждандар күп төрлө дарыуҙарҙы үҙҙәре һатып ала, шул уҡ антибиотиктарҙы, гормональ препараттарҙы кәрәккәндә лә, кәрәкмәгәндә лә күпләп ҡуллана. Дарыуҙарҙы файҙаланыуҙың билдәле бер нормалары, сиктәре булыуына иғтибар етмәй, уны табип ҡына билдәләй ала. Антибиотиктарҙың һәм башҡа төрлө дарыуҙарҙың файҙаһы менән бергә билдәле кимәлдә зыяны булыуын оноторға ярамай. Улар ҙа ҡайһы бер яман шеш ауырыуҙарына сәбәпсе булыуы мөмкин.

**Генетика фәнендә кешеләр йәшәгән мөхиттең таҙа булыуына, экологияның кеше организмына кире йоғонто яһауы менән бәйле проблемаларға иғтибар ҙур. Йәмғиәттә, гәзиттә, онкологик сирҙәрҙең күбәйеүен экологияға ла бәйләйҙәр...**

- Эйе, Башҡортостан экологик яҡтан хәүефле төбәктәр иҫәбенә инә. Әйтергә кәрәк, РФ төбәктәре араһында республикабыҙ һауаға сығарылған зарарлы матдәләр буйынса етенсе урынды биләй: йылына 560 мең тоннанан ашыу химик матдә кешеләр һулаған һауаны бысрата.

Беҙ бер кире ҡаҡҡыһыҙ ҡағиҙәне танырға мәжбүрбеҙ: мөхит экологияһы ни тиклем насарыраҡ, онкологик сирле кешеләр ҙә шул тиклем күберәк. Беҙҙең ҡалаларҙа тирә-яҡ мөхитте бысратыусы предприятиелар байтаҡ, улар һәр саҡта ла экологик ҡануниәт талаптарын теүәл үтәй, тип әйтеп булмай. Шулай уҡ хәҙерге ҡала урамдарында автомобиль хәрәкәте үтә көсәйҙе, машина моторҙарынан сыҡҡан төтөн һәм газдар ҡала һауаһын бысратыусы төп факторға әйләнде. Шуға күрә яман шеш ауырыуҙары Салауат, Күмертау, Межгорье, Стәрлетамаҡ, Өфө ҡалаларында йәшәүсе кешеләрҙә, башҡа төбәктәр менән сағыштырғанда, күберәк теркәлә.

Миҫал өсөн 2023 йылда Башҡортостан буйынса Роспотребнадзор биргән мәғлүмәттәргә иғтибар итәйек. Республикабыҙҙа онкологик сирҙәр буйынса 100 меңдән ашыу пациент диспансер иҫәбендә тора, 14 544 кешелә яман шеш булыуы тәүләп теркәлгән, уртаса күрһәткес - 100 мең кешегә 2355,7 сирләүсе. Иң юғары күрһәткес Салауат ҡалаһында - 3 057,8 кеше, унан һуң Күмертауҙа - 2970,9, өсөнсө урында Межгорье - 2 806,3. Яман шеш иң аҙ теркәлгән районлар - Әбйәлил (1215,8) һәм Баймаҡ (1237,9).

**Нисек уйлайһығыҙ, ни өсөн Башҡортостандың Кушнаренко һәм Балтач райондарында онкологик сирҙәрҙең сағыштырмаса кимәле хатта шул уҡ Салауат, Күмертау ҡалаларындағынан байтаҡҡа артып киткән. Унда зыянлы заводфабрикалар юҡ та инде?**

- Быны аңлай, асыҡлай алыр өсөн ғилми тикшеренеүҙәр уҙғарыу талап ителә. Бәлки, ошо райондарҙағы эсәр һыуҙарҙың химик составында канцероген матдәләр күберәктер. Тағы ла бер факторҙы билдәләмәй булмай: элегерәк райондарҙа яман шеш сирҙәрен тәүләп асыҡлау бик һүлпән гәмәлгә ашырылһа, хәҙер граждандарҙы дөйөм диспансеризациялау күпкә алдымыраҡ, шуға күрә был фактты ошо сәбәп менән дә бәйләп аңлатырға мөмкин.

**Башҡортостанда ниндәй онкологик сирҙәр өҫтөнлөк итә?**

- Пациенттарҙа тәүләп табылған яман шештәр исемлеге ҡатын-ҡыҙҙарҙың һөт биҙҙәре шеше менән башланһа, икенсе урында - ир-аттарҙың простата биҙе шеше, өсөнсө урында - үпкә шеше, дүртенсеһендә - тән тиреһе шеше, бишенсеһендә - йыуан эсәк шеше.

**Кешеләрҙең яман шеш сиренә дусар булыуының күп кенә башҡа сәбәптәре лә булыуы билдәле.**

- Дөрөҫ, барыһын да бер экология торошо менән генә бәйләп булмай. Быны үпкәнең яман шешe сағыштырмаса күп теркәлә. Әлбиттә, ошо яман сир ирҙәрҙә ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарағанда 7 - 10 тапҡырға күберәк. Сәбәбе - беҙҙең тәмәке тартыусы ир-аттарыбыҙ тиҫтәләрсә йылдар дауамында үпкәләрен көслө канцерогендар менән ағыулай. Тәмәке төтөнөнә спектраль анализ үткәреү унда 50-гә яҡын канцероген матдә булыуын асыҡланы. Әгәр тәмәке тартмаусыларҙа үпкә яман шеше 100 мең кешегә 3,4 осраҡ булһа, ошо уҡ нисбәт көнөнә ярты ҡап сигарет тартыусыларҙа 51,4 кеше, 1 -2 ҡап тәмәке тартыусыларҙа - 143,9-ға тиклем етә, ә инде көнөнә 2 ҡаптан артыҡ тартыусыларҙа үпкә яман шеше күрһәткесе 217,3 тәшкил итә. Был, дөрөҫөн әйткәндә, үҙенә үҙен күпмелер ваҡытҡа киҫектәрелеп торған үлем ҡарары сығарыуға тиң.

**Ә беҙ көн һайын ҡулланған аҙыҡ-түлектең дә сифаты һәр осраҡта ла яҡшы тип әйтеп булмай. Ашҡаҙан-эсәк юлдарының яман шеше ошо факт менән бәйле булыуы күптән билдәле бит инде.**

- Был да бик дөрөҫ һығымта. Быны беҙҙә көнбағыш майын бик күп ҡулланалар, унда холестерин юҡ тип, төрлө ашамлыҡтарҙы табала ҡыҙҙыралар. Әммә ҡыҙҙырып әҙерләү өсөн таҙартылған (рафинированный) үҫемлек майҙарын (зәйтүн, авокадо) ғына ҡулланыу фарыҙ, сөнки таҙартылмаған майҙарҙы ҡыҙҙырғанда трансмайҙар барлыҡҡа килә, улар канцероген матдәләр иҫәбенә инә. Табип-онкологтар хайуандарҙың эске майынан әҙерләнгән тунмайҙарҙың кеше организмы өсөн файҙалы булыуын асыҡланы.

Йәнә беҙҙең магазиндарҙа ыҫланған ит аҙыҡтары, синергетик эсемлектәр, ГМО-лы ашамлыҡтар күпләп һатыла, консервалаған ризыҡтарҙы оҙаҡ һаҡлау маҡсатында уларҙың составына төрлө химик консерванттар ҡушыла - былар барыһы ла кеше организмы өсөн үтә зарарлы. Бындай аҙыҡтарҙы күпләп һәм даими ҡулланғанда уларҙың канцероген йоғонтоһонан ҡотолоп булмай.

Алкоголле эсемлектәр ашҡаҙан, эсәк, ашҡаҙан аҫты биҙе, бауыр өсөн үтә зарарлы, улар ошо ағзаларҙа яман шеш булдырыусы факторҙарҙың беренсе рәтендә тора. Ә был ағзаларҙы дауалау бик ҡатмарлы һәм оҙайлы ваҡыт талап итә. Быны беҙҙә һыраны самаһыҙ күп эсеүсе кешеләр был эсемлекте үҙҙәре өсөн зарарһыҙ, тип иҫәпләй. Ә ул бауырҙың май менән ҡапланыуына, циррозға алып килеүенә сәбәпсе икәне күптән билдәле бит инде, сөнки уның составында канцероген матдәләр етерлек. Ҡыҙғаныс, һыра һөйөүселәрҙә хатта ҡәүҙәләрендә ҡатын-ҡыҙҙарға хас физик сифаттар хасил булыуы ла туҡтатмай.

**Яман шеш сиренә дусар булмаҫ өсөн замандаштарыбыҙға ниндәй кәңәштәр бирер инегеҙ?**

- Улар хәҙер киң билдәле, сөнки илебеҙҙә лә, Башҡортостанда ла онкологик сирҙәрҙе профилактикалау программалары эшләп килә. Иң элгәре организмға ҙур зыян килтергән йәшәү рәүешенән, алама ғәҙәттәрҙән арыныу, ваз кисеү фарыҙ. Улар иҫәбендә - тәмәке тартыуҙан, хәмерле эсемлектәр ҡулланыуҙан баш тарта алыу. Ашап-эсеүҙә, төрлө ризыҡтарҙы ҡулланыуҙа биологтар, табиптар, диетологтар кәңәштәрен үтәргә тырышыу, йәшелсә-емештәргә өҫтөнлөк биреү, һаулыҡ өсөн файҙалы дарыу үләндәрен даими ҡулланыу кәрәк. Артыҡ ныҡ һимереү үтә зыянлы, аш өҫтәленән түйыр-туймаҫ китеү хәйерлерәк. Кеше организмында торғонлоҡ, ҡатып ҡалғанлыҡ булмаһын, ағзалар саф һауа менән даими тәьмин ителеп торһон тиһәк, хәрәкәт итергә, физик күнекмәләр эшләргә, тәбиғәт ҡосағына йышыраҡ сығырға кәрәк.

Һаҡланғанды Аллаһ үҙе һаҡлай, тиҙәр. Ғөмүмән, яман шештән ҡурҡып йәшәүҙән фәтеүә юҡ, ундай сир, башлыса, кешенең физиологик һәм психологик халәте менән бермә-бер бәйле. Айыҡ, сәләмәт йәшәү рәүешен үҙ итеү, үҙ организмыңа үҙең ышанып, оло йәштәргә тиклем иҫән-һау йәшәй аласыңды маҡсат итеү бик тә урынлы. Минең практикамда шундай бер ғәжәп хәл булды: бер ҡатын-ҡыҙҙа яман шеш булыуын фаразлап, беҙҙең онкоүҙәккә йүнәлтмә биргәндәр. Диагноз дөрөҫләнде. Әммә был пациент: "Миндә бер ниндәй ҙә яман шештең булыуы мөмкин түгел, мин быға бөтә йәнем-тәнем менән ышанам!" - тип, дауаланыуҙан баш тартты. Бер нисә айҙан ошо ҡатын беҙҙә яңынан диагностика үтте. Ни күҙебеҙ менән күрәбеҙ - уның организмында бер ниндәй ҙә яман шеш күрһәткестәре табылманы. Был кеше психикаһының, уның үҙаңының ни тиклем ҡеүәтле көс була алыуына дәлил. Кешенең иммун системаһы көслө булһа, ул яман шеште лә юҡ итә ала.

Әммә ир-аттарға ла, ҡатын-ҡыҙҙарға ла, бигерәк тә 50-60 йәштән һуң йылына иң кәмендә ике мәртәбә терапевтҡа барып тикшерелеү, диспансеризация үтеү мотлаҡ. Юғиһә, беҙҙең онкоүҙәккә килеүселәр уғата һүлпән - уларҙың яртыһынан күберәгендә яман шеш 3-сө - 4-се стадияға еткән була. Ә сир ваҡытында билдәләнһә, уны дауалау уңышлыраҡ була, кеше ғүмере байтаҡ йылдарға оҙайтыла.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Халҡыбыҙ нисек дөрөҫ әйткән: "Сәләмәт тәндә - сәләмәт рух". Әҙәм балаһының йән һәм тән сәләмәтлеге - уның иң ҙур байлығылыр, сөнки һәр кемдең тормош бәхете уның таҙалығы, иҫәнлек-һаулығы менән бермә-бер бәйле.**

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

ТАБИП КӘҢӘШЕ



# СИРҘЕ ИҪКӘРТЕҮ ӨСӨН...

**Республика Медицина иҫкәртеүе һәм йәмәғәт һаулығы үҙәгенең баш табибы, медицина фәндәре кандидаты Алиса МАМАЕВА хәүефле сирҙәрҙе иҫкәртеү өсөн даими рәүештә ниндәй анализдар тапшырыу кәрәклеге хаҡында һөйләнe.**

- Физик әүҙемлек һәм эш һәләтлеген һаҡлау өсөн даими табипҡа күренеп тороу һәм 18 йәштән 39 йәшкәсә - өс йыл һайын, ә инде 40 йәштән һуң йыл һайын диспансеризация үтергә кәрәк. Түбәндәге анализдарҙы тапшырып тороу ҙа файҙалы булыр: холестерин - йыл һайын (атеросклероз, инфаркт, инсульт хәүефенә контроль йәһәтенән), глюкоза - йыл һайын (шәкәр сирен иҫкәртеү өсөн), ҡанға дөйөм анализ - 40 йәштән һуң - йыл һайын (елһенеү күренештәрен иҫкәртеү, аҙ ҡанлылыҡ), йәшерен ҡанға тиҙәк - 40 йәштән һуң ике йылға бер тапҡыр (эсәк яман шешенә скрининг), С гепатитына антитела - 25 йәштән һуң 10 йылға бер, өҫтәмә анализдар (АЛТ, АСТ, креатинин һ.б.).

Алиса Мамаева әйтеүенсә, күп кенә етди сирҙәр, шул иҫәптән, йөрәк-ҡан тамырҙары, диабет һәм яман шеш үҙе хаҡында белгертмәүе мөмкин. Шуға күрә, сир ихтималлығын ваҡытында асыҡлау һәм уларҙы иҫкәртеү өсөн был анализдарҙы тапшырыу бик мөһим. Был йәштәр өсөн дә кәрәк. Ике йылға бер флюорография үтеп тороу мотлаҡ. Ҡатын-ҡыҙҙар 18 йәштән гинекологҡа ҡаралырға, УЗИ йә маммография үтергә тейеш. Ғөмүмән, 40 йәштән һуң һаулыҡҡа иғтибарҙы көсәйтеү зыян итмәҫ ине. Ирҙәргә иһә 45 йәштән һуң простат-специфик антиген (ПСА) анализын биш йылға бер тапшырып тороу мотлаҡ тәҡдим ителә. Унан һуң 39 йәшкә тиклем - өс йылға бер тапҡыр, ә 40 йәштән һуң йыл һайын терапевҡа күренеү ҙә зыян итмәйәсәк. Был организм торошон күҙәтеп торорға һәм сир хәүефен ваҡытында иҫкәртеүгә булышлыҡ итәсәк.

Табиб әйтеүенсә, ир-егеттәр, ғәҙәттә, үҙҙәренең һаулыҡ торошо хаҡында әллә ни хәстәрлек күреп бармай, шуға күрә уларға ҡайһы бер сирҙәрҙән һаҡланыу буйынса ябай ғына кәңәштәр биреү артыҡ булмаҫ ине. Әйткәндәй, ирҙәргә лә үҙҙәренең бил үлсәмен күҙәтеп барыу кәрәк. Әгәр был күрһәткес күләме 94 см-ҙан артып китә икән, туҡланыу рационын үҙгәртеү һәм әүҙем тормош рәүешенә күсеү кәрәк. Иммунитетты ныҒытыу һәм аш һеңдереү эшмәкәреген көйләү өсөн көнөнә 400 г йәшелсә һәм емеш-еләк ашарға кәрәк. Даими йоҡоһоҙлоҡ кәүҙә ауырлығы артыуына һәм йонсоуға килтерә, шуның өсөн яҡшы ялләтелгән булмәлә 7-8 сәғәт йоҡо тейеш. Алкоголь, тәмәке, вейп һәм кальян үпкәгә, йөрәккә, ҡан тамырҙарына ғына зыян килтереп ҡалмай, дөйөм һаулыҡ һәм кәйеф торошон да ағыулай. Аҙнаһына 150 минутлыҡ һәүетемсә физик көсөргәнеш кәрәк. Бының өсөн хәлдән тайғансы ауыр эш башҡарырға йә спортзалда тир түгергә лә кәрәкмәй, тышта йөрөү, йөҙөү, велоспорт, йога йә бейеү менән шөғөлләнеү ҙә ярап ҡалыр ине.

***✓ Кискеһен ризыҡты эшкәртеү өсөн ферменттар бүлеп сығарыуға яуаплы булған ашҡаҙан аҫты биҙе эшләмәй тиерлек. Шуға күрә йоҡларға ятыр алдынан ашаһаҡ, ашҡаҙан аҫты биҙе һутын кәрәкле күләмдә етештереп өлгөрмәй.***



*БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!*

# БАЛАҺЫ БАРҘЫҢ ЯЙЫ БАР



**Башҡортостан Дәүләт хеҙмәт инспекцияһы эшләп йөрөүсе ауырлы ҡатындарға - буласаҡ әсәләргә тейешле ташламалар хаҡында аңлатма бирҙе.**

"Хеҙмәт кодексына ярашлы, ауырлы хеҙмәткәр ҡатынды эш биреүсе башланғысы менән "статья" буйынса, штат ҡыҫҡартылыу сәбәпле һәм һынау ваҡытын үтә алмау һылтауы менән эштән сығарыу тыйыла. Ләкин шулай ҙа була: хеҙмәткәрҙе декретҡа киткән ҡатын урынына алырға мөмкиндәр һәм декреттағы ҡатын эшкә сығыу менән уның урынын бушатырға кәрәк була. Әгәр декрет урынына килгән хеҙмәткәр үҙе лә ауырлы булһа, уға ярашлы башҡа эш тәҡдим ителергә тейеш. Әгәр был ҡатын эшкә урынлашҡанда уның менән ҡыҫҡа ваҡытҡа килешеү төҙөлөп, хеҙмәткәр шул ваҡыт эсендә ауырға ҡалһа, эш биреүсе уның менән ауырлылыҡ осоро бөткәнгә тиклем килешеүҙе оҙайта, ә уға декрет ялы бирелгән булһа, шул осор бөткәнгә тиклем килешеү оҙайтыла, - тип хәбәр итә БР Дәүләт хеҙмәт инспекцияһы етәксеһенең урынбаҫары Оксана Ванскова. - Декрет алдынан йыллыҡ түләүле отпуск өсөн ойошма, хеҙмәткәрҙең стаж күләменә ҡарамайынса, тулыһынса түләргә тейеш. Эш биреүселәр яратып бөтөрмәгән тағы бер мәсьәлә бар. Йөклө хеҙмәткәр эш ваҡытында табипҡа бара ала, һәм закон уға табипҡа барыуы хаҡында эш биреүсегә ниндәй ҙә булһа белешмә биреүҙе кәрәк тип тапмай".

Былтыр тулы көнгә эшкә сыҡҡан хәлдә хеҙмәткәргә 1,5 йәшкә тиклем баланы ҡараған өсөн пособиены һаҡлау буйынса законға үҙгәрештәр индерелде. "Ошоноң менән бәйле беҙгә ирҙәр күп шылтырата, улар, эшләп йөрөһә лә, ҡатындары бала ҡарау отпускыһында булып та пособие алмаһа, декретты үҙҙәре исеменә яҙҙыра аламы, тип ҡыҙыҡһыналар. Бындай һорау аңлашыла: ирҙәр эш хаҡын күберәк ала һәм, тәбиғи, пособие ла мулыраҡ буласаҡ. Эш биреүсе, әлбиттә, бала ҡарау буйынса баланың атаһына ла, өләсәһе-ҡартатаһына ла отпуск биреүҙән баш тарта алмай. Закон буйынса, бындай отпуск менән баланың атаһы ла, әсәһе лә файҙалана ала, ләкин пособие уларҙың береһенә генә түләнә. Ә ауыл ерендә эшләүсе йөклө ҡатындарға эш биреүсе 40 сәғәтлек эш аҙнаһын 36 сәғәткәсә ҡыҫҡартып, хеҙмәт хаҡын тулыһынса түләргә бурыслы", - тип аңлата О.Ванскова.

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

- Эшкә урынлашҡанда Өфө ҡатын-ҡыҙҙарының 23 проценты, киләсәктә бала табыу ниәтегеҙ бармы, тип ҡыҙыҡһыныусы һорауға тап була икән. Һорау алыуҙар һөҙөмтәһенән күренеүенсә, ҡатын-ҡыҙҙарҙың күпселеге был һорауға "юҡ" тип яуап биргән. Бала табыуға ниәте хаҡында күберәк 35 йәшкә тиклемге ҡатын-ҡыҙҙарҙан һорайҙар, шул уҡ ваҡытта 45 йәшкә тиклемгеләр ҙә бындай һорауға тап була.

- Башҡортостанда өс йыл эсендә ЭКО ярҙамында 1335 сабый донъяға килгән. Был хаҡта республиканың Һаулыҡ һаҡлау министрлығынан хәбәр иттеләр. "Мотлаҡ медицина страховкаһы аҡсаһы иҫәбенә финансланған бушлай экстракорпораль аталандырыуға (ЭКО) квоталар артыуы һөҙөмтәһендә күп парҙар ата-әсә булыу бәхетенә өлгәшергә мөмкин. Әгәр 2022 йылда 1834 квота бүленһә, 2025 йылда уларҙың һаны 2489-ға етте. Программаны киңәйтеү бала табырға теләгән ғаиләләр өсөн яңы мөмкинлектәр аса", - тип белдерҙеләр ведомствола.

- Өфө табибы ҡатын-ҡыҙҙарҙың беренсе баланы табыу өсөн ҡулай йәшен атаны. Ҡатын-ҡыҙҙарға 25-35 йәштә бала табыу яҡшыраҡ, тип иҫәпләй Башҡортостан Һаулыҡ һаҡлау министрлығының акушерлыҡ һәм гинекология буйынса штаттан тыш белгесе Ирина Фәтҡуллина. Табип әйтеүенсә, 15-49 йәштә гүзәл заттар үҙаллы ауырға ҡалырға һәм һаусәләмәт бала табырға һәләтле. Хәҙер ошондай тенденция күҙәтелә: тәүге сабыйҙы улар уртаса 27-29 йәштә таба. Йөккә уҙырға теләгәндәр өсөн акушер-гинеколог зарарлы ғәҙәттәрҙән ҡотолорға, артыҡ кәүҙә ауырлығын кәметергә, фолаттар һәм йод эсергә, милли календарь буйынса прививка яһатырға кәңәш бирә.

**Элина ӘХМӘТОВА.**

*СӘЛӘМӘТЛЕК МӘКТӘБЕ*

# ҺУҠЫРАЙМАҪ ӨСӨН...



**Глаукома һуҡырлыҡҡа һәм күреү һәләте буйынса инвалидлыҡҡа килтергән ауырыуҙар араһында донъяла беренсе урын биләй.**

Өфөнөң 8-се ҡала клиник дауаханаһы икенсе микрохирургия бүлеге мөдире Светлана Зәйнуллина һөйләүенсә, ауырыу, әгәр уны дауаламаһалар, мотлаҡ һуҡырлыҡҡа килтерә.Был ауырыу 60 йәштән өлкәндәрҙә, ҡатын-ҡыҙҙа йышыраҡ осрай, нәҫелдән-нәҫелгә күсә.

Глаукоманы иҫкәртеү сараһы юҡ. Доктор 40 йәштән өлкәндәргә йылына бер тапҡыр эске күҙ баҫымын үлсәп торорға һәм күреү һәләте кәмегән осраҡта белгестәргә мөрәжәғәт итергә кәңәш итә. Ауырыу барлыҡҡа килгәндәргә һуҡыраймаҫ өсөн, дауалауҙы контролдә тотоу өсөн даими рәүештә табип-офтальмологта күҙәтелергә кәрәк.

# АЛАМА ҒӘҘӘТ БЫЛ!



**Йоҡлар алдынан гаджеттарҙа ултырыу үҫмерҙәрҙең һаулығына кире йоғонто яһай, ти Башҡортостан Һаулыҡ һаҡлау министрлығының үҫмерҙәрҙең, уҡыусы йәштәрҙең репродуктив һаулығын һаҡлау буйынса штаттан тыш баш белгесе Индира Сәхәүетдинова.**

Эш шунда: үҫмерлек осоро - репродуктив системаның барлыҡҡа килеү ваҡыты. Шуға күрә балаларға 8-10 сәғәтлек төнгө йоҡо мөһим. Фәнни яҡтан иҫбатланғанса, норманан кәмерәк йоҡлаған кешеләр күберәк стресс кисерә.

"Йоҡо һәм йоҡо сифаты өсөн яуаплы төп гормон-мелатонин. Әгәр ҙә беҙ уны етештереүҙең киске ваҡытын үткәрһәк, гормон кимәле түбәнәйә, ә әгәр смартфон, уйын приставкаларын ҡулланыу, дәртле, көслө музыканы тыңлау ғәҙәткә инһә, организм тулыһынса үҙгәртеп ҡорола, шул иҫәптән үҫмер сағында етерлек күләмдә тупланмаған резерв туҡланыу сығанаҡтары ла үҙгәрә", - тип аңлатты белгес.

Гаджетты күп ҡулланған балаларҙа бәйлелек барлыҡҡа килә һәм улар, яратҡан смартфоны эргәһендә булмаһа, йоҡлай алмай. Бында шуны иҫтә тотоу мөһим: баш мейеһенә тәьҫир итеүҙән тыш, ул репродуктив системаға кире тәьҫир итә, смартфондар электромагнит нурланыш иҫәбенә буласаҡ атай-әсәйҙәрҙең репродуктив функцияһын 20-30 процентҡа кәметә.

Ҡыҙҙарҙа һәр төрлө стресс, киҫкен дә, хроник та, шул иҫәптән хроник йоҡоһоҙлоҡ һәм насар йоҡо күрем циклы боҙолоуына килтерә, был гинекологик ауырыуҙарға килтерергә мөмкин.

**Ләйсән ЗАКИРОВА.**

# КИСЕН КҮП АШАМА!



**Кискеһен артыҡ күп ашау һәм көн режимының булмауы ашҡаҙан аҫты биҙенең шешеүенә килтереүе ихтимал, тип белдерә Өфө табибы Ирина Колосова.**

Белгес әйтеүенсә, кискеһен ризыҡты эшкәртеү өсөн ферменттар бүлеп сығарыуға яуаплы булған ашҡаҙан аҫты биҙе эшләмәй тиерлек. Шуға күрә даими рәүештә йоҡларға ятыр алдынан ашаһаҡ, ағзаға көс төшә һәм ул ашҡаҙан аҫты биҙе һутын кәрәкле күләмдә етештереп өлгөрмәй. Тимәк, кискелеккә еңелсә ризыҡ, мәҫәлән, быҡтырылған йәшелсә һайларға, ә углевод, май һәм аҡһымдарҙы иртәнге һәм төшкө ашҡа ҡалдырырға кәрәк.

Шулай уҡ ашҡаҙан аҫты биҙе һәйбәт эшләһен өсөн йоҡо туйырға тейеш. Ирина Колосова киске сәғәт 11-ҙән дә һуңға ҡалмайынса йоҡларға ятырға кәңәш бирә.

Көсөргәнеп эшләргә мәжбүр булған ашҡаҙан аҫты биҙе ауырта башлай. Һул яҡ ҡабырға аҫтында ауыртыу барлыҡҡа килә, үт ҡоҫоу, эс китеү күҙәтелә. Киҫкен панкреатитты дарыуҙар менән генә баҫырға мөмкин. Уны дауаламағанда, хроник сиргә әүерелә.

# ЙӨРӘК СИРЕ "ЙӘШӘРӘ"



**Бөтөн донъя кимәлендәге үлем сәбәптәре араһында йөрәк-ҡан тамырҙары сире беренсе урында тора.**

Ҡасандыр был сир менән кеше ҡартайғас ҡына ауырый башлаһа, бөгөн ул 25 йәшкә тиклемгеләр араһындала бик йыш осрай. Бының сәбәптәре - тормоштоң үтә шәп тиҙлек алыуында һәм зыянлы ғәҙәттәр барлыҡҡа килеүендә. Күңелһеҙ эҙемтәләргә тарымаҫ өсөн Йәмәғәт һаулығы һәм медицина иҫкәртеүе республика үҙәге белгестәре сирҙең билдәләренә иғтибар итергә һәм улар барлыҡҡа килгән осраҡта табиб-кардиологҡа барырға кәңәш бирә. "Башҡортостан Республикаһында сәләмәтлек" телеграм-каналында тап бына ошо хаҡта һүҙ бара.

Хәүефле билдәләрҙең береһе - йөрәк тапҡырында ауыртыу, бигерәк тә әгәр ул һул яҡ ҡул йәки яурынға, муйынға йә аҫҡы яңаҡҡа биргән хәлдә.

Икенсе билдә - кеше тыныс булған хәлдә лә йөрәктең аҡрын йә йыш тибеше. Белгес менән мотлаҡ кәңәшләшеүҙе талап иткән тағы бер билдә - юғары ҡан баҫымы. Өлкән кеше өсөн нормаль күрһәткес - 140/90, ә инде ҡан баҫымы шунан юғарыраҡ икән, табибҡа күренегеҙ. Уға шулай уҡ айырыуса аяҡтар бер ниндәй сәбәпһеҙҙән (мәҫәлән, тоҙло ризыҡ ҡулланыу-ҡулланмау) шешенеү менән яфаланыусылар ҙа барырға тейеш.

*ШУЛАЙ ҘА БУЛА!*

# КҮҘҘӘ - СЕЛӘҮСЕН

**Күптән түгел интернет селтәрендә Өфөнөң 8-се ҡала дауаханаһы офтольмологтары тарафынан 40 йәшлек ҡатын-ҡыҙҙың күҙенән оҙон селәүсен алыуҙары тураһында хәбәр баҫылды. Пациент һул күҙенең аҫҡы өлөшөндә "хәрәкәт" һәм тығыҙланыу тойғоһона зарланған булған.**

8-се дауахананың күҙ микрохирургияһы бүлеге мөдире, Башҡортостан Республикаһы Һаулыҡ һаҡлау министрлығының штаттан тыш баш офтальмологы Светлана Зәйнуллина белдереүенсә, бындай осраҡтар табиптар тәжрибәһендә була, әммә йыш түгел. "Бындай ауырыу күҙ дирофиляриозы, тип атала һәм ул күҙ аҫты күҙәнәксәһендә йәки күҙ алмаһы структураларында гельминттар булған гранул йәки төйөндәр барлыҡҡа килеүе менән оҙатыла. Ҡорттоң уртаса оҙонлоғо 145 мм тәшкил итә. Ҡағиҙә булараҡ, гельменттар кеше организмында енси яҡтан өлгөрмәйенсә үлә", - ти Светлана Зәйнуллина.



Паразит кеше тәнендә серәкәй тешләгәндән һуң барлыҡҡа килергә мөмкин, ә серәкәйҙәр өсөн йоғошло сығанаҡтар - ҡырағай эттәр, һирәк осраҡта бесәйҙәр. Сәйәхәт ваҡытында ла сир йоҡторорға мөмкин. Мәҫәлән, дауаханаға күҙ ауыртыуына зарланған ҡыҙ мөрәжәғәт иткән. Уның һүҙҙәренсә, барыһы ла аяҡтан башланған, ул унда нимәлер шыуышып йөрөгәнен тойған. Һөҙөмтәлә офтальмолог конъюнктив аҫтында паразит таба һәм уны алып ташлай. Пациентты артабан тикшереү өсөн инфекция дауаханаһына ебәрәләр.

Әгәр селәүсен күҙгә эләкһә, ул шешә, ҡысыта һәм күҙ йәштәре аға. Күҙ тиреһе аҫтындағы тығыҙлыҡтар ҙурая һәм формаһын үҙгәртә ала, әгәр гельминт конъюнктив аҫтында йәки күҙ алмаһында булһа, ят есем һәм хәрәкәт тойғоһо буласаҡ.

Медикаментоз терапия гельминтҡа ҡаршы дарыуҙар ҡулланыуға ҡайтып ҡала. Иҫкәртеүгә килгәндә, бында йорт хайуандарын ваҡытында тикшерергә, дегельминтизация үткәрергә кәрәк. Бынан тыш, биләмәләрҙе серәкәйҙәрҙән эшкәртеү мөһим. Әгәр кеше ваҡытында медицина ярҙамы һорап мөрәжәғәт итһә, күҙ өсөн етди эҙемтәләрҙән ҡотолорға мөмкин, тип белдерә табип.

КӨЛӨП АЛАЙЫҠ ӘЛЕ!

# ЕР КӘРӘК ИНЕ,

## йәки Япония-Финляндия мажаралары




**Бер мәл Өфөнән Бөрйәнгә бер йәш етәксе (исем-шәрифе сер булып ҡалһын, сөнки ул миңә был хәлде сер итеп һөйләгәйне) халыҡ менән осрашыуға килгән. Урындағы ер-һыу атамаларының үҙенсәлеген белмәү арҡаһында ошондай ҡыҙыҡ хәлгә тарыған ул.**

Әйткәндәй, башҡа районднарҙа нисектер, ә бына Бөрйәндә һәр ауыл ике исем йөрөтә. Аҫҡар һәм Исламбай ауылдарының ғына исемдәре берәү, бүгәй. Уңайы сыҡҡанда ауылдарҙың рәсми һәм халыҡ исемдәрен һанап китәйек әле. Белгәндәргә - иҫкә төшөрөү, белмәгәндәргә - өйрәнеү булыр. Әгәр ҙә мәгәр яңылыш-фәлән яҙһам, төҙәтеүҙәрҙе көтөп ҡалам. Монасип ауылын халыҡ Кепес тип йөрөтә. Ҡасандыр Монасип ауылынан тағы ике ауыл барлыҡҡа килгән. Был ауылдар рәсми ҡағыҙҙарҙа Яңы Монасип һәм Иҫке Монасип исемдәре менән билдәле. Ә халыҡ теләндә улар Мишәр һәм Һарт тип атала. Әбделмәмбәт ауылы - Ҡыпсаҡ, Бәләкәй Ҡыпсаҡ - Кордон, Һарғая - Үрге заповедник, Килдеғол - Һарағы, Яуымбай - Ҡайынуй (Ҡайынөй), Мәһәҙей - Түңгәүер, Мораҙым - Аратау (Әптүшкин), Тимер - Аралбай, Байназар - Истамкин, Нәби - Ҡуян, Ҡурғашлы - РТС, Иҫәнғазы - Ҡуҫкәрбәк, Йәрмөхәмәт - Маҙалы, Иҫке Мөсәт - Ҡомйылға (Улаҡ), Ғәлиәкбәр - Иҫке Ыҙма, Брәтәк - Ятап, Кейекбай - Баштире, Мәҡсүт - Уашаш (Вашаш), Ғәҙелгәрәй - Шүлгән, Ҡотан - Таш мәсет (Мәсетле), Ырғыҙлы - Завод, Ишдәүләт - Ябаҡ, Үрге Нөгөш - Ямаш, Мәндәғол - Ҡолбахты, Яңы Собханғол - Янһары (Ҡомйылға тамағы), Иҫке Собханғол - Бөрйән (Алағуян тамағы), Яңы Усман - Тарыуал, Баҙал - Финляндия, Яңы Мөсәт - Берлек (Алағуян башы, Япония).

Ә һөйләйәсәк хәбәр Баҙал һәм Яңы Мөсәт ауылдары исемдәренә бәйле. Уларҙы бөрйәндәр Финляндия һәм Япония тип йөрөтә. Был исемдәргә беҙ күнегеп тә бөткәнбеҙ. Ә бына ситтән килгән кешегә... Ә хәҙер Өфө ҡунағының һөйләгәнен тыңлайыҡ әле. Әйткәндәй, Баҙал бисҭәһе район үҙәгенә ҡарай. Шуға күптәр Финляндиянан, әй, Баҙалдан ер алырға, унда өй төҙөргә тырыша. Ней тиһәң дә, район үҙәге бит.

...Ишекте һаҡ ҡына туҡылдатып, "Мөмкинме, балам, мөмкинме?" тип, бүлмәгә апаруҡ ҡына йәштәге оло апай, дөрөҫөрәге, инәй килеп инде. Күрһәткән ултырғысҡа ултырғас, башындағы яулығын рәтләй һалды, кейемдәрен һыпырғылаштырып ҡуйҙы. Аҙаҡ устарын бер-береһенә ҡуйып, ауыҙ эсенән генә ниндәйҙер доға уҡып алды. Шунан миңә борола төштө. Әй, бында һин дә бар бит әле, тигәндәй, миңә бер аҙ текләп ултырҙы ла ихлас йылмайып ебәрҙе.

- Һау ғынамы, балаҡайым, һау ғынамы! Хәлдәрең нисек, улым? Иртән тамағың ашап алдыңмы, исмаһам? Беҙҙә ҡайғыртып, ер аяғы - ер башы ерҙән килеп еткәнһең бит. Имен-аман ғына йөрө инде, балам...

Һүҙҙең оҙонға китерен самалап, тамаҡты ҡыра биреп ҡуям.

- Ней йомош ине, инәй.

Инәй бер аҙға туҡтап ҡала. Шунан тағы йылмайып ебәрә.

- Ер тип йөрөйөм, балам, ер тип йөрөйөм. Улыма әйткәйнем, баралмайым, тей. Эшенән ебәрмәгәстәр, баралмайҙыр шул (көрһөнөп ҡуя). Киленгә әйткәйнем, ваҡытым юҡ, тей (ҡуй инде, тигән һымаҡ ҡулын һелтәп ҡуя). Унысама бала менән ваҡыты ла юҡтыр инде. Береһенән береһе бәләкәй дүрт бала менән мәж килә ул. Шуға, аптырап, үҙем килдем, балам. Мәйтәм, моғайын, ауыҙға һуғып сығармаҫтар. Барайым, белешәйем, тип килдем әле.

Мин бер аҙға уйға ҡалам. Ниндәй ер тураһында һүҙ бара икән?

- Инәй, ер тураһында бер аҙ аңлатыбыраҡ әйтегеҙ әле. Ниндәй ер кәрәк һеҙгә? (Шаярта биреп өндәшеп ҡуям) Ҡара ер кәрәкме? Әллә балсыҡлыраҡ булһынмы?

Инәй бер аҙ аптыраулы ҡараштары менән миңә текләп тора бирә лә тағы йылмайып ебәрә.

- Ер нимәгә кәрәк тип... шул өй һалырға инде, балам, өй һалырға. Ҡара ер булһа ла, балсыҡлы булһа ла, ташлыраҡ ер булһа ла бара. Ере генә булһын. Өйөн һалырбыҙ беҙ уны күмәкләп.

Минең эштең айышына һаман төшөнә алмай ултырғанды аңланы булһа кәрәк инәй.

- Һуң дәүләт күмәк балалы ғаиләгә бушлай ер бирә бит! Шуны юнләп йөрөйөм мин. Улымдың ваҡыты юҡ, килен йөрөй алмай.

Бына хәҙер эштең айышына тамам төшөндөм. Инәй улы-киленен ҡайғыртып, ер юллап йөрөй икән. Ярай, мөмкинлек булһа, ярҙам итергә тырышырмын. Әйткәндәй, киләсәктә йылмайып һөйләшергә өйрәнер кәрәк. Бына инәйҙе әйтәм, ҡалай матур итеп йылмайып ултыра. Шуға инәйгә оҡшатырға тырышып, йылмайып ебәрәм. Һәм унан һорай ҡуям.

- Ҡайҙан ер кәрәк, инәй?

Эштең ыңғайлауына ҡыуанып киткән инәй ихлас йылмайып ебәрә.

- Ҡайҙан тип ней.. шул Финляндиянан инде!

Былдай яуапты ишеткәс, инәйҙең шөрөптәре бер аҙ бушаған икән, тип уйлап ҡуям. Әммә ихлас йылмайып (ә шулай ҙа бер аҙ мыҫҡыллы тауыш менән) һүҙемде дауам итәм.

- Японияnан ер кәрәкмәйме, инәй?

Былдай яуапты ишеткән инәй кеткелдәп көлөп ебәрә.

- Юҡ, балам, Японияnан кәрәкмәй. Финляндиянан кәрәк.

Шөрөптәре бушаған инәй менән һөйләшеүе күңелле булып китә. Шаярыу ҡатыш етди тауыш менән һорайым.

- Ә нишләп Японияnан кәрәкмәй, инәй?

Инәй тағы йылмайып ебәрә.

- Сөнки мин үҙем Японияла йәшәйем. Унда бына тигән өйөм бар.

Хәҙер йылмайыу ҡайғыһы китте миндә.

- Ә Япония хәтле Японияnан Бөрйәнгә тиклем нисек килеп еттең... еттегеҙ һуң?

Инәй ауыҙын баҫып көлөп ебәрә.

- Һуң, балам, хәҙер машиналар гөүләп тора бит. Береһенән төшөп өлгөрмәйһең, икенсеһенә ултырып та китәһең.

Инәйҙең шөрөптәре бер аҙ түгел, ә апаруҡ бушаған, тигән һығымта яһап ҡуям. Ауырыу кеше менән бүлышып ултырыу гонаһ булыр, мәйтәм. Шуға күрә мин ишеккә хәтлем оҙата барам.

- Булыр Финляндиянан ер, булыр, инәй, сәләм әйт улыңа, киленеңә.

Оҙон коридорҙа инәйҙең рәхмәт һүҙҙәре апаруҡ яңғырап торҙо.

- Итәгәтле бала үҫтергән атайәсәйеңә рәхмәт, юлың-фәлән төшһә, инеп йөрө, балам, аяҡ-ҡулдарың һыҙламаһын, ике донъя бәхетен күр...

Әле бына ошо хәлде көлә-көлә район башлығына һөйләп ултырам. Әммә... ул нишләптер миңә ҡушылып көлмәй. Киреһенсә, тауышына бер аҙ ҡырыҫлыҡ сығарып әйтеп ҡуя.

- Инәйгә һүҙ биргәс, хәҙер Финляндиянан буш ер табырға тура килә инде.

Мин аптырап ҡалам. Шаяртам, шаяртам, тип, башлыҡтың көлөп ебәрер мәлен көтәм. Әммә ул көлмәй. Хатта йылмайырға ла уйламай. Тамам баш буталды бит, әй. Аптырап һорай ҡуям.

- Ә теге инәй ысынлап та Японияла йәшәйме ней?

Блокнотына ниҙер яҙа башлаған район башлығы башын күтәрмәй генә миңә яуап бирә.

- Эйе, йәшәй (шул арала ул яҙыуын тамамлай, блокнотын яба һәм миңә ҡарап әйтеп ҡуя). Мин бит үҙем дә сығышым менән Японияnан.

Ирекһеҙҙән көлөп ебәрәм дә... ҡушылып көләүсе булмағас, "японец" башлыҡҡа ҡарап, башты һыйпап ҡуям. Мәйтәм, ҡуй, булмаһа, ҡайтайым мин. Үҙем ирекһеҙҙән ишек яғына ҡарап ҡуям. Аллам һаҡлаһын, әгәр берәү, "баан - зааай!" тип югереп килеп инһә, йә үҙемдең шөрөптәр бушап ҡуйыр. Баш һау саҡта ҡайта һалайым. Ә финдәр һәм японлар хәлен район башлығы үҙе берәй нисек хәл итер әле...

**Әғләм ШӘРИПОВ.**

АФАРИН!

# ДОНЪЯҒА ТАРАЛА...

**"Урал батыр" эпосы нигеҙендәге башҡортса альбомдың Рәсәй лейблында сығыуы тураһында хәбәр иткәйнек инде. "Һомай" йыры Ҡаҙағстанда һәм Урта Азия илдәрендә ҙур популярлыҡ яулай. "Ay Yola" башҡорт проектының йырҙарын интернетта миллиондан артыҡ кеше ҡараған, ҡараусылар даими арта бара.**



Ҡаҙағстан тыңлаусыһы, журналист Ержан Әхмәтов был күренеште ыңғай мәҙәни үҙ-ара алмашыу тип атай:

- Башҡорт йырының Ҡаҙағстанда популяр булып китеүенә ғәжәпләнергә лә кәрәкмәй тип уйлайым, - ти Ержан Әхмәтов. -Беренсенән, ҡаҙаҡ тыңлаусыһы башҡорт контентын һағынды. Ҡаҙағстанда ҡаҙаҡтарға аңлайышлы һәм яҡын туғандаш халыҡтарҙың вәкилдәре ижад иткән йырҙарҙы яратып тыңлайҙар. Һуңғы йылдарҙа мин ике музыкаль йүнәлеште генә атай алам (традицион сәнғәтте иҫәпкә алмағанда, ҡурай айырым урынды биләй): эстрадала "Арғымаҡ" төркөмө һәм йырсы Айгөл Үтәгәнованың йыры (асылда, Батырхан Шукеновтың башҡорт телендәге йыры). 20 йыл эсендә Ҡаҙағстанда яңғыраған бына ошо йырҙарҙы ғына иҫәмә төшөрҙәм.

Йырҙың боронғо, башҡорт фольклорынан булыуы аңлашыла, әммә уны электрон музыка элементтары менән, хайперпоп стилендә ҡулланыу ҡыҙыҡлы. Ҡаҙағстанда хайперпоп күптән бар, ләкин традицион музыка, традицион башҡарыу Ҡаҙағстанда һаман да популяр булып ҡала, ә хайперпоп беҙҙә башлыса 20 йәшкә тиклемге йәштәр араһында популяр тип әйтер инем. "Һомай Урал батыр" композицияһында хайперпоп стилен ҡулланыу маҡсатҡа ярашлы, сөнки башҡорт теленә, бигерәк тә башҡорт йәштәре араһында ҡыҙыҡһыныу уята. Ул ҡаҙаҡ йәштәре өсөн дә аңлайышлы, сөнки телдәр 85 процентҡа оҡшаш...

Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, альбом авторҙары командаһында - Башҡортостандың атҡаҙанған артисы, Шәйехзада Бабич исемендәге республика йәштәр премияһы лауреаты, "Арғымаҡ" этно-төркөмөн ойоштороусы һәм уның солисы Ринат Рамазанов (вокал, ҡурай), "Илһам" халыҡ-ара конкурсында гран-при яулаған йырсы, "Musume" проектының йөҙө һәм тауышы Адель Шәйхетдинова (вокал, гитара, думбыра) һәм Руслан Шәйхетдинов (саунд-продюсер, бас-гитара, ҡыл-ҡумыҙ): билдәле DJ, "Maximum" радиоһында "Electroshock" радио-шоуын алып барыусы, музыкант, тауыш режиссеры һәм DJ Ruslan Sever.

Ринат Рамазанов "Башинформ"ға "Һомай" йырын башҡарыусы Адель Шәйхетдинова менән хеҙмәттәшлек тураһында һөйләнә: "Адель Шәйхетдинова - диджей Руслан Северҙың ҡыҙы. Руслан менән был проектты башлаған саҡта беҙгә ҡатын-ҡыҙ тауыштары, вокализдар кәрәк ине. Адель партияны башҡарғас, уның солист була алыуын аңланыҡ. Ир-егеттәр һәм ҡатын-ҡыҙҙар партияларына ҡурай, ҡумыҙ, өҙләү, саунд-продюсер өҫтәлә, аранжировка авторы - Руслан Шәйхетдинов. Ҡайһы бер, атап әйткәндә, "Батырҙар" һәм "Һомай" йырҙарының һүҙҙәрен Диана Килдина яҙҙы. Эпостан өҙөктәр менән релиздар тағы ла көтөлә".

✓ *Быйыл хайуандарҙы мотлаҡ идентификациялау тураһында закон ҡабул ителәсәк. Кемделер эт тешләй икән, хужаһы, был минең эт түгел, тип ғәйебен танымаҫҡа мөмкин. Бындай осраҡта нисек эт тешләгәндә иҫбатларға?*



ИНТЕРНЕТТАН



# КӨНӨНӘ ӨС СЫНАЯҠ СӘЙ

■ Калифорния университеты ғалимдары асыҡлауынса, көнөнә өс сынаяҡ сәй эсеү оло йәштә лә хәтерҙе яҡшы һаҡлап ҡалыуға булышлыҡ итәсәк. Улар тиҫтә йылдар буйына алып барылған 6 төрлө тикшеренеүҙәрҙе берләштереп, ошондай фекергә килгән. Сәйҙең файҙаһы шунда - уның составындағы тиамин ҡартайған кешеләрҙе Альцгеймер ауырыуҙарынан һаҡлай. Көн һайын сәй эсеүселәр аҡыл ҡеүәһен дә һаҡлап ҡала ала, хәтер менән бәйле проблемалар уларҙа өс тапҡырға һирәгерәк осрай.

■ Әгәр ҙә гел генә йоҡо килеү менән көрәшәһегеҙ икән, был нормаль хәл тип белдерә эксперттар. Баҡтиһәң, февралдә күптәр шулай "йоҡоға тала" икән. Әммә яҙ айҙары етеү менән хәлегеҙ шунда уҡ яҡшырасаҡ. Март менән сағыштырғанда, февралдә беҙгә йоҡлап китеү өсөн 8 минутҡа ваҡыт күберәк кәрәк. Етмәһә, ҡыштың һуңғы айында кеше уртаса 10 минутҡа әҙерәк йоҡлай. 10 минут күп кеүек тойолмаһа ла, даими йоҡо туймау хәлһеҙлеккә килтерә, бигерәк тә ҡатын-ҡыҙҙар бынан йонсой. Профессор Колин Эспи әйтеүенсә, биологик сәғәттәр тыштан ингән яҡтылыҡ ярҙамында көйләнә. Ә ҡыш ваҡытында был сигналдар насар айырыла, шулай уҡ йорттарҙағы йылылыҡ, ҡоро һауа насар йоҡоға килтерә.

■ Һоло ярмаһы йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙарын булдырмай. Билдәле булыуынса, ҡан артерияһы стеналарының хроник ялҡынһыныуы йышыраҡ атеросклерозға килтерә. Һоло составындағы авенантрамидтар - фенол антиоксиданттары ҡан күҙәнәктәренә артерия стеналарына ултырырға ҡамасаулай. Етмәһә, авенантрамидтар ялҡынһыныуҙы ла баҫа. Шуға ла һоло ярмаһы йөрәкте ишемик сирҙән һаҡлай һәм холестерин кимәлен түбәнәйтә.

■ Американың билдәле диетологы Джаред Кох туҡланыу өсөн иң зарарлы ризыҡтар исемлеген төҙөгән. Уның иң өҫтөндә консерваланған помидорҙар тора. Шунда уҡ тимер банкаларҙағы башҡа ризыҡтар ҙа инә. Артабан төрлө өҫтәмәләр, антибиотиктар өҫтәлгән, етди эшкәртеү үткән ит һәм итле ризыҡтар тора. Өсөнсө урынды маргарин биләй. Диетологтар уны төрлө кислоталарға бай булғаны өсөн ҡулланырға кәңәш итмәй, тап ошо кислоталар ҡан тамырҙары эшенә кире йоғонто яһай. Зәйтүн һәм кокос майҙары ла был исемлеккә ингән, сөнки улар кеше организмында шешеү процестарына килтерә.

■ Тауыҡ ите, йомортҡа, ҡуҙаҡлылар, диңгеҙ балығынан торған диета баш мейеһе ҡартайыуын булдырмай һәм хәтерҙе нығыта. Быларҙың барыһын да холин - В витамины төркөмөнә ингән витамин башҡара. Британия ғалимдары асыҡлауынса, холинға бай ризыҡтар менән туҡланыусылар төрлө тестарҙы яҡшыраҡ үтә. Ғалимдар билдәләүенсә, ул инсульт менән бәйле хәүефте лә түбәнәйтә.

■ Оҙайлы ваҡыт бергә йәшәгәндән һуң да ирегеҙ һеҙҙең кәйефегеҙҙе һәм теләктәрегеҙҙе тойорға өйрәнмәһә, борсолмағыҙ, тип мөрәжәғәт итә гүзәл заттарға ғалимдар. Көслө затҡа тәбиғәттән бындай һәләт бирелмәгән. Хәҙер бының шулай икәнлеген фән дә дөрөҫләгән. Эдинбург университеты хеҙмәткәрҙәре шуға ла, улар барыһын да "күҙҙәрҙән һиҙер, ирендәрҙән уҡыр", тип көтмәҫкә, ә тураһын әйтергә кәңәш итә.

БӘЛӘЛЕ ХӘЛДӘР



# ТАҒЫ ЛА ЭТТӘР ХАҠЫНДА

**Район хакимиәттәре ҡарамағындағы Йәмәғәт хәүефһеҙлеге үҙәктәре хеҙмәткәрҙәре (ЦОБ) Башҡортостан Хөкүмәте тарафынан 2024 йылдың декабрендә раҫланған йорт хайуандарын, аныҡлап әйткәндә, фатирҙа йәшәүсе эттәрҙе аҫрау һәм йөрөтөргә алып сығыу буйынса яңы талаптарҙың үтәлеүен күҙәтергә һәм контролдә тоторға тейеш. Ошо хаҡта БР Дәүләт Йыйылышының аграр мәсьәләләр, экология һәм тәбиғәттән файҙаланыу комитеты рәйесе урынбаҫары Руфина Шаһапова һөйләне.**

- Хәҙер Йәмәғәт хәүефһеҙлеге үҙәктәре хеҙмәткәрҙәре кемдең ҡайҙа һәм морондоҡ кейҙерелгәнме-юҡмы, ниндәй бауҙа эт йөрөтөргә алып сығыусыларҙы күҙәтеүгә ала. Ялыуҙар менән килеүсе граждандарҙы тегендә-бында ебәреү өсөн инстанциялар күп ул, ләкин иң яҡыны хакимиәттәр булыр. Бөгөн бөтөн ялыуҙар участка полицияһына йәки муниципалитетҡа ағыла, ләкин иң тиҙ сара күреү урыны - Йәмәғәт хәүефһеҙлеге үҙәктәре.

Депутат һөйләүенсә, әгәр йорт хайуаны ысынлап та хәүеф сығанағы икән, ә уның хужаһы кешеләрҙе борсомаҫ өсөн бер ниндәй сара ла күрмәһә, был ялыуҙар яҙыу өсөн етди сәбәп булып тора. Бөтәһе лә бындай осраҡта хоҡуҡтары боҙолоусы кешеләргә бәйле. Улар был хаҡта участка полицияһына йәки хакимиәткә хәбәр итергә тейеш. Әлегә система яҡшы эшләй, тип әйтеп булмаһа ла, хәүефһеҙлек үҙәктәре сигналдарҙы ҡарай, саралар күрә.

- Быйыл хайуандарҙы мотлаҡ идентификациялау тураһында закон ҡабул ителәсәк. Юғиһә, төрлө хәлдәр була, - ти Руфина Шаһапова, - кемделер эт тешләй икән, эт хужаһы, был минең эт түгел, тип ғәйебен танымаҫҡа мөмкин. Бындай осраҡта нисек эт тешләгәнде иҫбатларға һәм кемгә ҡарата сара күрергә? Былар бөтәһе лә ҙур һәм системалы эш, беҙ уның менән даими шөғөлләнәбеҙ. Бөтөн закондар һәм ҡарарҙар ҙа - ҙур эштәрҙең нигеҙе. Һәм тағы. Законда ҡаралыуынса, фатирҙа йәки шәхси йортта тотолоусы хайуандар һанына сикләү индерелә. Фатирҙа, мәҫәлән, һәр бер йорт хайуанына - 18, дача йәки баҡса территорияһында 200 кв метр майҙан тейеш. Эттәрҙе йөрөтөргә алып сыҡҡанда уларҙы бәйһеҙ-морондоҡһоҙ килеш иркенгә ебәреү тыйыла. Эттәрҙе алып йөрөткәндә уларҙы етәкләү бауы бер метрҙан да оҙон булырға тейеш түгел. Һуҡырҙарҙы алып йөрөтөүсе эттәргә был ҡағылмай. Әгәр кемделер эте тешләһә, хужаһы уны 12 сәғәт эсендә ветеринарға алып барырға тейеш. Республика биләмәһендә эттәрҙең үҙ алдына иркендә йөрөүе тыйыла. Эйәһеҙ эттәрҙе аулайҙар һәм махсус приюттарға урынлаштыралар. Автобус йәки башҡа төр йәмәғәт транспортында эттәргә морондоҡ кейҙереп, ҡыҫҡа бәйҙә тотоу закон менән нығытылған.

# ЭЙӘЛӘРЕНӘ - ЯУАПЛЫЛЫҠ

**Башҡортостанда эттәргә мотлаҡ чиптар ҡуйыу эше ҡарала. 2027 йыл аҙағына тиклемге күсмә осорҙа хужалары эттәренә бушлай, ҡаҙна иҫәбенә чип ҡуйҙыра ала. Был маҡсатта 80 млн һум самаһы аҡса бүленәсәк.**

Чипҡа хайуандаң шәхси номеры һуғыласаҡ. Уны сканер ярҙамында уҡып, белгестәр эт һәм уның хужаһы хаҡ-

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# ДҮРТ КӘҢӘШ



Ҡасандыр бер ваҡыт гонаһлы кеше йәшәгән. Ул үҙенә нисек кенә гонаһ эшләмәҫкә һүҙ бирһә лә, яман ғәҙәттәре уны һис ташлап китмәгән. Һәм бына ул юғары белемле һәм Исламға ҡәтғи эйәреүсе берәй кешене табып, уның менән кәңәшләшергә ҡарар итә. Уға Ибраһим бин Әтһәмгә барырға кәңәш биргәндәр. Гонаһлы кеше Ибраһим бин Әтһәмгә килеп, былай тип үтенгән:

- Мин үҙемдең насар ғәҙәттәремдән бер нисек тә арына алмайым. Миңә башҡаса гонаһ эшләмәҫкә кәңәш бирсе.

- Мин һиңә дүрт кәңәш бирәм. Әгәр ҙә һәр ваҡыт уларҙы иҫеңдә тотһаң, ул сағында Аллаһ Тәғәлә һиңә насар ҡылыҡтан ҡотолорға ярҙам итер, - тип яуаплаған Ибраһим бин Әтһәм.

Был кеше бик шатланған һәм иғтибар менән тыңлай башлаған:

- Һиңә ***беренсе кәңәшемде*** бирәм, - тип башлаған Ибраһим бин Әтһәм. - Һин ҡайҙа ғына булһаң да, нимә генә эшләһәң дә, Аллаһ Тәғәлә һине күреп тора.

- Минең ***икенсе кәңәшем:*** әгәр һин ниндәйҙер гонаһ эшләйһең икән, һин Аллаһ биргән аҙыҡты ашама, - тип дауам иткән ул.

Һәр бер кәңәштән һуң Ибраһим бин Әтһәм бер ни тиклем ваҡыт кәңәштәрҙең гонаһлының йөрәгенә барып етеүен көтөп торған.

- Ә өсөнсө кәңәш ниндәй? - тип һораған кеше.

Ибраһим бин Әтһәм тыныс тауыш менән әйткән:

- Минең ***өсөнсө кәңәшем*** шул: һинең тағы ла гонаһ эшләгең килһә, иҫеңә төшөр, бөтә донъя һәм унда булған бөтә нәмә Аллаһ Тәғәләнеке. Әгәр ҙә инде һин яңынан гонаһ эшләһәң, ул сағында һис нисек тә Аллаһ биләмәләрендә ҡалма, шунда уҡ үҙеңә икенсе урын эҙлә.

Гонаһлы кеше ишеткән кәңәштәрҙән тотлоға башлай:

- Нисек инде, ҡайҙан башҡа урынға китәйем, бит бөтәһе лә Аллаһтыҡы.

Ибраһим бин Әтһәм уның күҙенә тура ҡарап, ҡысҡырып ебәргән:

- Был бит рәхмәтле була белмәү! Мәрхәмәтһеҙлек! Һин уның биләмәләрендә йәшәйһең, һәм һин үк Уға ҡаршы барырға теләйһең.

Әйтелгән һүҙҙәр гонаһлы кешене ныҡ тулҡынландырған, һәм ул ***дүртенсе кәңәште*** һораған.

- Үлем сәғәте еткәс, Ғазраил фәрештә һинең йәнеңде алырға киләсәк, һин шул ваҡытта уға әйт: "Эй, Ғазраил! Һин ваҡытһыҙ килдең, һин гонаһтарыма тәүбә итеп бөткәс кил. Әлегә миңә Аллаһҡа ғибәҙәт ҡылырға һәм Уның ғәфү итеүен һорарға кәрәк", - тип яуап биргән Ибраһим бин Әтһәм.

- Улай булмай инде! Мин нисек Ғазраилдан быны һорай алам? Ул миңә килгәндән һуң, мин инде бер ни ҙә эшләй алмаясаҡмын.

Ибраһим бин Әтһәм үҙенең нәсихәтен тамамлап, былай тигән:

- Эй, кеше! Беләһең бит, Аллаһ Тәғәлә һине күрә. Ул биргән нәмә менән туҡланаһың. Уның биләмәләрендә йәшәйһең. Үлем фәрештәһе килгәндә унан көтөп тороуҙы һорай алмаясаҡһың. Шуға ла әле Ғазраил (ғәләйһи-ссәләм) килмәҫ борон тәүбә ит. Ҡолға нимә ҡушылған, шуны эшлә. Аллаһ Тәғәләгә яҡынайырға, яҡшы әҙәпле һәм ғибәҙәт ҡылыусыларҙан булырға тырыш.

Ишеткән дүрт кәңәш гонаһ ҡылыусыны тулҡынландырған һәм ул ҡысҡырып илаған. Үҙенең гонаһтарына тәүбә иткән һәм шул көндән башлап гонаһ эшләүҙән туҡтаған. Бөтә йәне һәм йыйылған мөлкәте менән Ислам хаҡына хеҙмәт итә башлаған. Ул үҙенең элекке шулай уҡ гонаһлы таныштары менән аралашыуҙы туҡтатҡан, Ибраһим бин Әтһәмдең уҡыусыһы булып киткән һәм үҙенең белемен камиллаштырған. Элекке гонаһлы булған мөхитте алыштырып, тиҙҙән изге эштәр башҡара башлаған.

**Мөршиҙә УЙСАЛ.**
**"Хаҡ динемдә беренсе аҙымдарым" китабынан.**

ында тейешле мәғлүмәттәргә эйә буласаҡ. Башҡа төр йорт хайуандарын идентификациялау һәм теркәү уларҙың хужалары теләге буйынса үҙ иҫәптәренә башҡарыла. Ошо хаҡта закон республика Дәүләт Йыйылышында ҡарала.

Парламент рәйесе Константин Толкачев әйтеүенсә, был сара йорт хайуандарына ҡарата уларҙың хужаларының яуаплылығын күтәрәсәк һәм йәмғиәттә хайуандар менән кешелекле мөғәмәләлә булыуҙы талап итәсәк.

- "Башҡортостан Республикаһында хайуандарға ҡарата яуаплы мөғәмәлә тураһында"ғы закон проектының төп маҡсаты - эйәһеҙ хайуандар һанын кәметеү - ти Константин Толкачев. - Йорт хайуандарын теркәүҙә тәртип булдырмай тороп, хужаһыҙ эттәр проблемаһын хәл итеп булмаясаҡ. Эксперттар раҫлауынса, хужаһыҙ эттәрҙең 90 проценттан ашыуы - кемдәрҙәндер элекке эттәре йә булмаһа шуларҙың тоҡомдары. Урамға улар ике төрлө юл менән килеп эләгә: йә юғалалар, йә хужалары улардан баш тарта. Чиптар ярҙамында эт хужаларының яуаплылығына өлгәшергә була. Ул саҡ инде эттәрҙе урамға сығарып ебәрә алмаясаҡтар, ә юғалған хайуанды хужаһына ҡайтарырға мөмкин. Идентификациялау системаһы эттәре кешегә ташланған хәлдә хайуандың хужаларын асыҡларға ярҙам итәсәк.

**Ләйсән ЗАКИРОВА.**

# АЙЫУ КҮРҺӘҢ - ҠАСМА!

**Ҡырағай хайуан менән осрашыу ҡағиҙәләрен белмәү фажиғәгә әйләнергә мөмкин.**

Хайуандарҙың һөжүменә кеше күпселек осраҡта үҙе ғәйепле. Былтыр социаль селтәрҙәрҙә Учалы районының Күсәк ауылынан алыҫ түгел урманда бер егеттең йүгереп йөрөгәндә осраҡлы рәүештә балаларын эйәрткән айыуҙы осратыуы тураһында мәғлүмәт таралды. Егет бындай осрашыуға әҙер булмай, әммә йыртҡыстарҙы ҡурҡытыу өсөн көслө итеп ҡысҡыра башлай. Һуңыраҡ Баҡалы районында бер ҡатындың ҡырағай йәнлектән ҡурҡып, ҡотҡарыусыларҙы агас башында көтөүе тураһында хәбәр булғайны. Был осраҡтарҙа бер кем дә зыян күрмәне күреүгә. Ә шулай ҙа...

● БР Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығының матбуғат хеҙмәтендә кешеләрҙең ҡырағай хайуандар менән осрашыу осраҡтары йышайыуы менән бәйле, йыртҡыс янында үҙ-үҙеңде тотоу ҡағиҙәләрен иҫкә төшөрөргә ҡарар иттеләр. Ведомство мәғлүмәттәре буйынса, ғәҙәти хәлдә хайуандар кешегә һөжүм итмәй, шуға күрә улар кешене алдан асыҡлай алһын өсөн тауыш биреп, үҙеңдең барлығыңды белдерергә кәрәк.

● Йыртҡыстар йөрөү ихтималлығы булған урындарҙан, йәғни ҡуйы ҡыуаҡлыҡтарҙан, урмандан йырағыраҡ йөрөгөҙ. Айыуҙы, бигерәк тә айыу балаһын күрһәгеҙ, ашатыу, яратыу йәки фотоға төшөрөү өсөн уға яҡын бармағыҙ. Уларҙың кешегә ҡарата мөнәсәбәте теләһә ҡайһы ваҡытта агрессияға алмашыныуы ихтимал. Айыу менән күҙмә-күҙ осрашҡан хәлдә унан ҡасырға ярамай, сөнки был уның әҙәрлекләү инстинктын уятасаҡ. Айыуға арҡа менән боролмайынса ғына был хәүефле урындан китергә тырышығыҙ.

● Сүплектәр, аҙыҡ ҡалдыҡтары, келәттәр, үлгән хайуандар, иген культуралары (һоло) менән баҫыуҙар айыуҙы йәлеп итә һәм улар үҙенеке тип һанаған аҙыҡ ресурстарын һаҡларға теләй. Бындай урындарҙан алыҫ торорға кәрәк.

Тораҡ пункттарҙа һәм улар янында сүплектәрҙе һәм аҙыҡ ҡалдыҡтарын бөтөрөргә, шулай уҡ йорт хайуандарын асыҡ урында ҡалдырмаҫҡа, төндә ябырға, йөрөгән ерҙәрен кәртәләргә кәрәк.

● **Йыртҡыстарҙың ауылдарға килеүен күрһәгеҙ, БР Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығының оператив дежур телефоны +7 (347) 218-04-30, шулай уҡ 112 телефоны буйынса тура полиция линияһына хәбәр итегеҙ, тип кәңәш бирҙеләр ведомствола.**

СӘЛӘМӘТ БУЛ!

# КҮПМЕ ҺЫУ ЭСЕРГӘ?

**Ғәҙәттә, һыуһыҙ 3-4 көндән артыҡ йәшәп булмай, тиҙәр. Ә бына организмға күпме һыу кәрәклеге хаҡында ғалимдар күптән бәхәсләшә. Иң күп таралған кәңәш буйынса, кеше көнөнә 1,5 литр һыу эсергә тейеш, ләкин ни өсөн тап шул саҡлы һыу эсергә - был хаҡта бер ниндәй ҙә фәнни тикшеренеүҙәр һығымтаһы юҡ. Ә бына төрлө тормош хәлдәренә бәйле күпме һыу эсеү кәрәклеге тураһында ғалимдар, төрлө ғилми хеҙмәттәрҙә тикшереп, анализ яһаны. Уларҙың күҙәтеүҙәре JAMA Network Open медицина журналында баҫылып сыҡты.**



Күп һыу эсеүҙең ниндәй яҡшы яҡтары бар һәм был кемдәр өсөн кәрәк? Иң тәүҙә, ябығырға маҡсат ҡуйғандар өсөн. 4 тикшеренеү эшендә 209 кеше ҡатнашҡан һәм улар көн һайын ашарҙан алда ярты-шар литр (иртәнге, төшкө һәм киске аш алдынан - бөтәһе 1,5 литр) һыу эсеп, был исулды ҡулланмаусыларға ҡарағанда 44-100 процентҡа күберәк тән ауырлығын юғалтҡан. Йә иһә һыу эскән кешеләр ике тапҡырға тиҙерәк ябыға.

Һыу эсеүҙең файҙаһын күреүсе икенсе категория - бөйөрөндә таш булған кешеләр. 269 кеше ҡатнашҡан ике тикшеренеү эше биш йыл буйы дауам иткән. Табиб ҡушыуы буйынса улар кесе ярау күләме 2 литрға тулғансы таҙа һыу эсергә тейеш булған. Бындай режимды тотҡан пациенттарҙа таш барлыҡҡа килеү ике тапҡырға һирәк осраған. Кесе ярау күләме күберәк булған һайын, таш барлыҡҡа килтереүсе матдәләр тупланыуы кәмерәк була һәм таш һирәгерәк осрай.

Ошоға тиклем тағы ла ғалимдар таҙа һыуҙы күберәк эсеү баш ауыртыуы сирен (мигрень), кесе ярау юлдары инфекцияһын кәметә, шәкәр сирен һәм түбән ҡан баҫымын контролдә тоторға булышлыҡ итә, тигән фекергә булды. Мәсәлән, ҡайһы бер тикшеренеүҙәрҙән күренеүенсә, ҡабатланып тороусы баш ауыртыуынан яфаланған осраҡта күп һыу ҡулланған өлкән йәштәгеләр өс айҙан һуң үҙҙәрен яҡшыраҡ тоя башлаған. Ҡанында глюкоза кимәле юғары булған кешеләр өҫтәмә рәүештә 4 стакан һыу эсеүҙең диабет мәсьәләһендә ярҙамын күргән, ә инде өҫтәмә рәүештә 6 стакан һыу эскән ҡатын-ҡыҙҙар кесе ярау юлдары инфекцияһынан арынған. Был тикшеренеүҙәрҙә шулай уҡ һыу эсеү ҡан баҫымы түбән булған йәш кешеләргә лә шифа бирә, тигән фекерҙәр килтерелә.

Был күҙәтеүҙәрҙе ҡайтанан тикшереү күпләп һыу эсеүҙең ике осраҡта ғына һөҙөмтәле булыуын раҫлаған: беренсеһе - кесе ярау юлдары инфекцияһы менән яфаланыусылар йыл буйына көн һайын 3 литр һыу эсеп, сирҙең киҫкенләшеүен ике тапҡырға кәметә алған. Был һыу менән улар инфекция тупланышының кәмеүенә килтергән һәм бактерияларҙың йыуылып төшөүен тиҙләткән. 2-се типтағы шәкәр диабеты менән сирләүселәргә иһә көнөнә һыу эсеү нормаһын бер литрға арттырыу шулай уҡ ҡандағы глюкоза кимәлен кәметергә ярҙам иткән. Үкенескә күрә, ҡалған осраҡтарҙа, йәғни баш ауырыу сире, түбән ҡан баҫымы осраҡтарында күпләп һыу эсеүҙең файҙаһы раҫланмаған. Күпселек табиптар фекеренсә, бер юлы күпләп һыу эсеүҙең бөйөрҙәргә ауырлыҡ килтереүе һәм уларҙың эшмәкәрлеген боҙоуы ихтимал. Күп һыу эсеүҙән ҡандағы натрий кимәле төшөп, был шешенеүгә килтереүе бар. Һыуҙы, ғәҙәттә, тән ауырлығына ҡарап, көнөнә 1,5-2 литр эсергә ҡушыла. Һыуҙы ултырып килеш, яй ғына йотомлап, ашарҙан алда эсергә кәрәк. Шул саҡта ул аш һеңдереү, бөйөрҙәр эшмәкәрлеген көйләй. Ниндәй осраҡта ла һыу эсеү мәсьәләһе буйынса табиб менән кәңәшләшеү мотлаҡ икәнен онотмағыҙ.

УҢЫШ ҠАҘАН



# ИЗГЕЛЕК ҺӘМ ГҮЗӘЛЛЕК ТУРАҺЫНДА ХАТТАР

## Утыҙ дүртенсе хат "Урыҫ тәбиғәте тураһында"

Хайуандарҙың ғына билдәле бер тәртибе (был хаҡта бөтә эт, бесәй хужалары белә, хатта тәбиғәттән ситтә, ҡала йәшәгәндәр ҙә) булмай, үсемлектәрҙеке лә бар. Ағастар ҙа ҡояшҡа һәр береһе үҙенсә үрелә - ҡайсаҡ башҡаларға үсергә ҡамасауламаҫ өсөн тик баштары менән генә, ҡайсаҡ яңы ғына үсеп һығылып килгән башҡа төр ағастарҙы һаҡлау өсөн ботаҡтарын йәйеп үҫә. Ерек ышығында ҡарағай үҫә. Ҡарағай үҫеп еткәс, үҙ бурысын үтәгән ерек ҡорой. Мин был оҙаҡ йыллыҡ процесты Ленинград эргәһендәге Токсовта күҙәттем: унда Беренсе донъя һуғышы осоронда бөтә ҡарағай урманы ҡырҡылып бөткән һәм улар урынына ерек шырлыҡтары барлыҡҡа килгән, аҙаҡ ул үҙенең ботаҡтары аҫтында йәш кенә ҡарағайҙарҙы һыйҙырған. Хәҙер ул урында яңынан ҡарағайҙар үҫә.

Тәбиғәт үҙенсә "социаль". Уның "социаллеге" шунда ла сағыла: тәбиғәт кеше менән бергә, күршеләш йәшәй ала, әлбиттә, уныһы үҙе социаль һәм интеллектуаль булһа, тәбиғәтте ҡурсалаһа, терелә алмаҫлыҡ зыян килтермәһә, урманын бөтөргәнсе ҡырҡмаһа, йылғаларын бысратмаһа...

Урыҫ крәҫтиәне үҙенең күп йыллыҡ хеҙмәте менән урыҫ тәбиғәтенең матурлығын тыуҙырған. Ул ерҙе һөргән һәм шул рәүешле билдәле бер сиктәр булдырған. Ул һөрөнтө ер буйлап һабан менән үткәндә үлсәмдәр һала. Урыҫ тәбиғәтендә сиктәр кеше һәм атының хеҙмәтенә, уның атын егеп, һуҡа йәки һабан артынан күпме үтә алыуына торошло. Ерҙе тигеҙләп, кеше ундағы барлыҡ ҡырҡа сиктәрҙе, түмһәләрҙе, таштарҙы алып ташлай. Урыҫ тәбиғәте йомшаҡ, уны крәҫтиән үҙенсә тәрбиәләгән. Крәҫтиәндең һабан, һуҡа, тырма артынан йөрөүе арыш һыҙаттары ғына булдырып ҡалмаған, ә урман сиктәрен тигеҙләгән, урман ауыҙын формалаштырған, урмандан баҫыуға, баҫыуҙан йылғаға күсешен булдырған.

Урыҫ тәбиғәте, нигеҙҙә, ике бөйөк мәҙәниәт тырышлығы менән бар булған: тәбиғәттең ҡырҡыулығын йомшартҡан кеше мәҙәниәте һәм тәбиғәт мәҙәниәте ярҙамында, һуңғыһы үҙ сиратында кеше ирекһеҙҙән боҙған тигеҙлекте тергеҙгән. Ике мәҙәниәт тә бер-береһен тәҙәткән һәм уның кешелелеген, иркенлеген барлыҡҡа килтергән.

Көнсығыш Европа тигеҙлегенең тәбиғәте йыуаш, бейек тауҙарһыҙ, әммә көсһөҙ ялпаҡ та түгел, бәйләнеш юлдары булырға әҙер йылғалар селтәре, урмандар менән ҡапланмаған күк йөҙө, иңкеү убалары һәм бөтә ҡалҡыулыҡтарҙы талғын ғына уратып алған юлдары бар.

Кеше ҡалҡыуҙарҙы, түбәгә үрләгән һәм төшкән урындарҙы нисек еткеләп тигеҙләгән! Бында һабансының оҫталығы параллель һыҙаттар матурлығын тыуҙырған - был һыҙаттар бер-береһе һәм тәбиғәт менән шундай аһәңле, гүйә боронғо урыҫ йырҙарындағы тауыштар кеүек. Һабансы бураҙнаны бураҙнаға тура килтереп һала - тараған, сәсте сәскә тәҫләп һалған кеүек. Шулай өйҙән бүрәнәһенә бүрәнә, ярҡаға ярҡа, ҡоймалар - талсыбыҡ тал сыбыҡҡа һалына, ә өйҙәр үҙҙәре йә йылға буйында, йә юл ситенә рәткә теҙелеп китә, гүйә, һыуға төшкән көтөү кеүек.

Шуға ла тәбиғәт һәм кеше мөнәсәбәте - һәр ваҡыт ике мәҙәниәт мөнәсәбәте, уларҙың һәр ҡайһыһы үҙенсә "социаль", аралашыусан, үҙ тәртибе бар. Һәм улар үҙенсәлекле әхлаҡи нигеҙҙәрҙән сығып осраша. Ике мәҙәниәт тә - тарихи үҫеш емеше, шул уҡ ваҡытта, кешелек мәҙәниәтенең үҫеше боронған тәбиғәт йоғонтоһонда бара (кешелек барлыҡҡа килгәндән алып), ә тәбиғәттең үҫеше, уның миллиондарса йыл тереклек итеү дәүерендә, кеше йоғонтоһонда сағыштырмаса яңыраҡ һәм был тотош та түгел әле. Береһе (тәбиғәт мәҙәниәте) икенсеһе булмаһа ла йәшәй ала, ә икенсеһе (кешелек) йәшәй алмай. Шулай ҙа бер нисә быуат дауамында элек тәбиғәт һәм кеше араһында тигеҙлек һаҡланған. Был ике өлөштө лә тигеҙ тоторға, урталыҡтан үтергә тейеш кеүек тә бит. Әммә юҡ, һәр урында үҙенең тигеҙлеге, үҙенең нигеҙе, үҙәге бар. Рәсәйҙең төньяғында "тәбиғәт" күберәк булһа, көньяҡҡа табан һәм далаға яҡынайған һайын "кеше" күберәк.

**Дмитрий ЛИХАЧЕВ.**



### 7 АПРЕЛЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45 "АнтиФейк". [16+]
11.10, 0.10, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
12.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
12.20 Премьера. "Время героев". [16+]
13.25, 14.15, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера года. "Любовь Советского Союза". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.05, 3.30 Т/с "Зацепка". [12+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Дама с собачкой. Новые серии". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.22 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00 Т/с "Бирешмә!" [12+]**
**11.00 Новости недели (на рус. яз.). [12+]**
**11.45, 16.45, 21.15 Интервью. [12+]**
**12.00 Специальный репортаж. [12+]**
**12.15 Квадратные метры. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 1.00 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 0.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Башкорттар. [12+]**
**16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.45, 20.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**18.00 Защитники Отечества. [12+]**
**19.00, 4.00 Телецентр. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30 Д/ф "Святое братство". [12+]**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Ҡустәнәс. [12+]**
**23.30 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**1.30 Спектакль "Жанна, завтра будет новый день". [12+]**
**3.45 Письма солдатам. [12+]**
**5.00 Простые истории: жить, работать, любить. [12+]**

### 8 АПРЕЛЯ ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40 "АнтиФейк". [16+]
11.10, 12.25, 14.15, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
12.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера года. "Любовь Советского Союза". [16+]
0.10 Д/ф "Я доверяю своему безумию". К 100-летию со дня рождения Эрнста Неизвестного". [16+]
1.10, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.05, 3.30 Т/с "Зацепка". [12+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Дама с собачкой. Новые серии". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00 Т/с "Бирешмә!" [12+]**
**11.00 Простые истории: жить, работать, любить. [12+]**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Тайм-аут. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 1.00 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 0.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Городок АЮЯ. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Автограф. [12+]**
**17.00, 22.00, 5.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**19.00, 4.00 Телецентр. [12+]**
**19.45 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.00 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**20.15 Д/ф "У слияния трёх рек". [12+]**
**23.00 Бишбармаҡ. [12+]**
**1.30 Спектакль "Счастье с неба". [12+]**
**3.30 Башкорттар. [12+]**

### 9 АПРЕЛЯ СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40 "АнтиФейк". [16+]
11.10, 12.25, 14.15, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
12.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера года. "Любовь Советского Союза". [16+]
0.10 Премьера. "Шоу Вована и Лексуса". [16+]
1.10, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.05, 3.30 Т/с "Зацепка". [12+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Дама с собачкой. Новые серии". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.22 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00 Т/с "Бирешмә!" [12+]**
**11.00 Дорога к храму. [6+]**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Дознание. [16+]**
**12.15 Криминальный спектр. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 1.15 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 0.15 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Физ-ра. [6+]**
**15.30 Зерно. [6+]**
**16.00, 3.30 Автограф. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.45, 0.00 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**18.00 Тормош. [12+]**
**19.00, 4.00 Телецентр. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 Защитники Отечества. [12+]**
**21.00 Спроси у Дубовского.**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 Байыҡ. [12+]**
**1.45 Спектакль "Любишь - не любишь?" [12+]**
**5.00 Тайм-аут. [12+]**

### 10 АПРЕЛЯ ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40 "АнтиФейк". [16+]
11.10, 12.25, 14.15, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
12.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера года. "Любовь Советского Союза". [16+]
0.10, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.05, 3.30 Т/с "Зацепка". [12+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Дама с собачкой. Новые серии". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.22 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00 Т/с "Бирешмә!" [12+]**
**11.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**11.30, 16.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00, 17.30 Новости СВО (на рус. яз.). [12+]**
**12.15, 0.00 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 1.15 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 0.15 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Сулпылар. [6+]**
**15.45 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Патриот РФ. [12+]**
**16.15 Дознание. [16+]**
**17.00 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00 Йома. [6+]**
**19.00, 4.00 Телецентр. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Мегасело. [12+]**
**21.00 Простые истории: жить, работать, любить. [12+]**
**22.00, 5.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**1.45 Спектакль "В ночь лунного затмения". [12+]**

### 11 АПРЕЛЯ ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40 "АнтиФейк". [16+]
11.10, 12.20, 14.15, 16.55 Информационный канал. [16+]
12.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
15.10 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 "Голос". Новый сезон. [12+]
23.30 "30 лет вместе". "Песни о главном". [12+]
1.00 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30 Т/с "Зацепка". [12+]
17.00 Прямой эфир. [16+]
21.30 Ну-ка, все вместе! Хором! [12+]
0.00 День космонавтики. Торжественный концерт на космодроме Байконур.
2.20 Х/ф "Улыбнись, когда плачут звёзды". [16+]
4.04 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00 Т/с "Бирешмә!" [12+]**
**11.00 Йома. [6+]**
**11.30, 16.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45, 16.45, 21.15 Интервью. [12+]**
**12.00, 17.30 Новости СВО (на баш. яз.). [12+]**
**12.15 Криминальный спектр. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 1.30 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 0.30 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Тирмәкәй. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Аль-Фатиха. [6+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.45, 20.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**18.00 Башкорттар. [6+]**
**19.00 Честно говоря. [12+]**
**19.45 Мама. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30 Башкорт йыры. [12+]**
**22.00 СВОих не бросаем. [12+]**
**22.15 Письма солдатам. [12+]**
**23.00 Ете егет. [12+]**
**0.00 Ҡурай-шоу. [12+]**
**2.00 Спектакль "Сваха". [12+]**
**4.00 Аль-Фатиха. [12+]**
**4.30 Защитники Отечества. [12+]**
**5.00 Хазина. [12+]**

### 12 АПРЕЛЯ СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 "Умницы и умники". [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Д/с Премьера. "MONEYпуляторы". [16+]
10.50 Поехали! [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Д/ф "Вызов. Первые в космосе". [12+]
16.55 "Кто хочет стать миллионером?" [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 Премьера. Лучшие фигуристы мира в юбилейном вечере Игоря Крутого. [12+]
21.00 "Время".
21.35 Х/ф "Вызов". [12+]
0.35 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 "Формула еды". [12+]
9.25 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Наши. Военкоры". [12+]
12.00 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
13.05 Д/ф "Салют-7. История одного подвига". [16+]
14.30, 20.50 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.50 Х/ф "Салют-7". [12+]
17.50 "Привет, Андрей!" [12+]
21.00 Х/ф "Училка". [16+]
0.40 Х/ф "По щучьему велению". [12+]
4.09 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Доброе утро! [12+]**
**7.30, 18.30 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**7.45 Мегасело. [12+]**
**8.30 Аль-Фатиха. [6+]**
**9.00 Весело живём! [12+]**
**9.15 Ҡурай даны. [12+]**
**9.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**9.45 СВОих не бросаем. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Книга сказок. [6+]**
**10.45 Әкиәтсе. [6+]**
**11.00 Гора новостей. [6+]**
**11.15 Преград. Net. [6+]**
**11.30 Лит-ра. [12+]**
**12.00 Елкән. [6+]**
**12.30 Ете егет. [12+]**
**13.30 Башкорттар. [12+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Все песни о прекрасном... [12+]**
**18.00 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**19.00 Из жизни доктора. [12+]**
**19.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 Байыҡ. [12+]**
**22.00, 6.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.30, 2.15 Новости недели (баш. яз.). [12+]**
**23.15, 5.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**23.45 "Башкорт йыры" представляет... [12+]**
**0.30 Концерт Назифы Кадыровой. [12+]**
**3.00 Спектакль "Радость нашего дома". [12+]**
**4.30 Ҡурай-шоу. [12+]**
**5.30 Простые истории: жить, работать, любить. [12+]**

### 13 АПРЕЛЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10 Играй, гармонь любимая! [12+]
6.55 "Часовой". [12+]
7.25 "Здоровье". [16+]
8.30 "Золотая коллекция Союзмультфильма". [0+]
9.30 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
10.15 Д/ф Премьера. "Она". К юбилею Татьяны Навки". [12+]
11.05 "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Д/ф "Я доверяю своему безумию". К 100-летию со дня рождения Эрнста Неизвестного". [16+]
13.20 "Видели видео?" [0+]
14.10 Х/ф "Возвращение резидента". [12+]
16.50 Премьера. "30 лет вместе". "Время, вперед!". [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.00 "Три аккорда". Новый сезон. [16+]
21.00 "Время".
22.50 "Что? Где? Когда?" Весенняя серия. [16+]
0.00 Д/ф "Она". К юбилею Татьяны Навки". [12+]
1.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.30, 2.20 Х/ф "Ты мой свет". [12+]
7.20 "В кругу друзей".
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00 Вести.
11.30 "Наши. Военкоры". [12+]
12.00 "Доктор Мясников". [12+]
13.00 Большие перемены.
14.30 Местное время. Вести-Башкортостан.
15.00 "Юмор! Юмор! Юмор!!!" [16+]
17.50 "Песни от всей души". [12+]
20.00 Вести недели.
22.30 Москва. Кремль. Путин.
23.00 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.35 Д/ф "Салют-7. История одного подвига". [16+]
4.01 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Доброе утро! [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**7.45 Тормош. [12+]**
**8.15, 18.45 Легенды Урала. [12+]**
**8.30 Ҡустәнәс. [12+]**
**9.00 Весело живём! [12+]**
**9.15 Мама. [12+]**
**9.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**9.45, 21.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Тирмәкәй. [6+]**
**10.45 Городок АЮЯ. [6+]**
**11.00 Гора новостей. [6+]**
**11.15 Сулпылар. [6+]**
**11.30 Асыш. [6+]**
**11.45 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**12.00 Розыгрыш от ТЦ "Радуга".**
**12.30 Новости недели (баш. яз.). [12+]**
**13.15, 4.45 Башкирские каникулы. [12+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**15.00 Дорога к храму. [6+]**
**15.30 Честно говоря. [12+]**
**16.15 Спектакль "Керчь". [12+]**
**17.45 Из жизни доктора. [12+]**
**18.00 Мегасело. [12+]**
**19.15 Әлләсе... [12+]**
**20.00 Патриот РФ. [12+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 Автограф. [12+]**
**21.00 Дознание. [16+]**
**21.30, 6.00 Новости недели (на рус. яз.). [12+]**
**22.15, 5.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.45 Концерт Айгуль Асадуллиной. [12+]**
**0.30 Спектакль "Касатка". [12+]**
**2.30 Колесо времени. [12+]**
**3.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**4.15 Моя планета - Башкортостан. [12+]**

## НАМАҪ ВАҠЫТТАРЫ

*1446 һижри йыл.*

| Апрель (Шәүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 7 (9) дүшәмбе | 4:36 | 6:33 | 13:30 | 17:53 | 20:05 | 22:03 |
| 8 (10) шишәмбе | 4:32 | 6:31 | 13:30 | 17:54 | 20:06 | 22:05 |
| 9 (11) шаршамбы | 4:29 | 6:28 | 13:30 | 17:56 | 20:08 | 22:08 |
| 10 (12) кесе йома | 4:25 | 6:26 | 13:30 | 17:57 | 20:10 | 22:11 |
| 11 (13) йома | 4:22 | 6:23 | 13:30 | 17:58 | 20:12 | 22:14 |
| 12 (14) шәмбе | 4:18 | 6:21 | 13:30 | 18:00 | 20:14 | 22:18 |
| 13 (15) йәкшәмбе | 4:14 | 6:18 | 13:30 | 18:01 | 20:16 | 22:21 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

***✓ Яҙын ағастарҙың ҡарт һәм ауырыу ботағын ҡырҡһаң, емештәре ҙурыраҡ була, уңыш 30-70 процентҡа арта, ағастың һыуыҡҡа сыҙамлығы ла күтәрелә. Бынан тыш, уларҙы ауырыуҙарҙан һәм ҡоротҡостарҙан эшкәртеү еңелерәк.***



## БАШ ЭШЛӘТМӘК



1. Сағатар торған бөжәк. 2. Йүнһеҙҙең дә йүнһеҙе, һине үсеклә үҙе. 3. Күпереп торған ап-аҡ икмәк. 4. Мәсеттә аҙан әйтеүсе. 5. Ирҙе "үлтермәҫ" дарыу үләне. 6. Парктағы ултырғыс. 7. Бөрҡөттөң иң көслө балаһы. 8. Мосолман мәктәбе. 9. Уҡыу кәрәк-ярағы. 10. Ҡолаҡбаулы екке әйбере. 11. Емеш-йәшелсә ултыртылған ер. 12. Марат Ҡолшәрипов фәне. 13. Майк Тайсон дине. 14. Монарх. 15. Мосолман иренең баш урамаһы. 16. Бал ҡорттарының кәрәҙгә тултырып, өҫтөнә бал һалып әҙерләгән аҙығы. 17. Йәш түккәндә нимә һығалар? 19. Мәрйәләрҙең йәйге күлдәге. 20. Тораҡтың бер мәсеткә ҡараған өлөшө. 21. Йылғаның ҡойған урыны. 22. Бәләкәй итеп йомарланған ҡамыр. 23. Мутлыҡҡа ҡоролған аҫтыртын эш. 24. Кем өсөндөр күмәкләп башҡарылған эш. 25. Кешенең был ағзаһы ғына ҙурлығын үҙгәртмәй. 26. Итле ашҡа һалыр өсөн ҡырҡылған сөсө ҡамыр. 27. Кешегә яҡшы теләктәр менән бушлай бирелә торған нәмә. 28. Бөрйәндәрҙең умартаһы. 29. Паралич (башҡортсаһы). 30. Бесән йыйыу ҡоралы. 31. Атмосфералағы быу. 32. Тормош кәрәге өсөн йортта аҫралған хайуан. 33. Аҡылы (...) икән. 34. Беҙҙең яҡтың тубырсыҡлы лианаһы. 35. Ҡабул милләте. 36. Китте баш, ҡалды (...) һерәйеп. 37. Промышленность (башҡортсаһы). 38. "Ҡаҙандың (...)о, кешенең ҡылығы йоға". 39. Цитрус. 40. Баҡма кем ул? 41. Ваҡ йорт малы йәки аңра кеше. 42. Траур. 43. Календарҙағы ҡыҙыл көн. 44. Батшалар, пионерҙар йорто. 45. Асыҡ ҡояш яҡтыһы. 46. Дингеҙгә "әйләнгән" скульптор ташы. 47. Бик һаран, һыҡмыр кеше. 48. Ил, донъя гиҙеп йөрөү.

**11-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Ҡалаҡ. Ир. Өмә. Бәхетһеҙ. Тәүфиҡ. Берия. Бояр. Ералаш. Торт. Ыҡ. Алиби. Таяҡ. Рейс. Лама. Елпәҙә. Ыҙа. Ҡалып. Ҡыяр. Елкә. На. Ек. Ысыҡ. Аҙна.

**Вертикаль буйынса:** Батырлыҡ. Бәрәс. Уба. Ялҡаулыҡ. Илле. Ыласын. Таба. Ат. Шаһ. Аҡрын. Тир. Ҙур. Лар. Ҡумыҙ. Елән. Тәхет. Сепрәк. Тәпке. Файл. Ҡоншаҡ. Әсә.

## БАҠСА

# АҒАСТАРҘЫ ҠЫРҠҠЫЛАРҒА ВАҠЫТ

**Емеш ағастарын ҡасан ҡырҡыу яҡшыраҡ? Быны йылдың теләһә ҡайһы ваҡытында башҡарырға мөмкин, әммә быны яҙ көнө эшләү уңайлыраҡ. Шулай тип аңлатты "Башинформ " агентлығына Башҡорт дәүләт аграр университетының үҫемлекселек, үҫемлектәр селекцияһы һәм биотехнологиялар кафедраһы доценты Азат Вәлитов. Уның кәңәштәре баҡсасыларға файҙалы булыр, моғайын.**



- Яҙын ағастарҙың ҡарт һәм ауырыу ботағын ҡырҡһаң, емештәре ҙурыраҡ була, уңыш 30-70 процентҡа арта, ағастың һыуыҡҡа сыҙамлығы ла күтәрелә. Бынан тыш, уларҙы ауырыуҙарҙан һәм ҡоротҡостарҙан эшкәртеү еңелерәк.

Ваҡыттан тыш, башҡа нескәлектәр ҙә бар. Ағасты киҫергә тотоноп алдынан эш ҡоралдарын дезинфекцияларға кәрәк. Юғиһә, инфекция йоҡторорға мөмкин.

Йәш ағастарҙы артыҡ ныҡ киҫмәгеҙ. Ауырыу, һынған, ҡороған ботаҡтарын ғына алығыҙ. Шулай уҡ ботаҡтарҙың структураһын һаҡлау өсөн бер йыллыҡ үҫемлектәрҙе ҡыҫҡартырға мөмкин.

Тотош ҡырҡылырға тейешле ботаҡтың төбө ҡалмаһын өсөн, уны түңәрәкләп кенә алығыҙ. Әгәр ботаҡ ҡалын булһа, ҡабығын зарарламаҫ өсөн аҫҡы яҡтан, шунан һуң өҫтән ҡырҡығыҙ.

Ағастың бөрөһөнә бысаҡ менән теймәҫкә тырышығыҙ. Бөрөһөн ҡалдырып киҫеү өсөн эргәләге ботаҡ яғынан 45 градусҡа ҡыйшайтып, секатор менән ҡырҡығыҙ. Бысаҡ араһы 1-2 мм түбәнерәк, ә икенсеһе 1-2 мм юғарыраҡ урынлашһын.

Ҡарт ботаҡтарҙы ҡырҡҡандан һуң туҡландырығыҙ. Һуҙ, тәү сиратта, азотлы ашлама тураһында бара - улар йәш үҫентеләрҙең үҫеше өсөн кәрәк. Мәҫәләй, ағас төбөнә тупраҡҡа тиреҫ (1 квадрат метрға 45 кг) йәки тауыҡ тиреҫе (12 кг) индерергә мөмкин.

Органика урынына минераль ашлама ҡулланырға ла мөмкин. Мәҫәлән, аммофос, аммиак селитраһы йәки карбамид (мочевина).

Азотлы ашламаларҙы бер юлы түгел, ә ике тапҡыр ҡулланырға кәңәш итәм. Яртыһын - апрелдә, икенсе өлөшөн июнь башында һалығыҙ.

Азоттан тыш, ҡырҡылған ағастарға фосфор кәрәк, сөнки ул сәскә атыуҙы көсәйтә, шулай уҡ калий мөһим. Ул емеш сифатын яҡшырта һәм һыуыҡҡа сыҙамлылығын арттыра. Фосфорҙы яҙын, ә калийҙы көҙөн һалығыҙ.

Ашлама һалғас, 1 квадрат метрға 2-3 күнәк иҫәбендә һыу ҡойоғоҙ. Икенсе көндө тупраҡты йомшартығыҙ.

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**4 апрель "Бәхет хаҡы"** (Х.Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама. 16+
**5 апрель "Еҙнәкәй"** (Х. Ибраһимов, И. Ҡаҙаҡбаев), музыкаль комедия. 12+
**6 һәм 8 апрель "Ваня ағай"** (А. Чехов), тормош күренештәре. 16+
**9 апрель "Йырланмаған йырым һин"** (В.Исхаҡов, А. Абушахманов), музыкаль мелодрама. 16+
**10 апрель "Амеля"** (Н.Крашенинников, инсц. А. Балғазина). 12+

### М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**4 апрель "Седина в бороду или невеста из Имеретии..."** (Б. Рацер, В. Константинов, М. Күлбаев), музыкаль комедия. 12+
**5 апрель "Ҡара һыуҙар"** (М.Кәрим, И. Ҡаҙаҡбаев), төш аралаш өн. 12+
**6 апрель "Униженные"** (З. Биишева, М. Күлбаев), драма. 12+
**8 апрель "Республика ШКИД"** (М. Күлбаев). 12+
**10 апрель "Планета"** (Г. Гришковец, М. Күлбаев). 14+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**4 һәм 5 апрель "Тьма египетская"** (Е. Гилева). 16+
**5 апрель "Гуси-лебеди"** (А. Чалухиди). 12:00 һәм 15:00. 0+
**6 апрель "Ямаҡай бәпкә"** (Г. Х. Андерсен). 14:00. 0+
**6 апрель Доктор Айболит һәм уның дуҫтарының мажаралары"** (К. Чуковский). 12:00 һәм 15:00. 0+
**10 апрель "Әлдермештән Әлмәндәр"** (Т. Минуллин), фантасмагория. 12+

### Х.Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**9 апрель Ғәзим Ильясовтың** концерты. 12+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**4 апрель "№13"** (Р. Куни), комедия. 16+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**5 апрель "Мөхәббәт һәм күгәрсендәр"** (В.Гуркин, М. Күлбаев), комедия. 12+
**6 апрель "Дала буйлап икәү бара"** (Э. Ягудин), музыкаль комедия. 12+
**10 апрель "Их, күгәрсенкәйҙәрем!"** (Ф. Буләков), лирик комедия. 12+

### Сибай концерт-театр берекмәһе

**5 һәм 6 апрель Ризат** һәм **Зинира Рамазановтарҙың** концерты. 12+
**10 апрель "Алға барам",** Раил Өмөтбаевтың концерты. 12+

### БР Милли музейы

**4 апрель "Кот билбауы"**, оҫталыҡ дәресе. 12:00. 6+
**5 апрель "Ғаилә шәмбеһе"** программаһы сиктәрендә "Тамбур сигеүе" оҫталыҡ дәресе. 15:00. 6+
**9 апрель "Малахит ҡумта"** сараһы. 14:00. 6+

МӘҘӘНИ МАЙҘАН

# "ҠУРАЙ ДАНЫ"НА ЛАЙЫҠТАР

**Өфөлә "Ҡурай даны" милли телепремияһының еңеүселәре билдәләнде!**



4-се тапҡыр уҙғарылған "Ҡурай даны" милли телепремияһының Финалы гөрләп-шаулап Башҡортостан дәүләт концерт залында үтте.

Хеҙмәт кешеһен, үҙ һөнәренең оҫталарын данлай, дәртләндерә торған был проект билдәле журналист Рита Өмөтбаева етәкләгән "Ҡурай" телеканалының күркәм һәм әһәмиәтле сараларының береһе. Быйыл премия алты номинацияла тапшырылды. Еңеүселәргә "Ҡурай даны" көмөш миҙалы тапшырылды, ә зал заман геройҙарын алҡыштарға күмде. "Кул оҫтаһы" номинацияһында ирегеттәрҙән - Ҡариҙел районынан Ришат Ғәлинуров, ҡатын-ҡыҙҙарҙан - Иглин районынан Ғәбиҙә Вәлиева; "Ер кешеһе" номинацияһында - Бөрйән районынан Айнур Бейембәтов;

"Иң шәп ауыл хакимиәте башлығы" номинацияһында - Ғафури районынан Әхнәф Нуғайғолов; "Миһырбанлы ғаилә" номинацияһында - Ҡариҙел районынан Мәҙинә һәм Эдик Ғәлимйәновтар; "Тамашасы һөйөүе" номинацияһында - Ишембай районынан Дания Ямалетдинова бүләкләнде.

Тормоштоң биҙәге ябай кешеләр булыуын күрһәткән премия үҙ эшенең оҫтаһы булған ер кешеләренә, кул оҫталарына, ауыл хакимиәте башлыҡтарына, ауыл фельдшерына, миһырбанлы ғаиләләргә бирелде. Мәҫәлән, "Курай даны" милли телевизион премияһының көмөш миҙалына лайыҡ булған Иглин районы оҫтаһы Ғәбиҙә Вәлиева үҙе тыуып үҫкән Ҡурған яҡтары башҡорттарына хас кейемдә, биҙәктәрҙе тергеҙеү менән мәшғүл. "Башҡортостан Республикаһының сигеләгән картаһы" проектын тормошҡа ашырыуҙа ла әүҙем ҡатнашҡан ул. Өйөндә музей булдырған. Ә 24 йыл ауыл биләмәһе башлығы булып эшләүсе Ғафури районы Имәндәш ауылынан Әхнәф Нуғайғолов әйтеүенсә, "Яраткан эш ялҡытмай, дәрт, илһам бирә. Халҡым, тыуған ерем мәнфәғәтенә эшләйем, йәшәү шарттары көйлө булһын өсөн тырышам".

Ауылдар тыуған ере өсөн янып йәшәгән тырыш һәм дәртле замандаштарыбыҙ менән көслө. Бындай кешеләр айырым иғтибарға һәм хөрмәткә лайыҡ. Рита Өмөтбаева етәкләгән проект бына шундай заман геройҙарын таныта ла инде.

# СИЛӘБЕНЕҢ ДАНЛЫҠЛЫ ҠЫҘЫ

**Рәсәйҙә тәүге тапҡыр башҡорт балетының тере легендаһы: балерина, балетмейстер, педагог, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған артисы, Салауат Юлаев ордены кавалеры Эмма Тимерғәзина хаҡында китап сыҡты. Баҫма Силәбелә "Абрис" нәшриәтендә донъя күрҙе.**

Уның авторы - Силәбе яҙыусыһы, режиссер һәм билдәле йәмәғәт эшмәкәре Мөнирә Хәлимова. Китапта танылған балеринаның тормошо һәм ижады, уның дуҫтары, коллегалары, бала сағы, уның биографияһының башҡа мөһим мәлдәре хаҡында йәнле һәм мауыҡтырғыс итеп бәйән ителә. Баҫмала балеринаның шәхси архивынан уникаль фотолар урын алған, уларҙың күбеһе тәүге тапҡыр баҫылған: Мөнирә Хәлимова күренекле балеринаның Ленинград хореография училищеһындағы сығарылыш концертында тәүге сығышынан алып үҙенсәлекле фотойылъяҙмаһын төҙөгән. Китап фактологик материалдарға бай. Төҫлө фотоһүрәттәр һәм текст XX быуаттың бөйөк балеринаһының ҡыҙыҡлы портретын тыуҙыра. Китап авторҙың үҙ аҡсаһына нәшер ителә. Хәҙер Мөнирә Үлмәҫ ҡыҙы Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан атаһы тураһында яңы китап яҙа, тип хәбәр итте башҡорт халыҡ үҙәгенең матбуғат секретары Михаил Хәбиров.

# КРЕМЛЬ ҺАРАЙЫНДА

**Мәскәүҙең Кремль һарайында Башҡортостан Республикаһының Фәйзи Ғәскәров исемендәге дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбленең "Донъя халыҡтары бейеүҙәре" тигән программаһы менән беренсе концерты уҙҙы.**

Тәүге бүлектә тамашасылар башҡорт хореографияһы классикаһы - "Зарифа", "Ете ҡыҙ", "Төньяҡ амурҙары", "Шаян ҡыҙҙар" һәм Фәйзи Ғәскәров мираҫының алтын фондына ингән башҡа бейеүҙәрҙе, шулай уҡ Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 80 йыллығына арналған бейеү композицияларын ҡараны.

Икенсе бүлектә "ғәскәровсылар" донъя халыҡтары: испан, ҡаҙаҡ, хорезм, аргентин, ҡытай бейеүҙәрен һәм башҡа сағыу композициялар тәҡдим итте.

"Кремль һарайында Ғәскәров исемендәге академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле үҙенең концерты менән беренсе тапҡыр сығыш яһаны, - тип хәбәр итте Башҡортостандың мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова. - Беҙҙең өсөн был тарихи ваҡиға булып тора. Беҙ Рәсәй һәм сит ил халыҡтары бейеүҙәрен, бар донъяны берләштергән дуҫлыҡты күрһәттек. Ансамблдең Башҡортостан мәҙәниәтенең сағыу вәкиле һәм илсеһе булыуына ынтылабыҙ".

Республика Башлығы Радий Хәбиров та коллективҡа ҡотлау һүҙҙәрен еткерҙе: "Беҙҙең легендар һәм яратҡан халыҡ бейеүҙәре ансамбле үҙ тарихында тәүгә Кремль һарайында концерт менән сығыш яһай, - тип яҙа Радий Хәбиров социаль селтәрҙәге сәхифәһендә. - Илдең төп майҙансығында "ғәскәровсылар" "Донъя халыҡтары бейеүҙәре" программаһын тәҡдим итте. Ихлас ҡотлайым".

Фәйзи Ғәскәров исемендәге дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле - Башҡортостандың тәүге профессиональ бейеү коллективы. Уны 1939 йылда талантлы хореограф, Игорь Моисеевтың уҡыусыһы Фәйзи Ғәскәров ойошторған. 1989 йылдан коллектив Фәйзи Ғәскәров исемен йөрөтә, 1996 йылда ансамбль академия исемен алды.

# ИЛГӘ ТАРАЛҒАН ЙЫР

**Өфө шағиры Риф Хөснөтдинов ижад иткән һалдат романсы бөтә илгә таралып, ысын халыҡ хитына әйләнде. "Алма баҡсаһы" ("Яблоневый сад") тип аталған йырҙы әрмелә лә, йәйге лагерҙарҙа ла башҡаралар, социаль селтәрҙәге видеояҙмаларҙың иҫәбе-һаны юҡ.**

Йырҙа мәңгелек ҡиммәттәр - тыуған илде һаҡлау, уға тоғролоҡ һәм мөхәббәт хаҡында йырлана. Күптән түгел был йыр хатта Мәскәү өлкәһенең бер мәктәбендә яңғырай. Уҡыусыларҙың видеояҙмаһы йәнә социаль селтәрҙә тарала һәм халыҡты һоҡландыра. "Башинформ" агентлығы журналисы йыр авторы Риф Хөснөтдиновты табып, уның йырының нисек халыҡ хитына әүерелеүен асыҡланы. Баҡтиһәң, автор йырҙың илдең баш ҡалаһына барып етеүен дә белмәгән. "Был йырҙы мин 1975 йылда Ырымбур өлкәһенең Тоцк ҡалаһында әрмелә яҙғайным. Ул йылдарҙа унда бөтә Советтар Союзынан һалдаттар туплана ине. Иҫ киткес рухлы мөхит. Тап ошонда үҙенән-үҙе яҙылды был йыр. Беҙҙең командир, старшина, шул тиклем изге күңелле булды, ул "каптерка"нан сығып, уянып етмәгән йәш рядовойға: "Һөйлә, низәр уйлайһың, һалдат", - ти торғайны. Йыр тап ошо һүҙҙәр менән башлана", - тип уртаҡлашты Риф Хөснөтдинов.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡикәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# СИГЕНМӘҺӘҢ - ТАУҒА МЕНЕРҺЕҢ

Күпме бейек булһа ла, сигенмәһәң - тауға менерһең, күпме ауыр булһа ла, сигенмәһәң - эште еңерһең.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер ярлы ғаиләлә үҫкән егет бай, етеш ғаиләлә үҫкән, белем алған ҡыҙҙы ярата. Ҡыҙ ҙа уны ярата. Ләкин ҡыҙҙың ата-әсәһе уларҙың өйләнешеүенә риза булмай. Ҡыҙыҡай ата-әсә ризалығынан тыш та егет менән бергә булырға әҙер, әммә егет быға юл ҡуймай. Ул үҙенең был ҡыҙға лайыҡлы түгеллеген таный. "Мин сәйәхәткә китәм, - ти егет, - байыған, танылыу яулаған ҡына мин һиңә әйләнеп ҡайтасаҡмын һәм һиңә өйләнәсәкмен..." Ҡыҙыҡай илай башлай, ләкин тәүәккәл һәм ғорур егетте был ҡарарынан һүрелдерә алмай.**

**Ҡыҙ егетен күп йылдар көтә. Был ваҡыт эсендә егет ул ҡәҙәре үк байымаһа ла, кешеләргә бик күп изгелектәр ҡыла һәм киң таныլыу яулай. Бына бер ваҡыт уның башына шундай уй килә: "Мин нимә һөйгәнемдән ҡасам әле? Ул бит минең бәхетем, беҙ бит берберебеҙҙе яратабыҙ. Әгәр ҙә ул мине ошо көйөнсә лә ярата икән, ниңә мин уны көтөргә мәжбүр итәм?" Егет яңынан ҡыҙ эргәһенә әйләнеп ҡайта һәм алдына теҙләнеп, уны көтөп күп йылдарын заяға үткәрергә мәжбүр иткән өсөн ғәфү үтенә. Улар бергә йәшәй башлай. Егет һөйгәне өсөн йәнен бирергә әҙер була, уның һәр күҙ ҡарашын тотоп, һәр теләген алдан белеп тора. Ҡыҙ оло ҡыуаныс кисерә кисереүгә, тик егеттең ҡылыҡтарында ниҙер етмәгән кеүек тоя...**

**Бына бер ваҡыт егеттең бер танышына уның ярҙамы кәрәк була һәм ул алыҫ юлға сығырға тейеш була. "Һин сәфәргә сығаһыңмы?" - тип һорай ҡатыны. "Юҡ, - ти ире, - мин хәҙер һинең эргәңдән бер ҡайҙа ла китмәйәсәкмен. Мин үҙ бәхетемдән ҡасып, оҙаҡ йөрөнөм, ә хәҙер мин һинең эргәңдә генә булырға, бар иғтибарым, хәстәрлегемде һиңә генә бағышларға тейешлегемде аңланым. Миңә һинән башҡа берәү ҙә кәрәкмәй". Был һөйләшеүҙән һуң ҡатындың кәйефе төшә. "Беләһеңме, - ти ул иренә, - беҙ танышҡан ғына мәлдәге теге ғорур һәм тәүәккәл егетте иҫем китеп ярата инем. Мин һине күп йылдар көттөм һәм миңә берәү ҙә кәрәкмәй ине. Эйе, мин һинең - гел генә юғарыға ынтылған, һәр төрлө батырлыҡтарға әҙер булған, кешеләргә ярҙам иткән һәм барыһы ла яратҡан егеттең гел генә эргәмдә булыуын теләнем, һинең менән ғорурландым. Һинең минеке генә икәнеңде белә инем. Әле минең алдымда мохтаждарҙы үҙ ярҙамынан мәхрүм иткән икенсе кеше баҫып тора. Һин үҙгәрҙең. Был - һин түгел..." Был һүҙҙәрҙән һуң йәш ир уйлана һәм бер ҡарарға килеп, тағы ла алыҫ сәйәхәткә юллана. Ә ҡатыны уны көтөп өйҙә ҡала. Ҡатын-ҡыҙ көтөр өсөн, ир-егеттәр эҙләнеү, юлдар гиҙеү өсөн яратылған шул..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһенең күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

1 582218 911006 25013

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Рәсүл БАЙГИЛДИН, Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "СПУТНИК-ЮГ" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (967) 744-77-33. (453400, БР, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури ур., 4 й., 203 офис).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99
**Матбуғат таратыу** 252-39-99

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
3 апрель 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 14 сәғәт 30 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 2857
Заказ - 642